ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

8-14 декабрь (аҡъюлай) 2018

№49 (831)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле


БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Йәшбеҙ ҙә ул...**

тик ҡартбыҙ шул...



**5**

**Ағайҙарыбыҙ - дәрәжә тотҡан,**



ә беҙ уларҙы хөрмәтләй белгән быуын булдыҡ

**8-9**

**Беҙҙә лә...**

һәр театрҙағы кеүек



**11**

**Оҙон-оҙон ағайҙар килер,**

Һуғымың ҡайҙа, тиер...



**12-13**

**ТВ-программа 14**


***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! 3 декабрҙән 13 декабргә тиклем 2019 йылдың тәүге ярты йыллығына гәзит-журналдарға ташламалы хаҡ менән арзаныраҡҡа яҙылыу ун көнлөгө иғлан ителде. Ошо мәлдә республиканың һәр ҡалаһында-ауылында ДО665 индекслы "Киске Өфө"гә - 532 һум 14 тингә, Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары һәм I - II төркөм инвалидтары - 478 һум 56 тингә яҙыла алаһығыҙ. Был мәғлүмәтте йәнәшәгеҙҙәге дуҫ-иштәрегеҙгә, туғандарығыҙға ла еткерһәгеҙ ине. Әйҙәгеҙ, ошо ун көнлөктә "Киске Өфө"гә лә дәррәү яҙылайыҡ, тип саҡырабыҙ.***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының эшен нисегерәк күҙ алдына килтерәһегеҙ?

***Ирек БИКМӘТОВ, ауыл хужалығы фәндәре кандидаты, Сибай ҡала башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты рәйесе:*** Әйткәндәй, тап ошо көндәрҙә Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетында етәкселек алмашынды. Ошо хаҡта ла әйтеп үтеү кәрәктер. Һис һүҙһеҙ, Әмир Ишемғолов тырышты. Дәүләт ярҙамы әҙ булһа ла, уға ҡарап ултырманы: ойоштороу юлдарын табып, төрлө мөмкинлектәрҙе файҙаланып эшләне. Ә инде ҡоролтайҙан китеүе дөрөҫ ҡарар булды, сөнки унең иңенә тағы бер ғәйәт ҙур бурыс йөкмәтелә: умартасыларҙың 2021 йылда Башҡортостанда үтәсәк халыҡ-ара конгресы - "Апимондия"ға әҙерлек алып барасаҡ ул. Ике ҡуяндың ҡойроғон тотоп булмай, халыҡ-ара йыйын үткәреү - етди эш, унда бит республикабыҙҙың ғына түгел, Рәсәйҙең даны ла яҡланасаҡ. Яңы етәксебеҙ Данир Ғәйнуллинды ла бөтәбеҙ ҙә яҡшы беләбеҙ: төшөп ҡалғандарҙан түгел бер ҙә. Уға ҙур өмөттәр бағлап, уңыштар теләйек, бергәләп эшләйек һәм төрлө яҡлап ярҙам итәйек. Әлбиттә, Рәсәй һәм халыҡ-ара кимәлдә Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы абруйын күтәреү буйынса күп эшләргә кәрәк беҙгә. Халҡыбыҙҙың элекке данын ҡайтарыу, ил ағаһы булырҙай шәхестәребеҙҙе үҫтереү, бының өсөн уларҙы белемле, илһөйәр һәм дә телһөйәрҙәр итеп тәрбиәләү, демография мәсьәләләре - ҡоролтайҙың күп проблемалары араһында иң мөһимдәре, тип иҫәпләйем. Шуға күрә лә беҙ, мәҫәлән, Сибай башҡорттары ҡоролтайы ағзалары, әсә телен уҡытыу йүнәлешендәге эште ата-әсәләрҙең үҙҙәренән башлап ебәрҙек. Ата-әсәләр конференцияһы үткәргәйнек, шунда башҡортса уҡып үҫкән балалары ил һәм халыҡ-ара кимәлдә уңышлы шәхестәр булараҡ танылған Йәнтүриндар, Байрамғоловтар, Ҡотләхмәтовтар ғаиләләрен сәхнә түренә сығарҙыҡ. Башҡарма комитет ағзалары иһә һәр береһе үҙенә беркетелгән мәктәптәр менән башҡорт теле уҡытыу мәсьәләләре буйынса эшләй. Үҙ телебеҙҙе үҙебеҙ яҡламаһаҡ, ситтән килеп берәү ҙә эшләмәйәсәк. Милли мәсьәләләрҙе ҡуйыртмай, тыныс һәм ни теләгәнебеҙҙе белеп эшләргә өйрәнәйек, тием, сөнки "ура" ҡысҡырыр, "ҡылыс болғар" замандар үтте - беҙгә бөгөнгө шарттарға ярашлы эш алымдары кәрәк. Ә миңә, милләтебеҙ мәнфәғәттәрен, туған телебеҙҙе, ер-һыуыбыҙҙы яҡлаусы гарантия булып торған Рәсәй һәм Башҡортостан Конституцияларында, тейешле закондарҙа, норматив акттарҙа үҙебеҙ өсөн таяныс булырҙай статьялар таба алмайбыҙмы ни? Закон акттарына нигеҙләнеп, грамоталы эшләргә өйрәнәйек, хоҡуки яҡтан белемебеҙҙе камиллаштырайыҡ. Шул осраҡта беҙгә үҙ мәсьәләләребеҙҙе хәл итеүҙе бер кем дә тыймаҫ.

**(Дауамы 2-се биттә).**

УҠЫУСЫ ҺҮҘЕ

# ЫШАНЫСЛЫ БАҪМА

**Бала саҡтан уҡырға ярattым. Өйгә килгән район гәзитен барыһынан да алдараҡ уҡыр өсөн хат ташыусыны тышҡа сығып көтөп йөрөр инем. Үҙемдең донъямды ҡорғас та, гәзит-журналдарҙы күп алдырҙым. Ләкин йылдар үтеү менән уларҙың һаны ҡыҫҡарҙы.**

Эш бында яҙылыу хаҡының ҡиммәт булыуында ла түгел (әлбиттә, ул да үҙ ролен уйнай), ә уларға булған ышанысымдың кәмеүендә. Ташҡа баҫылған һәр хәреф, өтөр өсөн яуаплы икәнен онотоп китә ҡайһы бер баҫмалар. Уға өҫтәп, өҫтән-мөҫтән генә яҙылған мәҡәләләрҙең күбәйеүе, төплө тикшерелмәгән, ә күберәген имеш-мимешкә таянған мәғлүмәткә урын бүленеүе, мәсьәләгә бер яҡлы ғына ҡараш - ошондай етешһеҙлектәр ваҡытлы матбуғат сараларының бәҫен төшөрә, уҡыусыны ситкә этәрә. Һанап үтелгән кәмселектәрҙе үҙем яратып уҡыған "Киске Өфө"лә осратҡаным юҡ былай. Был баҫмала нигеҙле фекерҙәр ярылып ята. Бөгөн бөтә өлкәлә лә тәнҡит көслө. Гәзит-журналдар ҙа был күренештән ситтә ҡалмай. Ләкин тәнҡиттең дә төрлөһө бар - кешене бөгөп һалырҙай аяуһыҙы ла, уға үҙенең ҡылығы, хәбәре тураһында уйланырға этәргес булғаны ла. "Киске Өфө"ләр иһә әҙәпле һәм тәрбиәле генә итеп тәнҡитләү һәләтенә эйә булыуҙары менән алдыра.

Баҫмалағы күп төрлө рубрикалар араһында иң яратып уҡығаным - "Заман башҡорто". Башҡортомдың тарихында үҙ исемдәрен яҡты эҙ итеп ҡалдырыр милләттәштәребеҙ хаҡында яҙып барыуығыҙ бик тә урынлы, сөнки улар йәштәргә үрнәк, ә ололарға ғорурлыҡ. Төрлө үләндәр менән ҡыҙыҡһынған кеше булараҡ, "Халыҡ дауа"һын ҡыҙыҡһынып күҙәтеп барам. Ғөмүмән, һаулыҡҡа бәйле бөтә яҙмалар ҙа уҡымлы. Тарих менән әллә ни ҡыҙыҡһынмаһам да, гәзиттәге ошо йүнәлештәге һәр мәҡәлә менән танышып барам һәм үҙем өсөн күп мәғлүмәт алам. "Тарихнамә" - ошо өлкәлә махсус шөғөлләнмәгән кеше өсөн кәрәкле бит. Ҡыҫҡа, ләкин шул уҡ ваҡытта бай мәғлүмәтле ул.

Ҡайһы бер теләктәремде лә әйтеп үтәйем. Үҙ баҫмағыҙҙа халыҡты иҡтисади, хоҡуки өлкәләге яңылыҡтар менән таныштырып барыуығыҙ яҡшы булыр ине. Бигерәк тә һалым, банк эшмәкәрлеге, ипотекаға бәйле һорауҙарға аңлатмалар биреүсе рубрикалар булдырыу үҙен аҡлар. Шулай уҡ ҡануниәтте белмәү һөҙөмтәһендә күптәр төрлө күңелһеҙ хәлдәргә тарый; тимәк, "Һорау - яуап" рубрикаһын яңынан тергеҙеү бик урынлы булыр. Республикала күп балалы ғаиләләр бихисап. Улар хаҡындағы яҙмалар ҙа гәзит уҡыусы өсөн ҡыҙыҡлы булмаҡсы, миңеңсә. Шулай уҡ фермерлыҡ, баҫыу эше менән булған эшһөйәрҙәр тураһында ла күберәк уҡығы килә.

**Шәриф СӨНӘҒӘТОВ.**



12+

## ӘЙТЕР҅ ҺҮҘЕМ БАР!

**Мәғариф системаһында электән урта һөнәри белем биреү ҙур урын алып торҙо. Бөгөнгө атаәсәләрҙең күпселегенең балаларына юғары белем биреүҙе үҙенең төп бурысы тип иҫәпләгән мәлдә лә районларҙа колледждар эшләй, студенттар ҙа бар.**

# ЙӘШТӘР АУЫЛҒА ҠАЙТҺЫН

Биш йыл элек Баймаҡ ауыл хужалығы техникумы, Баймаҡ ҡалаһының 105-се һөнәри лицейы, Әбйәлил районының 93-сө һөнәри училищеһы, Иҫке Собханғолдоң 132-се һөнәри училищеһы бергә ҡушылып, Урал аръяғы агросәнәғәт колледжы тип атала башлағайны. Әлеге мәлдә һәр районда ошо уҡыу йортоноң филиалы эшләй. Ауыл хужалығы элекке ҡеүәтен юғалтып торған йылдар әҙемтәһелер, хәҙер абитуриенттар башҡараҡ йүнәлештәргә өҫтөнлөк бирә, әйтәйек, энергетика, нефть эшкәртеү колледждары студенттары һан яғынан күберәк. Шулай ҙа беҙгә ерен, ер эшен, малсылыҡты яратҡандар килә. Ырымбур, Силәбе өлкәләренән дә студенттарыбыҙ бар. Беҙҙең төбәктә йылҡысылыҡ әүҙем үҫешә, шуға ла ветеринария бүлегендә ошо боронғо шөғөлгә тотоноусылар белем ала. Аталарына эйәреп иген сәскән, иген иккән егеттәр механизатор һөнәрен үҙләштерә. Һуңғы йылдарҙа республикала агросәнәғәт үҫешә, тимәк, киләсәктә агроном, механизатор, ветеринар һөнәрҙәре популяр буласаҡ, тип ышанабыҙ. Кеше ашамайынса йәшәмәй, ресурстар бар, колледж артабан да йәшәр. Әлеге мәлдә ауыл хужалығы ҡоролмаларын механизациялау, ауыл хужалығы продукцияһын етештереү һәм эшкәртеү технологияһы, ветеринар медицина, иҡтисад мөнәсәбәттәре һәм бухгалтер иҫәбе тигән бүлектәр эшләй. Заманса ятағыбыҙ бар, унда йәшәү, туҡланыу түләүһеҙ. Студенттарыбыҙ араһынан артабан юғары белем алыу өсөн вуздарға уҡырға инеүселәр күп. Шулай уҡ Сибай, Магнитогорск ҡалаларында ветеринария буйынса үҙ эшен асҡан егеттәребеҙ байтаҡ. Йәғни, был һөнәрҙәр менән йәштәр һәр ерҙә лә үҙ урынын табасаҡ.

Боронғо уҡыу йорто булғанлыҡтан, беҙҙә белем биреү кимәле бик юғары ҡуйылған. Минең бөгөн бер проблемаға туҡталып киткем килә. Педагогик состав өлкәнәйә бара. Шуға беҙгә уҡытыусы йәштәр күберәк килһен ине. Колледж ауылда урынлашҡан бит инде, билдәле, йәш кешенең ауылда йәшәгеһе килмәй. Йәш белгесте саҡырһаң, эш хаҡы күпме, тип һорай. Эйе, 15 мең эш хаҡы менән уларҙы ҡыҙыҡтырып булмай. Ауылға эшкә ҡайтҡан йәштәргә юғары эш хаҡы ҡуйырға кәрәк, тип иҫәпләйем. Студенттарға йәш уҡытыусылар менән эшләүе күпкә ҡыҙығыраҡ. Күҙәтеп йөрөйөм, яңы уҡытыусы килһә, уға тартылалар, артынан эйәреп йөрөйҙәр. Урынбаҫарым Рәйлә Сафиуллинаны, уҡытыусыбыҙ Айгөл Ғәниеваны һәр ерҙә маҡтап йөрөйөм. Етәксе булараҡ, мине борсоған төп нәмә шул - ауыл хужалығы буйынса белем бирергә тәжрибәле йәштәр килмәй ауылға. Урта мәктәп Урғаҙала һәм артабан иң яҡыны Сибайҙа ғына. Эргә-тирәләге ауылдарҙа мәктәптәр ябылып бөттө тиерлек. Балалар ҡалаға интернатҡа уҡырға китһә, ҡабат ҡайтҡылары килмәй. Ә ул ошо ерҙә уҡып, урта белем алһа, аҙаҡтан, бәлки, тыуған яғына эшкә ҡайтыр ине.

**Мөнир МӨХӘРЛӘМОВ.**
**Урал аръяғы агросәнәғәт колледжының Урғаҙа филиалы директоры.**

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# *Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының эшен нисегерәк күҙ алдына килтерәһегеҙ?*

**(Башы 1-се биттә).**

***Закир ИШМЫРҘИН, Ғафури районы, Сәйетбаба ауылының ветерандар Советы рәйесе:*** Халыҡ-ара йәмәғәт ойошмалары берлеге булараҡ, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы республикабыҙҙың ижтимағи тормошонда бик ҙур көс һәм абруйға эйә булырға тейеш, минеңсә. Сөнки ул республикабыҙға исем биргән, ҡаһарман тарихы, бар донъяға билдәле күренекле һәм батыр улдары булған аҫаба башҡорт халҡының мәнфәғәттәрен яҡлау маҡсатында ойошторолған; милләт булараҡ уны артабан да һаҡлап ҡалыу, тергеҙеү, үҫтереү мәсьәләләре менән шөғөлләнә һәм бөтөн эш йүнәлешен ошо маҡсатҡа буйһондора алырға тейеш. Бына ошо маҡсаттың бөтөн мөһимлеге, юғарылығы кимәленән ҡараһаң, беҙҙең ҡоролтай Башҡарма комитеты эшендә, йомшаҡ итеп әйткәндә, бер ни тиклем һүлпәнлек, баҙнатһыҙлыҡ күҙгә салына. Бер яҡтан, был аңлашыла ла: юғары властар милли мәсьәләләр хаҡында фекер алышыуҙы бик өнәп еткермәй икәнде беләбеҙ, шуға күрә лә, төбәктәр етәкселегенә уны ҡуйыртмау хаҡында әленән-әле күрһәтмәләр бирелеп кенә тора. Ә түбәндәгеләргә иһә етә ҡала: теге йәки был һүҙҙе лозунг итеп күтәрергә әҙер генә торалар һәм шуның менән "йәмәғәтселек фекере" тыуҙырырға тырышалар. Шул арҡала килеп тыуып торған һүлпәнлектең әсе һөҙөмтәләрен беҙ һуңғы йылдарҙа артығы менән татып өлгөрҙөк тә инде. Минең республикабыҙ мәктәптәрендә туған тел уҡытыу менән бәйле сәйәсәтте күҙҙә тотоуымды аңлағанһығыҙҙыр инде. Федераль һәм урындағы властар, башҡа милли төбәктәр ҡоролтайҙары менән тиңдәр араһында тиң буларлыҡ кимәлдә аҡыллы мөнәсәбәт ҡороу, федераль һәм республикабыҙ Конституциялары - Төп закондарыбыҙға ныҡлыраҡ таянып, компетентлы һөйләшеүҙәр аша килешеүгә өлгәшергә тырышыу һиҙелмәй әлегә. Ҡоролтай эштәрен юғары кимәлдә алып барыу өсөн уның етәксеһенән дә шундай уҡ кимәл талап ителә. Һәр хәлдә, юғары вазифалағы был кешене мин халҡының ялҡынлы патриоты булараҡ та, һүҙе үтемле абруйлы шәхес итеп тә күргем килә, ә урындағы властарҙың тыңлаусан йомошсоһо итеп түгел. Шул уҡ ваҡытта ул үҙенең аҡылын, белемен һәм дә мәҙәнилек кимәлен власть менән уртаҡ тел табып эшләүгә йүнәлтергә бурыслы, сөнки уға ҡарап, тотош башҡорт халҡы хаҡында фекер туплана; уның тарихына, теленә, проблемаларына мөнәсәбәт тыуа. Ҡоролтайҙың Башҡарма комитеты ағзалары эшенә килгәндә иһә, улар ысынлап та төп эш башҡарыусылар, халыҡ араһында эшләүселәр, урындарҙағы ҡоролтайҙар менән ныҡлы бәйләнеш булдырыусылар булһын, тип теләйем. Уларҙың ойоштороу саралары тап ана шул район ҡоролтайҙары эшмәкәрлегендә сағылырға тейеш тә инде. Беҙҙең Ҡоролтай халҡыбыҙҙың тарихын, мәҙәни һәм ауыҙ-тел хазиналарын, йола-традицияларын, әсә телен һаҡлауға һәм яҡлауға ана шундай кимәлдә тупланырға, ойоштороларға тейеш. Ҡыҫҡаһы, мәктәптәрҙә әсә теле уҡытыу менән Мәғариф министрлығы шөғөлләнмәй икән, был бурысты Ҡоролтай үҙ ҡулдарына алырға бурыслы, тип уйлайым.

***Ләйсән ЙОСОПОВА, тарих фәндәре кандидаты, Стәрлетамаҡ башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты рәйесе:*** Тәү сиратта шуны әйтеп үтергә кәрәк: мин халҡымдың бөтөн донъяла йәшәгән милләттәштәремде берләштергән ойошмаһы булыуы менән ғорурланам.

Ҡоролтайҙы ойоштора алған, уның төп идеяларын, маҡсатын төплө итеп формалаштырған, ташҡа баҫҡан тәүге ҡоролтай составы, уның тәүге рәйесе Нияз ағай Мәжитов шул тиклем ҙур эштәр эшләп ҡалдырҙы. Ул эштәрҙең күбеһе әле лә милләтебеҙ өсөн бик мөһим.

Хәҙерге ваҡытта, әлбиттә, Ҡоролтай яңы форматта эшләй. Шулай ҙа яңы алымдар әлегә күп түгел. Беренсенән, Башҡарма комитет, минеңсә, йәштәр менән ныҒыраҡ эшләргә тейеш. Был турала күптән һөйләшеүҙәр бара. Йәштәр - идеялар генераторы, улар энтузиаст, улар максималистар. Шул энергияны, шул көстө бергә-бергә яҡшы эштәргә йүнәлтеү беҙҙең бурысҡа әүерелһен ине. Бының өсөн йәштәр менән уртаҡ тел табып, диалогтар, форумдар, коучингтар һәм башҡа саралар үткәреү, уртаҡ пландар төҙөү кәрәк. Бер-беребеҙҙе ишетер өсөн гелән аралашып, кәңәшләшеп тороу зарур.

Икенсенән, тағы бер көнүҙәк мәсьәлә. Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте янында Терминологик комиссия, шулай уҡ "Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында"ғы БР Законын тормошҡа ашырыу буйынса комиссиялар эшләй торғайны. Бөгөн бармы улар, эшләйме - бер кем белмәй. Улай ғына түгел, урындарҙа, райондарҙа, ҡалаларҙа был комиссиялар бөтөнләй юҡ кимәлендә. Булғандары ла формаль рәүештә генә теркәлгән. Ҡоролтайыбыҙға тиҙ арала Хөкүмәт алдында ошо комиссияларҙың эшен яңыртыу мәсьәләһен ҡуҙғатырға кәрәк.

Һәм уйҙарымды йомғаҡлап, шуны әйтергә теләйем. Республикабыҙҙың 100 йыллыҡ юбилейы башҡорттарҙы ҙур, масштаблы саралар үткәреүгә өндәй. Был тарафта беҙ бер төптән, дәррәү күтәрелеп, берҙәм эшмәкәрлек алып барырбыҙ, тигән ышаныста ҡалам.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Белорет металлургия комбинатында бөгөн импортты алмаштырыусы ҡорос арҡандар етештереү цехы асылды. Тантаналы сарала Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров ҡатнашты. Яңы ҡорамал полимер менән ҡапланған 6-12 шәлкемле арҡандар үрергә мөмкинлек бирә. Улар тау-руда һәм нефть сығарыу, шулай уҡ күпер һәм карап төҙөү тармаҡтарында импортты алмаштырырға тейеш. Проект 60-тан ашыу яңы эш урыны булдырырға мөмкинлек бирә.

✓ Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров төбәккә инвестициялар йәлеп итеү эшмәкәрлеген координациялауҙы республика Башлығы хакимиәте етәксеһе Александр Сидякинға йөкмәтте һәм уға айына бер тапҡыр эшҡыуарҙар менән осрашырға һәм улар менән хәл итеүҙе талап иткән мәсьәләләрҙе тикшерергә ҡушты. Бынан тыш, Радий Хәбиров тулы күренеш алыу өсөн эшҡыуарҙар менән махсус тура бәйләнеш каналын булдырыу бурысын йөкмәтте.

✓ Башҡортостанда бөтә ғаиләләргә балаһы тыуғанда янғын тураһында иҫкәртеүсе приборҙар бирелә. Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров тейешле указға ҡул ҡуйған. Быға тиклем янғын тураһында иҫкәртеүсе приборҙарҙы ишле һәм социаль яҡтан хәүефле ғаиләләр генә ала ине. 2018 йылдың 1 ғинуарынан балаһы тыуған һәр ғаилә ошо ҡорамал менән тәьмин ителә.

✓ Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров Фәйзи Ғәскәров исемендәге дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбленең күренекле балетмейстер, БАССР-ҙың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре Хашим Мостаевтың тыуыуына 100 йыл тулыуға бағышланған концертта булды.

✓ Өфө ҡыҙы, Рәсәй Үҙәк банкы рәйесе Эльвира Нәбиуллина Forbes версияһы буйынса донъяның иң абруйлы 50 ҡатын-ҡыҙы иҫәбенә инде. Ул рейтингта 49-сы баҫҡысты биләй. Германия канцлеры Ангела Меркель уҙып барған 2018 йылда иң абруйлы ҡатын-ҡыҙ тип танылған. Икенсе баҫҡыста - Бөйөк Британия премьер-министры Тереза Мэй, өсөнсөлә - Халыҡ-ара валюта фонды башлығы Кристин Лагард.

КИЛЕШМӘЙЕМ!

# ЯМАНҒА ЮЛ ҠУЙМАЙЫҠ!

**Бөгөнгө заманда бер-береңә ауыр һүҙҙәр ташлау бер ни тормай башланы, шул ныҡ хәүефләндерә. Айышына төшөнмәйенсә, бар нәмәлә кемделер ғәйепләү ғәҙәти күренешкә әйләнә барыуы ҡурҡыныс. Бигерәк тә интернет донъяһы быға киң юл аса. Унда инеп алып, исемен йәшереп, берәй вазифалы кешегә, йә уңышлы берәй милләттәшенә бысраҡ өйөү осраҡтарын күрәм дә, йәмәғәт, ҡайҙа тәгәрәйбеҙ, тип оран һалғым килә. Кешенең ауыр хәлдә ҡалған осрағында ошондай ысул ҡулланыу бер ни түгел ҡайһы бер бысраҡ уйлы кешеләргә. Ундайҙар төрлө төркөмдәрҙә үҙҙәренең бысраҡ эшен ойоштора, фейк хәбәрҙәр урынлаштыра, намыҫлы кешеләргә яла яға.**



Ата-әсәләр балаһының тәрбиәһеҙлегенә, уҡырға теләмәүенә, насар өлгәшеүенә тик уҡытыусыны, мәктәпте ғәйепләп, уларға ғәйеп өйөргә ғәҙәтләнеп китте. Балаһын ҡурсалап, мәктәптә бер ниндәй ҙә файҙалы эштәрҙә ҡатнашырға рөхсәт итмәгән ата-әсәләр киләсәктә, ҡартайған көндәрендә ни күререн беләме? Ҡырҡ йылға яҡын мәктәптә эшләү дәүерендә күпте күрелде: мәктәпкә килеп, хатта дәрескә бәреп инеп, уҡытыусыларҙы әрләп, яманлашып йөрөгән ата-әсәләрҙең балалары хәҙер уларҙың үҙҙәрен ҡыйырһытҡан осраҡтар ҙа күп. Ундай ата-әсәләр бөгөн дә бар, шуныһы хәүефләндерә, уйландыра. Хәҙерге ата-әсәләр белемлерәк тә, аҡыллыраҡ та, тип уйлаһаҡ та, уларҙың ҡайһы берҙәре бөгөн дә балаһы алдында мәктәпте, уҡытыусыларҙы тикшерә, яманлай, ошо негатив менән интернетты тултыра. Балалары ла ошоно уҡ ҡабатлай.

Хәҙер мәктәп тормошоноң бөтөн кире күренештәрен ләззәтләнеп тороп яҡтырталар. Әйтерһең, насар өлгәләр менән хәлде төҙәтеп була. Ғәйеп уҡытыусыла булған осраҡтар ҙа етерлек, тик ниңә уларҙан дөйөм һығымта яһарға? Эштәр былай барһа, мәктәпкә эшкә килергә теләүселәр ҙә ҡалмаясаҡ. Ил буйынса мәктәптең абруйы кәмеүенә уҡытыусылар ғына ғәйепле түгел, бында йәмғиәтебеҙҙең бөгөнгө хәле ғәйепле. Телевизорҙы асһаң, хәҙер һәр бер каналда барған ток-шоуҙарҙа бер үк тема - бер-береңә хыянат, бер-береңде һәмәйтеү, аҙғынлыҡ күренештәре һағыҙ кеүек сәйнәлә. Һәм шундайын да әҙәпһеҙ рәүештә! Кем кемдән бала тапҡан шуның менән маҡтаналар, әйтерһең дә, бөтә ил "малахайник"ка әүерелде (иң беренсе билдәлелекте Андрей Малахов ошондай тапшырыуҙар ойоштороп яулағайны - шуға төрттөрәүем). Лариса Гузееваның "Әйҙә, өйләнешәйек!" тапшырыуында иһә бер нисә тапҡыр өйләнешеп айырылышҡан кешеләрҙең бөтөн ил алдында тағы ла йәр һайларға килеүе ғәҙәти күренеш итеп раҫлана; тормош шулай була икән, тигән хата ҡараш йәштәр аңына һалына; алып барыусыларҙың бәйелһеҙлеге лә саманан ашып китә, ауыҙҙарынан сыҡҡан һүҙҙәрен контролдә тота алмаған саҡтары ла күп. Аңлайым да ул был тапшырыуҙарҙың ил проблемаларын онотторол, халыҡ аңын томалар өсөн ойошторолғанын, тик бында бит үҫеп килеүсе быуын аңына төптө хата ҡараштар норма рәүешендә һеңдерелә... Былдай тапшырыуҙарға йәш сикләүе һалыныуға ҡарамаҫтан, балалар ҙа, уларҙың ата-әсәләре лә был сикләүгә төкөрөп тә бирмәй, әлбиттә. Киреһенсә, был уларҙа тағы ла көсләрәк ҡыҙыҡһыныу тыуҙыра. Минеңсә, былдай тапшырыуҙар барыбер ниндәйҙер "әҙәп цензураһы" аша үтергә тейештер, тигән фекерҙәмен. Бик булмаһа, уларҙы һуңыраҡ ваҡытҡа ҡалдырырға ла мөмкиндер.

Телевидение һәм интернетта яҡшылыҡ, изгелек төшөнсәләре күберәк булырға тейеш, сөнки бөгөн тап ошо форматтан сығып андары формалаша балаларҙың. Балаларыбыҙ рухлы, зиһенле булып үҫһен өсөн бөтөн саралар аша яҡшылыҡ һәм яҡтылыҡ нурҙары таратырға, ошо хаҡта күберәк яҙырға, һөйләргә, күрһәтергә кәрәк. Яманлыҡ, насар күренештәрҙә ғибрәт итеп күрһәтеү ҙә хатта хәүефле икәнен онотмайыҡ: ул бит кире йоғонтоға ла эйә. Негатив менән бер ваҡытта ла тәрбиәләп булмай. Шуны онтмайыҡ.

**Ринат ШӘЙБӘКОВ,**
**педагог, хеҙмәт ветераны.**
**Белорет районы Йөйәк ауылы.**

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишерелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# НИ ӨСӨН БЕҘ АҘ ҺАНЛЫ?

***Әхәт ВИЛДАНОВ, филология фәндәре докторы:*** Һан сифатҡа күсә, тигән аксиома бар. Шунан сығып, халыҡ һаны тураһында фекер йөрөтәйек. Элек башҡорт халҡы билән йәшәгән территория ҙур булған, хәҙер боронғо Башҡортостандың бер бәләкәй мөйөшөндә тороп ҡалдыҡ. Күп милләттәштәр күрше өлкәләр территорияһында тороп ҡалды, республикабыҙ сиктәрендә йәшәгәндәренең дә һаны һәр халыҡ һанын алыу үткәргән һайын үҙгәреп тора. Етәкселәр алып барған сәйәсәткә лә бәйле килеп сыға был, әммә беҙ һаман күпселекте тәшкил итә алмайбыҙ. Әҙселектә булған халыҡ хәл иткес ҡарарҙар ҡабул ителгән саҡта үҙ мәнфәғәтен яҡлай алмай, бүтән халыҡтар мәнфәғәтенә эйәреп китә фекер. Был күптән билдәле, хатта суверенитет ҡабул ителгән замандарҙа, башҡорт теленә дәүләт теле статусын бирергә уйлаған саҡта ла күренде. Беҙҙең милләт депутаттары аҙ булғас, ныҡ икеләнделәр, хәлде Мостай Кәрим үҙгәртеп ебәрҙе. Ләкин башҡорт телен дәүләт теле булараҡ республикала бөтә өлкәлә лә ҡулланыу йәһәтендә лә беҙ әҙселекте тәшкил иткән өсөн күпмә ҡаршылыҡтар килеп сыҡты.

Ә ни өсөн беҙ һаман аҙ һанлылар рәтендә йөрөйбеҙ? Бында халыҡтың да ғәйебе юҡ түгел, ғаиләлә әс бала булһа - күп балалы, имеш. Бына беҙ ғаиләлә 9 бала үҫтек, бөтәбеҙ ҙә бынамын тигән кеше булдыҡ. Варис Хәсәновтар ғаиләһендә лә 9 бала ине, ауылда башҡаларҙа 5-6 бала була торғайны. Һуғыштан һуңғы йылдар тураһындағы бер документты ҡарап ултырғайным, ун өйлөк ауылдың башланғыс мәктәбендә 24 уҡыусы йөрөгән. Хәҙер был ауылда мәктәп юҡ. Башҡорт халҡында "әс бөртөк" тигән төшөнсә бар, ул аҙ генә тигәнде аңлата. Төшөнсәләр ҙә үҙгәргән мәлдә йәшәйбеҙ. Ни өсөн шулай милләтебеҙҙә әс бөртөк бала үҫтереп йәшәп ятабыҙ, тиһәң, тормош көтөүе ауыр булыуға һылтаналар. Бер ҡасан да еңел булмаған бит ул, әммә башҡорт халҡының үҙен һаҡлау инстинкты көслө булған, беҙ шул турала ла онотоп барабыҙ. Ауыл халҡы эш юҡҡа һылтана, йәштәр ситкә сығып китеп ғаилә ҡора алмай йөрөй. Бер ун йыл самаһы элек кенә Ҡолғона ауылында 80 егет өйләнмәгән тип һанап сығарҙыҡ. Әле лә был хәл үҙгәрмәгән, был социаль сәйәсәткә лә бәйлелер инде. Былар барыһы ла милли булмышыбыҙ һайығыуына килтерә, төрлө өлкәлә быға миҫалдар табырға мөмкин. Тел мәсьәләһендә - саф башҡорт теле булыуҙан туктап, ярымруссаға күсеп барабыҙ. Үҙ сиратында был йолаларға, ғөрөф-ғәҙәттәргә йоғонто яһай, саф башҡорт йолалары онотолоп, интернационалгә әйләнеп киләбеҙ. Сәнғәтте әйтеп тораһы ла түгел - иҫтә ҡалырлыҡ моңло бер йыр юҡ, кемдең ялҡауы килмәй, тота ла йыр ижад итә. Телевидениела ла шул уҡ хәл, бынамын тигән "Ҡурай" каналы бар, әммә йыр-бейеү, алдан төшөрөлгән концерт, конкурстарҙан тыш, бер нәмә күрһәтелмәй. Нишләп шунда данлыҡлы ҡурайсыларыбыҙ, йырсылар, сәнғәт әһелдәре тураһында тапшырыуҙар юҡ? "Бөйөктәрен һанламаған халыҡтың киләсәге юҡ", тигән Ризаитдин Фәхретдин. Бөйөктәребеҙ ысынлап та бөтөп бара, сәнғәттә генә түгел, әҙәбиәттә лә, башҡа өлкәлә лә хатта юғары исем йөрөткәндәре араһында ла атап ҡына әйтерлек шәхестәребеҙ һирәгәйә бара.

Башҡорт халҡының интеллигенция вәкилдәре милли булмышыбыҙҙы һаҡлау мәсьәләһенең киҫкен тороуын белә, тик улар араһында ла күңеленә яҡын алып ҡайғыртыусыһы бар, бар ҡул һелтәүсеһе лә. Ә ябай халыҡ араһында бер инициатива күрһәтеүсе юҡ. Милли мәҙәниәт тамыры саф башҡорт ауылында, ҡатнаш халыҡ йәшәгән ауылда ла, ҡалала ла түгел. Беҙҙең үҙенсәлегебеҙ шул. Милли булмышыбыҙ ҙа бәләкәй аулдарҙа һаҡлана, туған телебеҙ ҙә шунда ғына сафлығын юғалтмай йәшәп килә. Тик бөгөн бәләкәй ауылда хатта мәктәп тә юҡ, ҡайҙан сығырға тейеш беҙҙең милләтте үҫтерер бөйөк кешеләр? Халыҡҡа ғына өндәшеп тә был мәсьәләне яйға һалып бөтөп булмай, етәкселәр ҙә күрергә, аңларға тейеш беҙҙең хәлде. Бөтә нәмәне асыҡлыҡҡа ҡорорға тырышып ятҡан саҡта үҙебеҙҙең тауышты ла ишеттереп ҡалырға тырышайыҡ. Ҡүмәгерәк, берҙәмерәк булһаҡ, ишеткән дә булырҙар ине, бәлки...

**Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Фәнис Әминев Баймаҡ районы хакимиәте башлығы вазифаһын башҡарыусы итеп тәғәйенләнде. Фәнис Ғәбдрәшит улы һуңғы йылдарҙа Баймаҡ ҡала биләмәһе хакимиәтен етәкләне.

✓ Айбулат Хажин Башҡортостандың мәғариф министры вазифаһын башҡарыусы итеп тәғәйенләнде. Бынан алда ведомство етәксеһе Гөлназ Шафиҡованың отставкаға китеүе хаҡында белдерелгәйне. Айбулат Хажин әлегә тиклем Башҡортостандың Мәғариф өлкәһендә контроль һәм күҙәтеү идаралығын етәкләне.

✓ Башҡортостан Хөкүмәте премьер-министры Рөстәм Мәрҙәнов, икенсе эшкә күсеү сәбәпле, отставкаға китте. Республика етәксеһе Рөстәм Мәрҙәновҡа "һөйбәт һәм ғәҙел эшләгәне" өсөн рәхмәт белдерҙе һәм уны Салауат Юлаев ордены менән бүләкләне. Алдан киң мәғлүмәт саралары хәбәр иткәнсә, Рөстәм Мәрҙәнов Рәсәй Федерацияһы Үҙәк банкының Урал баш идаралығы етәксеһе вазифаһына тәғәйенләнә.

✓ Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитетының сираттағы ултырышында йәмәғәт ойошмаһы рәйесе яңынан һайланды. Был вазифала Әмир Ишемғоловты Күсемһеҙ мәҙәни мираҫ объекттарын һаҡлау һәм файҙаланыу буйынса ғилми-етештереү үҙәге директоры Данир Ғәйнуллин алмаштырҙы. Ул Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайының иҫәп буйынса туғыҙынсы етәксеһе булды.

✓ Башҡортостандың сығарылыш класс уҡыусылары Берҙәм дәүләт имтиханына инеү хоҡуғын биргән йомғаҡлау иншаһын яҙҙы. Мотлаҡ һынауҙы республиканың 18 меңдән ашыу ун беренсе класс уҡыусыһы тапшырҙы. 440-ҡа яҡын кеше изложение яҙҙы, уларҙың 67-һе - һаулыҡ мөмкинлектәре сикле балалар, 370-тән күберәге - колония уҡыусылары. Эште башҡара алмағандар киләһе йылдың 6 февралендә йәки 8 майында уны ҡабаттан яҙа ала.

✓ Өфө ҡыҙы, баш ҡаланың тау саңғыһы буйынса олимпия резервындағы спорт мәктәбе тәрбиәләнеүсеһе Елизавета Сәлихова Италияла сноуборд буйынса Халыҡ-ара ярыштарҙа иң шәбе булды. Ҡыҙ "Параллель слалом-гигант" дисциплинаһында алтын миҙал яуланы.

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# БАЛА... АҠСА КИЛТЕРӘ

**2019 йылдың 1 ғинуарынан баланы йәш ярымға тиклем тәрбиәләгән өсөн айлыҡ пособиеның максималь күләме 2018 йылда 24 мең һум урынына 26 мең һумға тиклем арта.**

"2019 йылдың 1 ғинуарынан бала тәрбиәләгән өсөн айлыҡ пособиеның максималь күләме 26 152 һум 27 тин тәшкил итәсәк", - тип белдерҙеләр Социаль страховкалауҙың федераль фондында. Пособиены иҫәпләү өсөн бынан алдағы ике йылдағы, ләкин сикке базанан юғары булмаған эш хаҡы алына. Фондҡа страховка иғәнәләрен иҫәпләү өсөн сикке базалар 2017 йылда - 755, 2018 йылда 815 мең һум тәшкил итә. Киләһе йылдың 1 ғинуарынан йөклөлөк һәм бала табыу буйынса пособиеның минималь күләме 52 мең һумға тиерлек еткерелә. Социаль страховкалау фондында асыҡлыҡ индереүҙәренсә, страховкаланған кешенең хеҙмәт хаҡы юҡ йәки бик аҙ икән, пособие минималь эш хаҡынан сығып иҫәпләнә. Хеҙмәткә минималь түләү яңы йылдан 11 280 һумға тиклем арта. Әлегә ул 11 163 һум тәшкил итә. Баланы йәш ярымға тиклем тәрбиәләгән өсөн айлыҡ пособиеның минималь күләме иһә 2019 йылдың 1 ғинуарынан 4,5 мең һумға ҡәҙәр арта. Әгәр страховкаланған кешенең эш хаҡы юҡ йәки бик аҙ булһа, был пособие минималь хеҙмәт хаҡынан сығып иҫәпләнә. Бынан алда баланы йәш ярымға тиклем тәрбиәләгән өсөн айлыҡ пособиеның минималь күләме 4,4 мең һумға тиклем артҡайны.

# ТАШЛАМА МЕНӘН...

**Башҡортостанда күп балалы тип танылған ғаиләлә ата-әсәнең (балалыҡҡа алыусының) йәки опекундың (попечителдең) береһен транспорт һалымын түләүҙән азат итәләр. Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтайҙың пленар ултырышында республика законына төҙәтмәләр ҡаралды.**

"Ошондай ярҙам сараһын двигателенең ҡеүәте 150 ат көсөнә ҡәҙәр тәшкил иткән енел автомобилдәргә, шулай уҡ ҡеүәте 125 ат көсөнә тиклем тәшкил иткән автобустарға ҡарата билдәләргә тәҡдим ителә. Льгота хужаның теләге буйынса һәр типтағы бер транспорт сараһына бирелә һәм 2018 йылдың 1 ғинуарынан 2024 йылдың 31 декабренәсә ғәмәлдә була. Закон проекты ишле ғаиләләргә булышлыҡ итеүгә, республикалағы демографик хәлде яҡшыртыуға йүнәлтелгән", - тип аңлатма бирҙе Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай рәйесе Константин Толкачев.

Бынан алда республика Хөкүмәте, әлеге закон проектын депутаттарға ҡарауға индереп, двигателенең ҡеүәте 100 ат көсөнә тиклемге автобустар, йөк машиналары, гидроциклдар, катерҙар, моторлы кәмәләр һәм башҡа транспорт хужаларына льгота биреүҙән баш тартырға тәҡдим иткәйне. Әммә Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров, закон проекты менән танышып сыҡҡандан һуң, халыҡ өсөн ғәмәлдәге барлыҡ льготаларҙы һаҡларға ҡушты.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ҺАҠ ЭШ ИТ!

**Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров Юристар көнө һәм Рәсәй Федерацияһы Конституцияһының 25 йыллығы уңайынан "XXI быуатта конституционализм" Рәсәй юридик форумының Өфөлә үткән пленар ултырышында ҡатнашты. Ул дәүләт власы һәм граждандыҡ йәмғиәте диалогында кеше хоҡуҡтарына арналды.**

Пленар ултырыш барышында кеше хоҡуҡтары, власть менән йәмғиәттең үҙ-ара бәйләнеше, хәҙерге этапта Конституцияның һәм халыҡ-ара хоҡуҡ институттарының роле мәсьәләләре буйынса профессиональ һөйләшеү булды. "Бындай майҙансыҡтар бик әһәмиәтле. Улар ғалимдарға аралашыу, тәжрибә уртаҡлашыу мөмкинлеге бирә. Кешелек донъяһы бик етеҙ, заманса һәм көнөркәсле. Шуға күрә бер-берендә тыңлау һәм бер аҙ алға киткәндәрҙең тәжрибәһен үҙләштереү мөмкинлеге булыуы бик шәп", - тине Радий Хәбиров.

Модераторҙың конституцияны үҙгәртеү мөмкинлеге тураһында һорауына Башҡортостан етәксеһе ошолай тип яуап бирҙе: "Уҡығанда мине конституция - изге документ тип өйрәттеләр. Уның менән бик һаҡ эш итергә кәрәк. Дөйөм тауыш биреү юлы менән ҡабул иткәнбеҙ икән, был килешеүгә хөрмәт итергә тейешбеҙ. Шуға күрә, һәр төрлө үҙгәрештәргә етди һәм кире ҡараштамын. Конституция билдәле бер ваҡытта ҡабул ителә, тормош алға бара. Төҙәтмәләр индерелергә тейешле мәсьәләләр килеп тыуа. Тағы ла бер таптҡыр әйтәм: уйлап эш итергә кәрәк. Конституцияның изге документ булыуын юрист-студенттарҙың аңына беренсе курстан уҡ һеңдереү зарур".

# СИРАТ - УРМАНҒА

**Тирлән ҡасабаһы Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбировтың Белорет районы буйлап эш сәфәренең тәүге пункты булды. Бында ул "Планета" физкультура-һауыҡтырыу комплексын асыуҙа ҡатнашты.**



Радий Хәбиров ҡасаба халҡын ошо ваҡиға менән ҡотланы. Уның һүҙҙәренсә, "Тирлән үҙ тарихында ауыр һынауҙар үтте, металлургия производствоһы ябылды, үткән быуаттың 90-сы йылдары башында ҡасаба һиу баҫыуҙан ҙур зыян күрҙе. Ошо ҡыйынлыҡтарға ҡарамаҫтан, ҡасаба йәшәй һәм үҫешә, физкультура-һауыҡтырыу комплексының асылыуы - шуға миҫал". Тирлән ҡасабаһында йәшәүселәр республика етәксеһе менән аралашыу барышында Радий Хәбировтың Белорет районында ағас әҙерләү мәсьәләһенә иғтибар итеүен үтенде. Уларҙың әйтеүенсә, районда ағастарҙы рөхсәтһеҙ ҡырҡыу осраҡтары бар. "Республикала карьерҙарҙы эшкәртеү мәсьәләһендә тәртип урынлаштыра башланыҡ, өс енәйәт эше ҡуҙғатыла. Урман да иғтибарыбыҙҙан ситтә ҡалмай, ағас әҙерләү компанияларының йыш ҡына тәбиғәт байлығын һаҡлау тураһында уйланмауын беләм", - тине Радий Хәбиров. Уның һүҙҙәренсә, республикала һунар итеү ҙә күп һорауҙар тыуҙыра, был өлкәлә лә тәртип урынлаштырырға кәрәк.

# СИБАЙҘА...

**Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров Ҡытай инвесторҙары менән Сибайҙа цемент заводын төҙөү буйынса күләмле проектты тикшерҙе. Инвестицияларҙың дөйөм күләме яҡынса 13 миллиард һум тәшкил итер тип күҙ уңында тотола.**

Осрашыуҙа Ҡытай инвесторҙары һәм Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте Аппараты етәксеһе - вице-премьер вазифаһын башҡарыусы Илшат Тажетдинов һәм Сибай мэры Рөстәм Афзалов ҡатнашты. Унда Урал арьяғында инвестиция проектын тормошҡа ашырыу параметрҙары, төҙөлөштөң ваҡыты һәм яҡтарҙың бурысы тикшерелде. Ҡытай компанияһының цемент заводын төҙөүе хаҡында килешеүгә 2016 йылдың июнендә "Урал арьяғы-2016" иҡтисади форумы барышында өлгәшелде. Проектты ғәмәлгә ашырыу башта 300-ҙән ашыу эш урынын булдырырға мөмкинлек бирер ине, тәү сиратта - Ҡытайҙан эшсе көстәр өсөн. Һуңғараҡ предприятиела урындағы хеҙмәткәрҙәр ҙә эшләр, киләсәктә иһә коллектив мең кешегә тиклем артыр, тип күҙалланды. 2017 йылдың ғинуарында республиканың Иҡтисади үҫеш министрлығы заводты өҫтөнлөклө инвестиция проекттары исемлегенә индерҙе. Предприятие 2018 йылда асылырға тейеш ине, ләкин ул төҙөлә башламаған әле.

# ШӘП ҺӨТТӘН СЫР

**Францияның Savencia Fromage & компанияһының генераль директоры Жан-Поль Торрис Башҡортостанда етештерелгән һөткә юғары баһа бирҙе. Үҙенең фекерен донъяның алдынғы сыр етештереүсеһе Рәсәй Президенты Владимир Путин ҡатнашлығындағы "Рәсәй саҡыра" форумының пленар сессияһы барышында белдерҙе.**

Санкциялар индерелгәндән һуң компания Рәсәйгә сыр оҙатыуҙы туҡтатты, тип билдәләне Торрис. Шуға күрә предприятие Рәсәй биләмәһендә производство асыу өсөн урын эҙләне. Ағымдағы йылдың мартында уларҙың компанияһы "Нерал" компаниялар төркөмөнән "Бәләбәй һөт комбинаты" акционерҙар йәмғиәтенә мажоритар пакет һатып алды. "Бынан алда беҙ күп фермаларҙа һәм майҙансыҡтарҙа булдыҡ. Ләкин һөт йыйырға һәм уны һаҡларға мөмкин булған заманса производствоны тап Башҡортостанда таптыҡ. Унда кешеләр һәйбәт эшләй, тиҙ өйрәнә, был, һис шикһеҙ, беҙҙе шатландыра. Төбәк властары ла ярҙам итә. Шәп сыр шәп һөттән етештерелә", - тип һыҙыҡ өҫтөнә алды Жан-Поль Торрис. Яҡын арала Франция компанияһы Башҡортостан предприятиеһын яңырта һәм сырҙың сифатын яҡшыртыу өсөн инновацияларҙы индерә башлай, тип хәбәр итә Башҡортостандың Ауыл хужалығы министрлығы.

# Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Өлфәт Мостафин менән Башҡортостандың беренсе Президенты Мортаза Рәхимовтың дуҫтарса осрашыуы уҙҙы. Өфө ҡалаһы башлығы һәм төбәктең элекке етәксеһе бергә эшләүҙәрен иҫкә төшөрҙө: Рәхимов идара иткән йылдарҙа Өлфәт Мостафин Башҡортостан Республикаһы Президенты Хакимиәтенең финанс-хужалыҡ идаралығын етәкләгән. Осрашыуҙа улар Өфөнө төрлө өлкәләрҙә үҫтереү һәм артабанғы хеҙмәттәшлек мәсьәләләрен тикшерҙе.

✓Транспорт һәм юл төҙөлөшө буйынса дәүләт комитеты рәйесе Тимур Мөхәмәтйәнов һөйләүенсә, Өфөнән көньяҡ сығыу юлында Ағиҙел аша ике күпер араһында яңыһын төҙөү 2019 йылдың беренсе кварталында башлана. Яңы күпер төҙөлөшөн 2021 йылда тамамлау күҙаллана. Икенсе этап - Зәки Вәлиди урамы менән Салауат Юлаев проспекты киҫелешендә юл үткәргесте төҙөкләндереү эштәре. Ул алты һыҙатка тиклем киңәйтелә.

✓Быға тиклем "Вся Уфа" телекомпанияһы директоры булып эшләгән Алина Сөләймәнова Өфө ҡалаһы вице-мэры вазифаһын биләй. Ул йәмәғәтселек менән бәйләнеш һәм мәҙәниәт мәсьәләләре өсөн яуаплы. Отставкаға ғариза яҙған Өфө хакимиәте башлығы урынбаҫары Сынтимер Баязитовтың вәкәләттәре уға күсә.

✓Әскәт Хәйруллин Өфө хакимиәте башлығының төҙөлөш һәм архитектура мәсьәләләре өсөн яуаплы урынбаҫары итеп тәғәйенләнде. Был вазифала ул 2017 йылдың декабренән вице-мэр булып эшләгән Артур Хромецты алмаштырҙы. Яңы вазифаға тәғәйенләнгәнсе Әскәт Хәйруллин "Башнефтезаводстрой" компанияһының генераль директоры булып эшләне.

✓4 декабрҙә "Рәсәй-1" телеканалы эфирында Рәсәй аэропорттарына бирелергә тейешле енеүсе исемдәр иғлан ителде. Хәҙер Өфөлә һауа ҡапҡалары Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәримдең исемен йөрөтәсәк. Рәсәйҙә 50-гә яҡын аэропортҡа исем биреү буйынса аҙаҡҡы ҡарарҙы ил президенты Владимир Путин ҡабул итә, тип билдәләне ойоштороусылар.

**✓ Әммә медицина, мәғариф һ.б. өлкәләрҙәге кадрҙар ҡытлығына, төрлө тармаҡтарҙа хаҡлы ялдағы йәки пенсия йәшенә етеп барыусылар эшләүенән һәм йәштәрҙең күпләп ситкә китеүенән сығып ҡарағанда, ҡыуанырлыҡ һандар юҡ.**



ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ



**Өфө ҡала хакимиәтендә үткән сираттағы оператив кәңәшмәнең онлайн трансляцияһы, моғайын, күптәрҙең иғтибарын йәлеп иткәндер. Сөнки унда олоһон да, кесеһен дә берҙәй ҡыҙыҡһындырған тема: 2017 йылда халҡы миллиондан ашҡан ҡалаларҙың ҡайһы бер социаль-иҡтисади күрһәткестәре буйынса отчет тыңланды. Баш ҡаланың дәүләт статистика бүлеге начальнигы Оксана Даянова килтергән һандар, бер яҡтан, ҡыҙыҡһындырһа һәм тынысландырһа, икенсе яҡтан, аптырата һәм һорауҙар тыуҙыра.**

# ЙӘШБЕҘ ҘӘ УЛ...

## тик ҡартбыҙ шул...

Ыңғай мәлдәрҙән: Башҡортостандың баш ҡалаһы Рәсәйҙең миллионлы 13 ҡалаһы (Мәскәү менән Санкт-Петербургты иҫәпкә алмағанда) араһында 1131,4 миллион халҡы менән (2016 йыл менән сағыштырғанда 5,3 мең кешегә күберәк) 8-се урында тора. Былтыр миллионер ҡалаларҙың ҡайһы берҙәрендә тыуым күрһәткесе кәмеһә, һигеҙендә, шул иҫәптән Өфөлә лә тәбиғи үҫеш күҙәтелә (2016 йылда +5480, 2017 йылда + 2294). Шулай булыуға ҡарамаҫтан, тыуым - демографик проблемаларҙың береһе, сөнки халыҡ артһын өсөн 15-49 йәштәге һәр ҡатын-ҡыҙға тыуым коэффициенты 2,15 - 2,20 булырға тейеш булһа, әлеге ваҡытта ул 1,37 генә тәшкил итә. Был йәһәттән Ҡаҙан алда бара - уларҙың коэффициенты 1,679. Үлем күрһәткесе буйынса республикала 1 мең кешегә 12,4 кеше тура килһә, Өфөлә - 10,8. Хаҡлы ялдағыларға килгәндә, былтыр уларҙың һаны 1 мең кешегә 267 булһа, Рәсәй буйынса - 296.

Шулай ҙа бөгөн халыҡты иң ҡыҙыҡһындырғаны - эш хаҡтарылыр ул. Сөнки хөкүмәт ни тиклем генә тынысландырырға тырышһа ла, етәкселәр халыҡты буш вәғәҙәләр менән туйҙырып булмағанын яҡшы аңлай. Рәсәй Хөкүмәте Рәйесе Дмитрий Медведев та: "Аҡса юҡ, әммә һеҙ бирешмәгеҙ!" - тиһә лә, статистика килтергән һандар ысынбарлыҡ менән тура килмәй. Былтыр эре һәм урта предприятиеларҙа бер хеҙмәткәрҙең уртаса эш хаҡы айына 42,313 мең һум тәшкил иткән. 2016 йыл менән сағыштырғанда ул 8,2 процентҡа үҫкән. Уртаса эш хаҡы буйынса былтыр Өфө үҫеш темпы 8 проценттан артҡан миллионер ҡалалар араһында дүртенсе урынды биләй. Рәсәйҙә иһә был осорҙа уртаса күрһәткес 39,137 мең һум була. Ысынында күптәрҙең эш хаҡы 20 меңгә лә етмәй...

Статистика һандары буйынса фекер йөрөткәндә, баш ҡаланы артта һөйрәлеүсе йәки табышһыҙ тип әйтеп булмай. 2017 йылда ул эре һәм урта предприятиелар етештергән 746 миллиард һумлыҡ продукцияны ситкә оҙата һәм ошо күрһәткес буйынса икенсе урында тора. Был сумманы халыҡ иҫәбенә бүлгәндә, бер кешегә 660 мең һум тура килер ине.



Былтыр Өфөлә төрлө сығанаҡтар иҫәбенән 675,4 мең квадрат метр торлаҡ төҙөлә. 1 мең кешегә 598 квадрат метр күрһәткесе менән ул халҡы миллиондан артҡан ҡалалар араһында етенсе урын биләй. Ә инде социаль-мәҙәни тәғәйенләнештәге объекттар буйынса уҙған йылда 1675 урынлыҡ белем биреү учреждениелары ғына ҡулланыуға тапшырыла. Төҙөлөш тармағында уртаса эш хаҡы 45,248 мең һумға етә һәм беренсе урында тора. Торлаҡ баҙарындағы яңы төҙөлгән йорттар буйынса Өфө 1 квадрат метрға хаҡтар 50 меңдән ашып киткән төбәктәр исемлегенә инә (52,248 мең һум) һәм бишенсе баҫҡысты биләй.

Баш ҡаланың иҡтисадын үҫтереүгә йүнәлтелгән төп капиталға инвестициялар күләме 102,7 миллиард һум тәшкил итә, йәғни 2016 йыл менән сағыштырғанда 93,8 процент. Был йәһәттән Өфө Дондағы Ростовтан, Екатеринбургтан, Ҡаҙандан ҡала дүртенсе урында килә. Тирәяҡ мөхитте һаҡлауға һалынған инвестициялар 21,7 процентҡа артып, 4811,4 миллион һумға барып баҫа. Был миллионер ҡалалар араһында Омскиҙан ҡала икенсе урын тигән һүҙ.

Йыл дауамында эре һәм урта предприятиеларҙың килеме 2016 йыл менән сағыштырғанда 171,7 процентҡа күберәк булып, 220,8 миллиард һум булһа, зыянлы эшләүсе эре һәм урта предприятиелар араһында баш ҡалабыҙ 12-се урынға төшә (33,7 процент).

Өфө ҡала хакимиәтенең Финанс идаралығы мәғлүмәттәренә ярашлы, берләштерелгән бюджет сығымдары 24,2 миллиард, йәғни һәр кешегә 21,8 мең һум (2016 йыл менән сағыштырғанда 1000 һумға кәмерәк) тәшкил итә һәм был күрһәткес уны 9-сы урынға төшөрә.

Сығышының һуңында Оксана Даянова Өфө ҡала хакимиәте башлығы Өлфәт Мостафиндың мегаполис халҡының уртаса йәше менән ҡыҙыҡһыныуына баш ҡалаһын йәштәр ҡалаһы булыуын, уртаса йәш 37,8 йәш тәшкил итеүен белдерҙе. Ғөмүмән, дөйөм сығыштан, халыҡтың уртаса йәшенән сығып фекер йөрөткәндә, барыһы ла ал да гөл, хатта ниндәйҙер кимәлдә башҡаларҙан алда барған да кеүекбеҙ. Әммә медицина, мәғариф һ.б. өлкәләрҙәге кадрҙар ҡытлығына, төрлө тармаҡтарҙа хаҡлы ялдағы йәки пенсия йәшенә етеп барыусылар эшләүенән һәм йәштәрҙең күпләп ситкә китеүенән сығып ҡарағанда, ҡыуанырлыҡ һандар һәм факттар юҡ. Ә ҡала халҡының уртаса йәшен бары тик бында уҡыу йорттарының күп булыуы һәм уларҙа 17-23 йәшлек йәштәр уҡыуы ғына йәшәртеп тора. Был мәсьәлә тап Өлфәт Мансур улының: "Яҡшы уныштар бар, әммә беҙгә алға барырға, ҡайһы бер өлкәләр буйынса эшләргә кәрәк", - тигән һығымтаһына ла тура килә, моғайын.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

КӨН ҠАҘАҒЫ

# ЮЛДА ЙӨРӨГӘНДӘ...

**Ун ай эсендә Өфөлә балалар һәм үҫмерҙәр ҡатнашлығында 173 юл-транспорт ваҡиғаһы теркәлгән, 183 бәлиғ булмаған граждан төрлө йәрәхәттәр алған, ике бала һәләк булған. Был һандар ҡала хакимиәтендәге сираттағы оператив кәңәшмәлә яңғыраны.**

Эске эштәр министрлығының Өфө ҡалаһы буйынса идаралығының ЮХХДИ бүлеге начальнигы Илнур Садиҡов белдереүенсә, һуңғы өс йылда баш ҡала юлдарындағы һәләкәттәрҙә балалар үлеме осрағы теркәлмәүен иҫәпкә алғанда, быйылғы һандар хәүефләндерә. Ул ғына ла түгел, былтырғы ошо осор менән сағыштырғанда балалар һәм үҫмерҙәр ҡатнашлығындағы юл-транспорт ваҡиғаларында (131) йәрәхәтләнеүселәр (105) һаны артҡан. Бында төп сәбәп транспорт менән идара итеүселәрҙә, ә балиғ булмағандарҙың ғәйебе 35 осраҡта теркәлә. Бигерәк тә аварияләр шаршамбы һәм йома көндәрендә, көндөҙгө сәғәт 3 менән киске 9 араһында күҙәтелә һәм зыян күреүселәрҙең күпселеген (101) малайҙар тәшкил итә. Ни өсөн тап ошо ваҡыт арауығында балалар юлда зыян күреүен тап ошо ваҡытта уларҙың төрлө түңәрәктәргә һәм секцияларға барыуы менән аңлаталар ҙа ул, әммә бында профилактик саралар-ҙың етешмәүе, балаларҙың да, транспорт хужаларының да юл ҡағиҙәләрен һанға һуҡмауы үҙ ролен уйнамай ҡалмайҙыр, моғайын. Сөнки статистика күрһәтеүенсә, юл-транспорт ваҡиғаһына эләккән балаларҙың 84-е йәйәүле була, шуларҙың 33-ө юлды йәйәүлеләр өсөн билдәләнгән урындан сыҡҡанда зыян күрә. Бында, водителдәр транспорт менән идара итергә эскән килеш ултыра, тип, бөтөн ғәйепте уларға ғына япһарып та булмай. Шул уҡ һандарға мөрәжәғәт иткәндә, иҫерек водителдәр йыл башынан 80 авария яһаһа, уларҙа 119 кеше йәрәхәтләнә, биш кеше һәләк була. Ә дөйөм алғанда, йыл башынан баш ҡалала 1572 юл-транспорт ваҡиғаһы теркәлгән, уларҙа 1983 кеше зыян күргән, 50-һе һәләк булған, шул иҫәптән 31-е - йәйәүле. Калинин (20), Орджоникидзе (11), Октябрь (8) районддары һәләк булыусылар иҫәбе буйынса "алдынғылар" рәтендә.

Өфө ҡала хакимиәтенең Коммуналь хужалыҡ һәм төҙөкләндереү идаралығы начальнигы Владимир Чернов белдереүенсә, Өфөлә юл билдәләре "СУРСИС" МУП-ы ҡарамағында һәм бөгөнгә 28109 билдә бар. Быйыл уларҙың бер өлөшө алыштырылған, ҡабаттан монтажланған һ.б. эштәр башҡарылған. Юлдарҙа балаларҙың йәрәхәт алыуын ҡыҫҡартыу маҡсатында ГОСТ талаптары үҙгәртелгән һәм уларҙы тормошҡа ашырыу талап ителә. 128 дөйөм белем биреү учреждениеһының 84-е юлға сығыуын иҫәпкә алып, мәктәптәр эргәһендә 162 өҫтәмә юл билдәһе ҡуйылған, билдә һалынған һәм Т-7 светофорҙары урынлаштырылған. Маҡсатлы федераль программаға ярашлы, 8 объектҡа матди-техник ресурстар бүленгән, әммә улар талап ителгән күләм өсөн етерлек түгел.

Юл-транспорт ваҡиғаларын анализлау асыҡлауынса, Өфөлә авария ихтимал булған 83 урын бар. Киләсәктә улар буйынса етди һәм ентекле эш алып барырға кәрәк буласаҡ та инде. Шулай уҡ ҡаланың һәләк булыусылар һаны күп булған төньяҡ өлөшөнә күҙәтеү камералары ҡуйыу ҙа көнүҙәк проблема. Дөйөм алғанда Өфөлә тағы ла 126 видеокамера, бигерәк тә ҡалаға ингән урындарҙа, ҡуйыу ихтыяҗы бар.

**Земфира ХӘБИРОВА.**

## Х А Л Ы Ҡ   Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Ашҡаҙан өсөн

❖ Ашҡаҙан ауыртҡанда дөгө ярҙам итер. Ярты стакан дөгөнө йыуып, 8 стакан һыу өҫтәргә лә, талғын утта иҙелгәнсе бешерергә. Көнөнә 4 тапҡыр яртышар стакан эсергә.

### Яраларҙан

❖ Оҙаҡ уңалмаусы яраны тәүҙә водород перекисы менән йыуып, стериль бинтҡа бешкән тары ярмаһы һалып, яраның өҫтөнә 2 сәғәткә ҡуйырға. Көнөнә бер нисә тапҡыр ҡабатларға.

### Варикоз

❖ 100 мл зәйтүн майы, 20 г ҡарағас сайыры, 15 г аҡ май, 8 г һары, 5 г аҡ балауыҙ. Талғын утта болғай-болғай иретергә һәм ҡан тамырҙарына һаларға.

### Тоҙ ултырғанда

❖ Кистән 1 стакан ҡайнар һыуға шыршы йәки ҡарағас тубырсыҡтары һалырға, иртән 5 минут ҡайнатырға, һөҙөргә. 200 мл-ға тиклем еткереү өсөн ҡайнаған һыу өҫтәргә һәм 100 мл төнәтмәне шунда уҡ, ҡалғанын кисен эсергә.

### Һөйәлдән

❖ 10-ар таблетка "Аспирин" менән "Анальгин"ды иҙеп, 3 флакон йод ҡушырға. Кис һайын һөртөргә. Һәр 3 көн һайын аяҡтарҙы йылы һыуҙа топ, йомшарған тирене алырға.

### Юғары ҡан баҫымы

❖ Сәскә атҡан кишерҙең йәшел өлөшөн ҡырҡып киптерергә. Кис һайын 1 ҡалаҡ кишер япрағына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға ла, һыуынғас, һөҙөргә. 1 ҡалаҡ шәкәр болғатып, йоҡлар алдынан эсергә. 3 аҙна дауаланғандан һуң ҡан баҫымы нормаға килә. Әммә дауаланыуҙы туҡтатмағыҙ, йыл буйына 1-әр ай ял итеп 3-әр аҙналыҡ курстар үтегеҙ. 2 йылдан һуң профилактика өсөн тағы ҡабатларға.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

✓ *Ул ваҡытта башҡорттар бөтә Көньяҡ Урал территорияһын биләп йәшәгән һәм үҙҙәренә яҡын һәм алыҫыраҡ күршеләре менән әүҙем иҡтисади-сауҙа, мәҙәни, сәйәси бәйләнешкә ингән.*



ТАРИХЫҢДЫ ТАНЫТ...

**Тарих фәндәре докторы, профессор Нияз Мәжитов үҙе тере саҡта Өфө ҡалаһының үҙәк өлөшөндәге ҙур археологик асыш тураһында бихисап хеҙмәттәр яҙҙы, мәғлүмәтте Башҡортостан һәм Рәсәй йәмәғәтселеге иғтибарына еткерә торҙо. Нияз Ғәбделхаҡ улы 2006-2007 йылдарҙа Пушкин урамының түбәнге кварталдарында урынлашҡан Өфө-II ҡаласығында алып барылған археологик ҡаҙыу эштәре һөҙөмтәһендә табылған ҙур ултыраҡ ҡалдыҡтарын (ҡәлғә стенаһы, торлаҡ урындары, тимер иретеү мейестәре, ювелир оҫтаханаһы, бик күп табыштар, шул иҫәптән XIV быуат аҡсалары) тикшертеү өсөн ваҡытында Мәскәүҙән һәм Ҡаҙандан юғары квалификациялы белгестәрҙән торған ирекле эксперттар төркөмө саҡырыуға өлгәште. Улар археологик ҡаҙылма материалдары менән ентекләп танышҡас, был ҡаласыҡтың V быуаттан алып XVI быуат баштарына тиклем өҙлөкһөҙ кеше йәшәгән ҙур ултыраҡ (ҡала) цитаделе (кремле) булыуы тураһында һығымта яһаны. Нияз Мәжитовтың гәзит уҡыусылар иғтибарына тәҡдим ителгән был материалы Өфө-II ҡаласығы тарихы һәм башҡа башҡорт ҡалалары тураһында.**



# КҮПТӘН БИЛДӘЛЕ ХӘҠИҠӘТ,

## йәғни IX-X быуаттарҙағы башҡорт ҡалалары тураһында

Әл Иҙриси һүрәтләгән ҡалаларҙың береһенең хәҙер киң билдәле булған Башҡорт ҡалаһы булыуы тураһындағы фараздан һис баш тартырлыҡ түгел. Үҙенең күп билдәләре менән ул Гүрхан ҡалаһына оҡшаған: а) ул бер үк ваҡытта булған ҡаласыҡтар һәм асыҡ ултыраҡтар комплексынан тороп, ҙур территория биләгән; б) унда алтындан биҙәү әйберҙәре эшләй торған ҙур ювелир оҫтаханаһы һәм тимер иретеү мейестәре эҙҙәре табылды; в) ҡала эсендә йөҙәрләгән (меңәрләгән булмаһа) кургандарҙан торған некрополь (зыярат) булып, унда иҫәпһеҙ күп алтын, көмөш һәм башҡа ҡиммәтле материалдарҙан яһалған әйберҙәр табыла, уларҙың күбеһе VI-VIII быуаттарға ҡарай. Ошо күрһәткестәр буйынса был ҡаланың ябай булмағанлығы асыҡ күренә.

IX-XII быуаттарҙағы башҡорт ҡалалары тураһындағы ошо мәғлүмәттәр күп нәмә хаҡында һөйләй:

- ул ваҡытта башҡорттар бөтә Көньяҡ Урал территорияһын биләп йәшәгән һәм үҙҙәренә яҡын һәм алыҫыраҡ күршеләре менән әүҙем иҡтисади-сауҙа, мәҙәни, сәйәси бәйләнешкә ингән;
- Башҡортостан эре металлургия үҙәге булып, башҡорт металл эшкәртеүселәре үҙҙәренең продукцияһын Шаш (Ташкент) һәм Хорезм тарафтарына тиклем сығарған;
- Көньяҡ Уралдан сығарылыусы тауарҙар араһында ҡиммәтле йәнлек тиреләре ҙур урын тотҡан;
- башҡорт иленә ҡоронан һәм ҙур йылғалар буйлап алып барыусы каруан юлдары билдәле булған;
- башҡорттар һуғыш ҡоралдарын оҫта эшләүселәр булып танылып, улар яһаған ҡылыс, уҡ-һаҙаҡ, эйәр, өҙәңге һәм биҙәү әйберҙәре Евразия далалары халыҡтарында ҙур һорау менән ҡулланған;
- башҡорт ҡалалары уҙ-үҙен тәьмин итә алыусы һөнәрселек үҙәктәре булып, ул замандарҙың иҡтисади-сауҙа һәм мәҙәни-сәйәси тормошонда әүҙем ҡатнашҡан;
- ҡалалар тиҙ генә барлыҡҡа килмәй, шуның өсөн әл Иҙриси һәм уның информаторҙары һүрәтләгән башҡорт ҡалаларының оҙайлы тәү тарихы V-VIII быуаттарға, бәлки, унан да әүәлерәк ваҡыттарға барып тоташалыр;
- ҡалалары булыу факты башҡорттарҙың башында билдәле хандар торған үҙ дәүләтселегең, властың нәҫел буйынса тапшырылыуын раҫлай; ошо урында әл Иҙриси яҙғанды күрһәтеп китеү артыҡ булмаҫ: "Уның менән (Нәмджан ҡалаһы менән. - **Авт.**) төркиҙәрҙән булған бер кеше идара итә. Уларҙа власты атанан улға тапшырыу ғәҙәте игелекле эштәре һәм ябай халыҡҡа, арҙаҡлы заттарға яҡшы мөнәсәбәтле булыуҙары арҡаһында өҙөлмәй килә";
- сығанаҡтарҙа башҡорттарҙың төрки телле булыуы айырым билдәләнә.

Әл Иҙрисиҙең ошо хеҙмәте фәндә күптән билдәле булыуы тураһында әйткәнлек инде, әммә Өфө, Ҡаҙан, Пермь, Силәбе, Һамар һәм башҡа ҡалаларҙың археологтары уны Көньяҡ Урал тарихын һәм археологияһын өйрәнеүҙә ҡулланманы. Был хеҙмәттә бәйән ителгән факттарҙы ентекле тикшереү урынына улар Көньяҡ Уралдың IX быуатҡа тиклем тик венгр ҡәбиләләре йәшәгән территория булып, бында "Бөйөк Венгрия" ("Magna Hungaria") исемле ил булыуы тураһындағы идея менән мауыҡып китте. Улар фекеренсә, венгрҙарҙың байтаҡ өлөшө Уралда тороп ҡалған һәм бында IX-X быуаттар сигендә генә килгән башҡорттар составына инеп киткән. Һеҙҙең белеүегеҙсә, әл Иҙриси өсөн башҡорттар тураһында сығанаҡ булған IX-X быуат ғәрәп авторҙары хеҙмәттәрендә был турала бер ни ҙә юҡ. Киреһенсә, әл Иҙриси Көньяҡ Урал территорияһының төрки телле башҡорттар иле булыуын бик асыҡ билдәләй.

Әйткәндәй, әл Иҙрисиҙә ошо мәсьәлә буйынса бик ҡыҙыҡлы өҫтәлмә мәғлүмәт бар. Ул IX-X быуаттарҙа бәшнәктәр менән Төньяҡ Ҡара диңгеҙ буйҙарында, Дунай йылғаһы тамағында йәшәп, ошонан Византия ерҙәренә һөжүм итеп торған башҡорттар тураһында хәбәр итә. Был бөтәһенә лә билдәле факт, һәм ошо турала әл Мәсғуди (X б.) кеүек авторҙар ҙа яҙған. Күп тикшеренеүселәр, шул иҫәптән Ә.-З. Вәлиди Туған да, ниндәйҙер бер ҡатмарлы ваҡиғалар һөҙөмтәһендә Ҡара диңгеҙ буйында йәшәгән башҡорттарҙың бер төркөмө Дунайға, венгрҙар иленә барып сығып, уларҙың составына инеп китеүен таныған.

Венгр ҡәбиләләренең Көньяҡ Уралда йәшәүе археологик яҡтан дөрөҫләнмәй. Киреһенсә, етди аналитик тикшеренеүҙәр археологтарҙың байтағын венгрҙарҙың VI быуаттан һуң Волгаһын уң яғында йәшәүе һәм Көньяҡ Уралдың урта быуаттарға ҡараған археологик ҡомартҡыларының венгрҙарға тураннан-тура ҡағылышы булмауы тураһында һығымтаға килә.

Мадьяр тематикаһына яһаған ошо экскурс беҙгә венгрҙарҙың Көньяҡ Уралда йәшәүен яҡлаусы коллегаларыбыҙҙы иҫбатлап булмай торған миф менән мауығыуҙары хаҡында иҫкәртеү өсөн кәрәк булды. Уларға тарихи һәм археологик ысынбарлыҡҡа кире ҡайтып, башҡорт халҡының аныҡ тарихын өйрәнеү тураһында уйларға ваҡыт. Был тикшеренеүселәрҙең үҙҙәренә лә, фәнгә лә файҙалыраҡ булыр ине. Әл Иҙрисиҙең күрһәтелгән хеҙмәте менән иҫәпләшмәйенсә булмай, һәм ул ҡулланған сығанаҡтар Урал һәм Башҡортостан археологтарын башҡорт халҡының тарихи мәҙәниәтен өйрәнергә саҡырып тора.

(Аҙағы. Башы 47-48-се һандарҙа).

ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ

# ОНОТОЛҒАН ҠӘҮЕМ

## Төрки календары

Төркиҙәрҙең һәм монголдарҙың донъя диндәре барлыҡҡа килгәнгә тиклем байтаҡ элегерәк үҙ календары булыуы билдәле. Уның нигеҙендә хайуан исемдәре менән аталып йөрөтөлгән ун ике йыллыҡ цикл ята. Алтай халыҡтарында ошо календарь XVIII - XIX быуаттарға тиклем, христиан календары менән алыштырылғансы ҡулланылышта була. Волга-Урал төбәгендә Ислам дине ҡабул ителгәнсе шул уҡ боронғо төрки календары ғәмәлдә була. Ҡайһы бер урындарҙа боронғо һәм яңы календарь параллель рәүештә ҡулланыла.

Был календарҙың килеп сығышы тураһында тарихта билдәле бер мәғлүмәт һаҡланмаған. Әммә йылдарҙың төркиҙәр белгән һәм улар өсөн билдәле бер әһәмиәте булған хайуан исемдәре менән аталыуы, мотлаҡ рәүештә һәр ун ике йыл һайын билдәле бер тәртиптә ҡабатлана барыуы уның Үҙәк Азия төркиҙәре тарафынан ҡулланылышҡа индерелеүе тураһында фаразларға ерлек бирә. Был календарь сағыштырмаса ҡыҫҡа ваҡыт араууғында бөтә Азия халыҡтары араһында танылыу табып, хәҙерге көндәргә тиклем онотолмай һаҡланып ҡалған.

Төркиҙәрҙә хайуандар циклы календарының барлыҡҡа килеүе тураһында төрлө легендалар бар. Шуларҙың береһен XI быуатта Мәхмүт Ҡашғари яҙып алған. Төркиҙәрҙең бер ханы әүәлерәк булған бер һуғыштың датаһын белергә теләгән. Әммә был турала уға бер кем дә аныҡ мәғлүмәт бирә алмаған. Киләсәктә ошондай хаталарға юл ҡуймаҫҡа теләп, бер йылда ун ике ай, күк йөҙөндә ун ике йондоҙлоҡ булыуын иҫәпкә алып, хан ун ике йыллыҡ ваҡыт әйләнәһенән торған йыл иҫәбен булдырған. Шунан ул тирә-яҡтағы хайуандарҙы ҙур йылғаға табан ҡыуаларға бойора. Бер-бер артлы килеүсе йыл атамалары йылға аша йөҙөп сыҡҡан ун ике йәнлек исемдәренән тора.

Был легенданың икенсерәк варианттары ла бар. Шуларҙың береһендә дөйә, ат, эт, үгеҙ, әтәс, сысҡан һәм башҡа йәнлектәрҙең, кешенең йылдарға хайуан атамалары бирәсәген белеп ҡалып, беренсе йылды ҡайһы йәнлек исеме менән атау тураһында бәхәскә инеүе бәйән ителә. Ҡояш тыуғанын кем иң беренсе булып күрә, тәүге йылға шуның исемен ҡушырға, тип ризалаша былар. Хәйләкәр сысҡан, дөйә үркәсенә менеп ултырып, яңы йылдың иң беренсе булып ҡаршылай. Беренсе йыл уның исеме менән атала башлай. Аңра дөйәгә барып еткәнсе, аталасаҡ йыл иҫәбе тамам була. Бындай легендалар ҡаҙаҡтар, ҡырғыҙҙар, Ҡырым татарҙары, бүрәттәр һәм башҡа төрки һәм монгол халыҡтары фольклорында ла осрай.

Халыҡ күҙәтеүҙәренә һәм ырым-юрауҙарына ярашлы, һәр йылдың үҙенә генә хас сифаттары һәм үҙенсәлектәре була, тип иҫәпләнгән. Бындай мәғлүмәттәр туплана килеп, быуындан-быуынға тапшырыла барған. Бына уларҙың ҡайһы берҙәре:

Сысҡан йылы ямғырлы булып, ҙур уңыш алынған, ашлыҡ хаҡтары түбәнәйгән. Уңышлы йылда сысҡан ныҡ үрсеп китер булып, ашлыҡҡа зыян да килтергән. Сысҡан йылында тыуған кешеләр алдан күрә белеүсән һәм аҡыллы була.

Буға йылының ҡышы ауыһыҙ һалҡын, хайуандар өсөн үләтле була, уңыш һәйбәт булмай. Был йылда тыуғандар күнелсәк һәм талантлы, аралашыусан, башҡаларға ҡарата ихтирамлы була.

Барыҫ йылында ҡыш иртә килә, сирлеләр һәм руханиҙар күберәк үлә. Уңыш мул була, тәҫкә матур кешеләр тыуа.

Ҡуян йылында алдан күҙаллап булмай торған хәлдәр күп була, дошманлыҡ арта, тормош тыныс булмай. Уңыш кимәле юғары булып, билдәле булып китәсәк кешеләр тыуа.

Аждаһа йылы - ямғырлы һәм уңышлы, ошо йылда тыуғандар таҙа һәм ныҡ булып үҫә, үҙ-үҙҙәрен яратыусан һәм кеше күҙенә яҡшы булып күренергә тырышыусан була.

Йылан йылы һалҡынса, әммә уңдырышлы була. Кешеләр аҡыллы, маҡсатлы эш итеүсән, әммә һүҙгә һаран була.

Йылҡы йылы һалҡын һәм ҡотһоҙ булып, йотлоҡ, һуғыш алып килә. Кешеләр аҡыллы, һиҙемле, талантлы һәм бойондороҡһоҙ була.

Ҡуҙы йылының ҡышы һалҡын булһа ла, йәйе матур булып, тормош етеш һәм имен бара. Был йылда дини тәғлимәткә ынтылыусылар күберәк тыуа.

Маймыл йылының ямғырлы ла, артыҡ ҡоро булыуы ла мөмкин. Был йылда тыуғандар ышаныслы түгел, холоҡтары ҡапма-ҡаршылыҡлы, әммә улар етеҙ һәм уйлап табыуға оҫта була.

Әтәс йылының ҡышы самаһыҙ һалҡын һәм оҙайлы була. Ошо йылда тыуғандар һәләтле, ҡыйыу һәм үҙ-үҙҙәрен яратыусан була.

Эт йылы - һалҡын, төрлө низағтар күп сыға. Эт йылында тыуған кешеләр намыҫлы, тоғро, әсе телле булып, ғәҙеллек өсөн көрәшергә ярата.

Сусҡа йылы балалы булып, тормош-көнкүреш насарая. Ошо йылда тыуғандар тиҙ ҡыҙып китеүсән, батыр булып, бәхәсләшеп тормайынса, туранан һуҡтырыусы булып таныла.

Рафаэль БӘҘӘРТИНОВ.

(Дауамы бар).

# АҒАЙҘАРЫБЫҘ -

## ә беҙ уларҙы хөрмәтләй

**Башҡортостандың халыҡ шағиры, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Рауил Төхвәт улы БИКБАЕВты абруйлы юбилейы алдынан һөйләшеүгә саҡырҙыҡ та, буш ваҡытын тап итә алмай аҙапландыҡ. Осрашыуҙары, эштәре, бара торған, китә торған, оса торған ерҙәре күп, көндәре ике аҙна алға планлаштырылған булып сыҡты. Шулай ҙа көн дә шылтыратам да, "Рауил ағай, күрешәйексе", тим. "Бына бит хәлдәр ҡалай, ҡыҙҙар "күрешәйек" тип саҡырып торғанда ла килеп булмай", тип шаяртып һуҡрана аҡһаҡал. Шулай ҙа уға бер мәшәҡәтле көнөн бүлеп, беҙҙең редакция ҡунағы булырға яҙҙы. Һәм, әлбиттә, уның менән һөйләшеү үҙе бер ғүмер булды.**

**Рауил ағай, олпат юбилейығыҙҙы ҡаршылайһығыҙ ҙа бит, ә үҙегеҙҙе нисә йәштә итеп тояһығыҙ һуң?**

- Ысынында, һаналған йәштәр - улар һандар ғына. Ә йәшәйеш кисерештәрҙән, хәл-ваҡиғаларҙан, хис-тойғоларҙан тора. Мин дә шул кисерештәр биргән тойғоларыма эйәреп ғүмер итәм. Ҡайһы саҡ донъя фәлсәфәһен һеңдереп алған йөҙ йәшлек аҡһаҡалдай итеп тоям үҙемде. Ҡайһы саҡ ун һигеҙ йәшлек егеттәй булып яндырайланып алам. Ил йөгөн тартҡан ирҙәрҙәй булып, нимәләрҙер хәл итә лә алам кеүек. Хатта ғашиҡ булып ҡуйырмын да һымаҡ әле... Бына шундай ул шағир күңеле. Уға һикһән йәш кенә кәртә түгел ул.

**"Их, йәш саҡта хәҙерге аҡылым булһа" тип һөйләргә ярата ололар. Аҡылланамы ул кеше йәшәй-йәшәй - нисек уйлайһығыҙ?**

- Йәшәй-йәшәй кеше тәжрибә туплай. Йәшәй-йәшәй кеше һабаҡ ала. Баҫыла, һағыраҡ була бара, йыуашаялыр ҙа тип әйтәйек. Әммә үҙ асылынан сығып китә, икенсе була алмай. Үҙгәрмәй ул кеше. Уның белеме артырға, нимәләргәлер өйрәнергә мөмкин, әммә аҡылһыҙ әҙәм аҡыллы булып китмәйәсәк. Был ҡөҙрәтте уға Аллаһы Тәғәлә ни кимәлдә һалған, ул шул кимәл менән ғүмерен йәшәп үткәрә лә.

Тормош ул шундай нәмә, ул һинең идеяларыңды ла үҙгәртергә, хыялдарыңды селпәрәмә килтерергә мөмкин. Йәш саҡтағы ҡараштар ологайған көн ҡараштары менән бер булмай, әлбиттә. Кешенең көсө һәм физик мөмкинлектәре кәмегән һайын уның уйлау һәләте нығыраҡ үҫешә. Нимәләр башҡарыр алдынан хәҙер инде уны йөҙ тәрлө итеп уйлап, самалап ҡарай башлай. Ҡайһы бер нәмәләргә ҡунә, ҡайһы бер нәмәләрҙе нисек бар, шулай ҡабул итергә кәрәклекте аңлай. Нимәләргәлер көйөү-ярһыуҙан файҙа булмаҫын да таный. Күҙәтеүсәнерәк, иғтибарлыраҡ, һиҙгерерәк булып китә. Уйлап ҡараһаң, быларҙы бергә йыйып алғанда аҡыл тип тә атарға була. Ошондай тәжрибә туплаған кеше аҡыллы булмай нишләһен инде...

**Әгәр шағир булмаһағыҙ, ниндәй һөнәр һайлар инегеҙ?**

- Бала саҡтан сәйәхәтсе булырға хыялландым. Донъяларҙың асылмаған ерҙәрен, асылмаған серҙәрен өйрәнеп йөрөү теләгем әле йәш саҡта ла яндыра ине мине. Ә былай мин һөнәрем буйынса уҡытыусы була торған кеше инем. Педагогия училищеһын, Башҡорт дәүләт университетын тамамланым. Шағир булмаһам, сәйәхәтсе уҡ булып китмәһәм дә, шағир йәнле уҡытыусы сыҡыр ине минән. Йәштәрҙә әҙәбиәткә һөйөү тәрбиәләүгә бағышлар инем ғүмеремде, моғайын. Сөнки минең нәҫелемдә уҡытыусы ирегеттәр булды, мин уларҙың тәрбиәһендә үҫтем. Ырымбурҙың Ғабдрафиҡ тигән мәктәбендә әсәйемдең бер туған ағаһы Вәхитов Рәғип, унан һуң ҡустыһы Рамаҙан ағайҙарым директор булдылар. Улар икеһе лә фронтовиктар ине. Рәғип ағайым шиғри күңелле кеше ине. Рәми Ғарипов менән күрешкәне лә булды. Уның "Туҡсорандың Башҡортостанға сәләме" тигән шиғыры "Башҡортостан ҡыҙы" журналында баҫылып та сыҡты. Бына шул ағайҙарым минең күңелгә орлоҡ һалды ла ул. Уларға эйәреп, беҙ бөтә мәктәп уҡыусылары шиғыр яҙҙыҡ, стена гәзиттәрен тултырып, шиғыр менән генә сығара инек. Ошо урында билдәләп үтәйем, Башҡортостандан ситтә ятһаҡ та беҙҙең мәктәптә бөтә фәндәр ҙә тик башҡортса ғына уҡытылды. Хатта рус телен дә башҡортса уҡыныҡ шикелле ул. Шул хәтлем рух, милли идеялар көслө ине. Фольклор стихияһында үҫтек. Уйындар, кис ултырыуҙар ауыҙ-тел ижадынан ғына ҡойолғайны. "Социализм", "Паровоз" тигән совет уйындарында ла ауыл таҡмаҡтары, бәйеттәре һибелеп торҙо. Хәтерләй башлаһаң... ҡуй инде. Мәсеттәрҙе клуб иттеләр. Олатайҙарыбыҙ маңлайы, һаҡалы менән терәлгән иҙәндәрҙә саң күтәреп бейенек. Бына шундай хәлдәр ҙә булды заманыбыҙҙа. Беҙ шул заман һаған йәмғиәт инек.

**Бала сағыҙҙы бәхетле итеп иҫләйһегеҙме? Һуғыш осоро балаһы, унан һуңғы ауырлыҡтарҙы кисергән быуын вәкиле булараҡ, ул осороғоҙ ниндәй хәтирәләр уята?**

- Бала саҡ ул ниндәй генә заманға тура килһә лә, ниндәй генә мөхиттә үтһә лә, бәхетле саҡтыр ул. Сөнки ул саҡта һиңә күк тә зәңгәрерәк, ер ҙә йомшағыраҡ, икмәк тә тәмлерәк булып тойола бит. Ауырлыҡтар булыуы, әлбиттә, онотолмай, әммә улар ғына бала саҡ кисерештәрен ҡоромлай алмай.

Атайым һуғыштан ҡайтып, алған яраларынан мандый алмай, 1945 йылдың йәйендә вафат булып ҡуйҙы. Бәләкәс һеңлебеҙ ул үлгәндән һуң бер ай үткәс тыуҙы. Атайымдың ағаһы, ағаһының улдары һуғышта ятып ҡалғайны. Бер туған ҡустыһы һуғыштан алда уҡ Көнсығыш сигендә үлеп ҡуйған ине. Әсәйебеҙ утыҙ өс йәшендә биш бала менән ултырып ҡалды. Шунлыҡтан, беҙҙең ғаиләнең Еңеү тип шатланырлыҡ форсаты ла булманы. Ғөмүмән, әсәйемдең яҙмышы бик аяныслы була. Ун алты йәше тулыр-тулмаҫтан хәлле генә затҡа кейәүгә бирелә ул. Утыҙынсы йылда уларҙың ғаиләһен һөргөнгә ҡыуалар. Ун һигеҙ йәшлек килен булып, ул да ҡайны-ҡәйнәләре менән берлектә китә. Ҡайҙалыр Архангел губернаһына ебәреләләр. Ҡайныһы бик йүнсел булалыр, күрәһең, унда ла хәлде үҙ ҡулына алып, артель төҙөп ала. Урман ҡырҡалар, һал ағыҙалар. Артыҡ ауырлыҡ күрмәй йәшәйҙәр шулай ҙа. Әммә әсәйем тыуған ауылын, ата-әсәһен бик һағына һәм утыҙ алтынсы йыл ауырлы килеш ҡасып ҡайтып китә. 1938 йылда армиянан ҡайтҡан атайым менән осрашалар. Атайым армияға тиклем өйләнеп киткән була. Ул ҡайтыуға ҡатыны үлгән, ҡыҙы етем тороп ҡалған була. Әсәйем дә ҡыҙ бала менән ултырған була. Һәм былар өйләнешеп, бергә йәшәп китәләр. Уртаҡ тағы ла өс балаға ғүмер бирәләр. Әсәйебеҙ зирәк булды тип әйттем бит инде. Ғәрәпсә лә уҡый, латинса ла, кириллицаны ла белә ине. Беҙҙән дә уҡыу талап итте. Мин былай ҙа ул яҡҡа шәп инем инде. "Һин был баланды уҡыт, Рәкиә", тип әйтә ине уға уҡытыусылар ҙа.

Мин иҫ киткес матур, мәртәбәле төбәктә үҫтем ул. Башҡорт милләтенең үҫешкән, алдынғы ерҙәре була ул Ырымбурҙың Туҡсоран яҡтары. Ҡалаға яҡын, Урта Азия менән бәйләнеш ныҡ. Уҡыуға, белем алыуға бөтөн мөмкинлектәр ҙә бар. Ҡарғалыла, мәҫәлән, ҡартатайым уҡыған. Каруанһарайҙа педучилище булған. Бөтөн оло быуын шул тирәлә белем алған ине. Әүҙем, унған башҡорттар йәшәй ине беҙҙә. Анау ҡола яланда, юҡлыҡта һин көн итеп ҡара. Утын юҡ, төҙөлөш материалдары юҡ, яғыулыҡ юҡ. Ел ҡупһа - ел, буран ҡупһа, буран хәтәр: ер менән тигеҙләп китә. Бына шундай шарттарҙа ла төҙөк кенә донъялар тотоп, мал үрсетеп, бөтөн ауырлыҡтарҙы ла еңеп йәшәй белде халыҡ. Тағы ла бер күҙәтеүем: халыҡ йомшаҡ күңелле ине беҙҙә. Ҡырыҫлыҡ, йомоҡлоҡ юҡ. Асыҡ күңелле, һығылмалы холоҡло, йомшаҡ телле булдылар. Башҡорттоң ҡырыҫлығы менән мин был яҡтарҙа ғына таныштым ул.

Төбәгебеҙҙә күпме уҡымышлы, данлы кешеләр бар ине. Мөхәмәтша Буранғолов менән аралашып йәшәнем. Башҡортостандың төүге Шуралары составында булған Сәғит Мерәсов яҡын ғына олатайым ине. Ғабдулла Амантай ауылдашым, беҙ икебеҙ ҙә ҡыпсаҡ ырыуынан. Үкенескә ҡаршы, Дауыт Юлтыйҙы беҙ белмәй үҫтек. Сәғит Агиш тураһында аҙыраҡ мәғлүмәт бар ине, әммә "улар кеүек яҙыусы була күрмәгеҙ" тип кенә һөйләйҙәр ине. Һәҙиә апайҙың кем икәнлеген Өфөгә килгәс кенә ишеттек. Бына шундай Бабичһыҙ, "Урал батыр"һыҙ быуын булдыҡ беҙ. Әгәр шуларҙы белеп үҫелһә, бәлки, күңелебеҙ ҙә икенсерәк булыр ине.

... Хәтеремдә, Сталин үлгәндә ҡайғырып бер шәлкем шиғырҙар яҙғайным. Бик ауыр кисерҙек ул ваҡиғаны. Беҙҙең өсөн, беҙҙең ил өсөн даһи ине бит инде ул. Бер саҡ мәктәп алдында ҡар бәрешеп уйнап йөрөйбөҙ, сама юғалтып китеп, тышта торған Сталиндың портретының быялаһын ватҡанбыҙ. Беҙ, ярай, балаҫаға, ә уҡытыусыларҙың юғарыға еткереп ҡуймаһындар, директорҙы алып китә күрмәһендәр, тип ҡоттары осто. Күп йылдар үткәс, ошондай уҡ ваҡиғаны Азамат Тажетдиновтың иҫтәлектәрендә уҡып, таң ҡалдым. Улар ҙа шулай Сталиндың һүрәтен яңылыш бәреп төшөргән һәм уҡытыусылары өҫтөндә ҡурҡыныс эленеп торған. Бәхеткә ҡаршы, уларҙа ла, беҙҙә лә был ваҡиға бәләҡазаһыҙ үтеп киткән. Беҙ шулай юлбашсыбыҙҙың язаһын да татый яҙҙыҡ.

**Ырымбурҙан Башҡортостанға юлланыу тарихы нисегерәк булды?**

- Ырымбур менән Ҡаҙағстан сигендәге Аҡбулаҡта педучилище бар ине. Шул училищеның директоры Муллабаев тигән башҡорт ағайы йәйҙәрен Туҡсорандың башҡорт ауылдары буйлап йөрөп, балаларҙы йыйып алып китә ине. Мин дә шунда уҡып сыҡтым. Күп уҡыныҡ, уҡыуға етди ҡараныҡ. Өфөгә барыу тигән теләк яндыра бит йөрәкте. Бөтөн башҡорт баҫмалары унда, шағирҙар унда, тип ашҡынам. Илһам урғып тора, шиғырҙар яҙыла. Шундай йәнде нисек итеп тотоп тыяһың? Фатиханын бирҙе инде әсәйем дә.

Өфөгә ҡарай өс егет юлланырға тейеш инек, беребеҙ ауырып китеп, тороп ҡалды. Бер тоҡ сохари йөкмәп, ауылдан сығып киттек. Ҡулда биш тәңкә аҡса. Өфөгә энерләтеп кенә килеп индек. Совет майҙаны аша үтәбеҙ, Пушкин менән Ленин урамы мөйөшөндә бер магазин була торғайны. Магазиндың башына башҡортсалап "Балыҡ" тип яҙып ҡуйғандар. Беҙҙең өсөн бик сәйер булды был күренеш. Сөнки башҡортса һөйләшеп, китаптар уҡып үҫһәк тә, Ырымбурҙа ундай башҡортса яҙыуҙар юҡ ине.

Имтиханға килеүселәр бик күп ине. Икенсебеҙ уҡырға инә алмай, армияға китте. Мин бер үҙем ҡабул ителеп, ошонда уҡырға ҡалдым.

Студент саҡтағы ижадыбыҙ декларатив риториканың яңғырап торған сағына тура килде. Шағир ағайҙарыбыҙ ихлас хеҙмәт итһә лә, күберәген шалтырауыҡ яҙыла ине. Ошондай әҙәбиәттә башланғыс алған ижадсыларға аҙаҡтан шул шауҡымды еңеү, үҙгәреү еңел булған тиһегеҙме? Ары Мостай ағайҙың, Рәми ағайҙың әйберҙәрен уҡып, үҙҙәре менән аралашып, әйләп ҡараштар формалашты. Ул ваҡытта университетта уҡытыу ҙа самалы, совет әҙәбиәтенең иң зыянһыҙын ғына тәҡдим итәләр. Шәреҡ әҙәбиәте



***Күп уйланам. Тормошомдо, яҙмышымды меңенсе тапҡыр инде яңы юҫыҡтан, бөгөнгө йәшем ҡарашынан анализлайым. Илдәге хәлдәр тураһында ла уйлайым. Балалар өсөн хәүефләнәм. Уларҙың киләсәген уйлайым... Беҙҙең быуын былай ҙа йөҙ ҡурҡыныс аҫтында йәшәне инде. Бала саҡтан һәр нәмәнән ҡурҡыттылар. Һуғыштың ауырлығын үҙебеҙҙә тойғас, ҡабаттан һуғыш ҡубып китмәһен тип ҡурҡтыҡ. Яҡындарыбыҙҙы юғалтыуҙан ҡурҡтыҡ. Унан ил эсендәге тыйыуҙарҙан, иҙеүҙәрҙән, репрессияларҙан ҡурҡтыҡ, сәйәсәттән ҡурҡтыҡ. Бөтөнләй ҡурҡыуһыҙ йәшәп тә булмайҙыр ул... Бөгөн иһә күңелемдәге ҡурҡыу Аллаһы Тәғәләнән генә. Ғүмере өҙөлөүен, Уның янына юлланыуын әҙәм барыбер ҙа хәүефләнеп көтә. Был беҙҙең булмышҡа шулай һалынғандыр.***

✓ **Ә инде йәшәй-йәшәй был донъяла иң ҙур мөғжизәнең туған тел икәнлеген төшөндөм. Туған теле әҙәмгә рухиәт булараҡ бирелә. Телең юҡ икән, һин бер кем дә түгел.**



# ДӘРӘЖӘ ТОТҠАН,

## белгән быуын булдыҡ

бөтөнләй юҡ. Мин уларҙы Рәми Ғариповтан күреп, китапханаларҙа эҙләп табып, үҙаллы өйрәндем.

**Күп кенә билдәле шәхестәр заманында йәшәгәнһегеҙ. Уларҙың ғибрәтле лә, мәртәбәле лә яҙмыштарына шаһит булғанһығыҙ. Кем итеп ҡараныгыҙ уларға, остаз итепме, әллә ағай итепме? Мәҫәлән, Рәми Ғариповҡа?**

- Мин юғары курстарҙа уҡығанда Рәми ағай Салауат районында эшләп йөрөй ине. Ағай менән оҙаҡ аралаштыҡ. Башта уға ағай тип, унан фекерҙәш тип, аҙаҡ дуҫ итеп ҡараным. Беҙҙең заманда ижадташ ағай-ҡустылар араһында шундай бер яҡшы бәйләнеш бар ине. Был бәйләнеш бер ваҡытта ла урталыҡтан үтмәй, көнкүреш түбәнлегенә төшөрөлмәй, ваҡ-төйәк менән болғанмай торған ниндәйҙер рухи, юғары аралашыу ине.

Баязит Бикбай менән шулай дуҫ булдыҡ. Ул мине "Карауанһарай" поэмаһын яҙған ваҡытта Ырымбур архивына алып барып та ултыртҡайны. Ағайҙарыбыҙ шулай дәрәжә тота белгән, беҙҙең хөрмәтте күтәрә белгән кешеләр булды. Ә беҙ үҙ сиратыбыҙҙа улар алдында түбәнселекле, баҫалҡы булдыҡ. Остаздарыбыҙға хыянат итмәнек. Остаз мәсьәләһе, мәҫәлән, беҙҙә бороңдан ныҡлы ҡуйылған тәртип булған. Күп нәмә остаз рөхсәте менән генә башҡарылған. Остаздарҙы тота килеп кенә алмаштырмағандар. Ошо йола беҙҙең быуынға ла килеп етте ул. Үҙебеҙ остаздарыбыҙға тоғро уҡыусылар булдыҡ. Үкенескә ҡаршы, бөгөнгө әҙәбиәт донъяһында ундай бәйләнеш юғалған.

Рәми Ғарипов яҙмышында, мәҫәлән, уның шәкерттәренең роле ҙур булды. Ағай үлгәндән һуң беҙ уның йортонда ял һайын йыйыла торғайныҡ. Надежда еңгә ул яҡҡа бик ихлас ине. Динис Бүләков, Сафуан Әлибаев, Тимер Йосопов ҡатындарыбыҙ менән барып инәбеҙ ҙә, өйөлөп ятҡан архивтан күпмелер өлөшөн таратып алабыҙ. Шуларҙы ҡарап, сағыштырып, баҫылмағандарын айырып туплайбыҙ. Унан яҙмаларҙы китап итеп туплап әҙерләйбеҙ. Шулай итеп, әҙиптең ижадын барлап сығыуҙа минең ҡәләмдәштәрем һәм уларҙың ҡатындарының да хеҙмәте ҙур булды. Беҙ быларҙы ихлас башҡарҙыҡ. Уның музейын да ойоштороҙоҡ. Салауат Юлаев премияһын юлланыҡ. Халыҡ шиғыры исемен дә алдыҡ ағайыбыҙға.

**Һеҙҙең заман яҙыусыларының күптәренең ҡатындары уға рухташ та, хеҙмәттәш тә булған, шулай бит? Күптәргә ҡатындары писарь, секретарь, уҡыусы, тәнҡитсе булған. Мәҫәлән, Толстойҙың "Война и мир"ын да ҡатыны туғыҙ тапҡыр күсереп яҙа. Үткәндә Ноғман Мусин да "Ҡатыным ярҙамсы булды", тип һөйләне. Бөгөн иһә яҙыусы ирен аңлаған ҡатынды, шағирә ҡатынын ҡабул итә белгән ир-егетте табыуы ауыр. Нисек тәрбиәләнегеҙ һеҙ ундай ҡатындарҙы?**

- Ул заманда әҙәбиәттең абруйы ла ҙур ине. Ҡатындарыбыҙ ҙа шул тәрбиәлә, шул рухта үҫкән кешеләр ине. Рәми ағайҙың ҡатыны бик аҡыллы еңгә ине. Әнғәм Атнабаевтың ҡатыны ла шундай шәп апай булды. Мин дә уй-хыялдарымды иң башта ҡатыныма һөйләй алыу, унан аңлау табыу бәхетенә ирешеп йәшәнем. Әммә был барыһында ла улай шыма ғына булманы. Ижадының ғаиләһенә һыя алмаған үрнәктәрен дә аҙ күрмәнек. Был үҙенә күрә бер трагедия ине. Күп осраҡта сит милләткә өйләнгән ағайҙар, тиҫтәрҙәребеҙҙең ҡәҙерһеҙ булып йөрөгәненә шаһит булдыҡ. Барыбер башҡорт ирен башҡорт ҡатыны ғына тулыһынса аңлай алалыр ул, тип уйлайым мин. Бигерәк тә уның илһам шауҡымында йәшәгәнен.

Беҙҙең заман интеллигенцияһы барыһы ла ауылдан сыҡҡан кешеләр ине бит. Баш ҡалаға уҡырға килеп, өйләнһәләр, ятаҡтарҙан сығарылып, кемеһе кешеләрҙә өйҙәш булып, кемдәре подвалдарҙа көн итә ине. Шунда ла йыш осрашабыҙ, ғаиләләр менән аралашабыҙ. Юҡлыҡтан, тарлыҡтан оялған юҡ. Мостай ағай ҙа бер пленумда "Бына беҙ подвалда торабыҙ, кешеләрҙең аяҡтарын ғына күрәбеҙ. Донъяны гел түбәндән күҙәткәс, нисек итеп уны юғары итеп яҙырға?" тип сығыш яһаған. Шулай итеп, подвал тормошон ҡатын менән беҙ ҙә үттек. Бәлки, беҙҙең ҡатындарға ошо үҙе бер тормош һабағы булғандыр.

**Мөхәббәт тигән хисте нисек ҡабул итәһегеҙ? Йыш ғашиҡ булдығыҙмы?**

- Бик ауыр һорау инде был... Йыш ғашиҡ булдым. Мәктәп йылдарынан башлап, һәр ваҡыт кемгәлер һөйөү хисендә яна инем. Ғашиҡ булыу - ул шиғриәттең иң һәйбәт, иң гүзәл бер халәтелер ул. Бер үк ваҡытта фажиғәһе лә. Сөнки ғашиҡ булмайынса ижад итеп булмай. Мөхәббәтһеҙ яҙылған әҙәбиәтте мин бер ҡараштан уҡ танийым, уларҙың һуты ла, шаукымы ла, уты ла булмай. Бер саҡ "Нимә ул ҡартайыу?" тигән һорауға: "Ҡартайыу - ул ҡатыныңдың көнләшмәүендә, һөйәркәндең әндәшмәүендә", - тип яуаплағайным. Бына ошондай хәлдәре генә ауыр бында. Әммә ғишыҡһыҙ булмай!

Ҡатын-ҡыҙҙар бит улар үҙҙәре лә зәһәр, шағир йәнен ауларға, арбарға ғына торалар. Уларҙың шундай сибәрлегенә, илаһилығына беҙ гәйеплеме инде? Беҙгә, мәжнүндәргә, нимә ҡала, яҙырға ла яҙырға, яҙырға ла яҙырға ғына ҡала. Шулай итеп, шиғырҙар, шулай итеп әҙәбиәт барлыҡҡа килә лә...

**Һеҙ оҙаҡ йылдар Яҙыусылар ойошмаһын етәкләнегеҙ. Нисек ул үҙегеҙ кеүек үк ижадсы булған илһамлы, шауҡымлы халыҡ менән идара итеү?**

- Ун алты йыл Яҙыусылар берлегенең етәксеһе булырға тура килде. Бында һәр береһе гений. Һәр береһе үҙенсәлекле, һәр береһенә айырым мөнәсәбәт кәрәк. Хатта һүҙ ҡушҡанда ла кемдән ниндәй реакция булырын белеп булмай. Кем ниндәй тулҡында йөрөй, ниндәй кәйеф менән килгән икәнен дә әйтерлек түгел. Ә бит мин үҙем дә шундай уҡ кеше. Шағир, яҙыусы булғандар улар, асылда, яңғыҙҙар. Яңғыҙлыҡҡа дусар ителгән, йәндәре яңғыҙ зарығырға тейеш булған әҙәмдәр улар. Был уларҙың йәшәү, эш итеү рәүешелер, әммә был төп принцибы түгел. Төп принцибы уларҙың - халыҡ менән аралашыу. "Мин ғүмерем буйы яңғыҙ булдым, мин ғүмерҙә яңғыҙ булманым", тип яҙғайным мин. Бына шундай ике ҡаршылыҡты бер үҙҙәрендә һыйҙырып йәшәй алған халыҡ тупланған ине бында. Бер яҡтан, уларға был ойошма кәрәк тә түгел кеүек, сөнки ижад - ул яңғыҙҙар хеҙмәте. Икенсе яҡтан, бында улар үҙҙәре кеүек үк кешеләр араһында аңлау таба ла кеүек ине.

**Бөгөнгө әҙәбиәттә тәнҡит юҡ, тигән фекер йәшәй. Шулаймы ул?**

- Шулай. Бөгөнгө әҙәбиәттә тәнҡит юҡ. Бер ижадсы ла үҙ әҫәрен тейешле кимәлдә баһалай алмай. Хатта һәләтлеләре лә. Улар әҫәрҙәрен яратып, бирелеп китеп яҙа һәм уның етешһеҙлектәрен үҙаллы күрә алмай. Михалковтың һөйләгән һүҙе бар. Яҙыусыларҙы теҙеп ҡуйғандар ҙа: "На первый-второй расчитайсь!" - тигәндәр. Быларҙың һәр береһе "Первый! Первый! Первый!" тип торалар икән. Сөнки береһе лә "второй" була алмай. Шунлыҡтан, әҙәбиәттә мотлаҡ белемле, үткер, дөрөҫ баһалай алған тәнҡитселәр кәрәк. Үкенескә ҡаршы, бөгөн улар юҡ. Булғандары ла хеҙмәттәрен маҡтау йырлауға ғына бағышлай. Ә тәнҡитһеҙ үҫеш тә юҡ - уныһы билдәле. Яҡшы тәнҡит ижадсыны тейешле ыҙанға төшөрә белергә тейеш. Бөгөнгө әҙәбиәтте әрһеҙҙәр, йылғырҙар, һәләтһеҙҙәр баҫып алды. Был мине бик борсой.

**Был донъяның иң ҙур мөғжизәһе нимә тип уйлайһығыҙ?**

- Донъяла ете мөғжизә тиһәләр ҙә, уйлап ҡараһаң, беҙҙең Башҡортостанда ғына ла улар әллә күпме. Шуға улар күптер тип уйлайым. Ә инде йәшәй-йәшәй был донъяла иң ҙур мөғжизәнең туған тел икәнлеген төшөндөм. Туған теле әҙәмгә рухиәт булараҡ бирелә. Телең юҡ икән, һин бер кем дә түгел.

Бөгөн беҙҙең кеүек бәләкәй халыҡтар теленә генә түгел, бөйөк булған рус теленә лә ҡурҡыныс янай. Уны инглиз һәм башҡа сит телдәр баҫып килә. Өфө урамдарында ғына йөрөгәндә лә рус атамалы яҙмаларҙы бик һирәк осратаһың, барыһы ла инглиз һәм сит телдәргә балҡып тора. Рус теле беҙҙең телде йота тип ҡурҡырға ярамай, рус теленең үҙ яҙмышы ҡыл өҫтөндә ул. Беҙҙең телебеҙ беҙҙең ауыҙ эсендә, күңелдә, мейелә, булмышыбыҙҙа бит. Уны үҙебеҙ "йотмаһаҡ", башҡа бер кем дә килеп ҡоротмаясаҡ.

**Поэзиянан прозаға күсергә теләгән, уйлаған саҡтарығыҙ булманымы? Тартманымы проза?**

- Мин үҙемде прозаик тип тә уйлап ҡуям ул ҡайһы ваҡыт. Мәҫәлән, Рәми тураһындағы китабым үҙенсә проза. Әммә тарихи романдар ижад иткән, драмалар яҙған прозаик түгелмен. Тырышып ҡарағаным булды, тик килеп сыҡманы. Был тәңгәлдә һәр жанрҙың үҙ оҫтаһы була икәнгә лә баҫым яһарға кәрәктер. Шиғыр менән генә сикләнеп йәшәмәнем шулай ҙа, публицистика, юлъяҙмалар, иҫтәлектәрем, көндәлектәрем донъя күрҙе. Бөгөн Шәйехзада Бабичты ҡабаттан яҙырға уй бар ҙа, ваҡытым етмәй ҡуйыр тип һағайып торам. Яҙыусы үҙенең көсөн дә самаларға тейеш.

**70 йәшегеҙ айҡанлы һеҙҙе белгән кешеләр менән интервью эшләгәйнем бер ваҡыт. Сибай ҡалаһында әле. Шунда курсташығыҙ Әминә Бикташева тигән апай һеҙҙең туйҙағы бал мажараһын һөйләгәйне. Шул хәтирәне иҫләйһегеҙме?**

- Нисек онотаһың инде уны? Иҫләйем, әлбиттә. Юҡлыҡ замана ине. Беҙҙең туйға тип бал ҡуйҙоҡ. Ул мискәне лә дуҫтар ҡайҙандыр табып, үтескә генә һорап алғандар ине. Тәжрибәһеҙлек инде. Бал әсетергә ултыртҡанбыҙ ҙа, уны ныҡлап ябып, бөкө менән тығып ҡуйғанбыҙ. Бал ни, ҡайнап-ҡайнап, ажғырып сыҡҡан да... шартлаған. Бер мискә бал бүлмә иҙәнендә тулҡынланып ята хәҙер, кисеп йөрөп түгәбеҙ. Шулай ҙа ҡабаттан ҡойҙоҡ ул балды, әсетеп тә өлгөрҙөк, туйҙы ла үткәрҙек. Шулай булды.

Ә Әминә Бикташеваның үҙенә килгәндә, бергә уҡып та мин уның күңелендә шундай моң барлығын белмәнем. Тыйнаҡ ҡына ине ул, ауыҙ асып йырлағаны ла булманы. Хәҙер килеп, әллә нисә шиғырыма йыр яҙҙы. Бына бит, беҙҙең халыҡ ниндәй һәләтле, улар араһында шулай асылмай йөрөгәндәре лә күпмелер?

**Нимәләр тураһында уйланаһығыҙ? Күңелегеҙҙә нимәнәндер ҡурҡыу бармы?**

- Уйланам. Күп уйланам. Тормошомдо, яҙмышымды меңенсе тапҡыр инде яңы юҫыҡтан, бөгөнгө йәшем ҡарашынан анализлайым. Илдәге хәлдәр тураһында ла уйлайым. Балалар өсөн хәүефләнәм. Уларҙың киләсәген уйлайым... Беҙҙең быуын былай ҙа йөҙ ҡурҡыныс аҫтында йәшәне инде. Бала саҡтан һәр нәмәнән ҡурҡыттылар. Һуғыштың ауырлығын үҙебеҙҙә тойғас, ҡабаттан һуғыш ҡубып китмәһен тип ҡурҡтыҡ. Яҡындарыбыҙҙы юғалтыуҙан ҡурҡтыҡ. Унан ил эсендәге тыйыуҙарҙан, иҙеүҙәрҙән, репрессияларҙан ҡурҡтыҡ, сәйәсәттән ҡурҡтыҡ. Бөтөнләй ҡурҡыуһыҙ йәшәп тә булмайҙыр ул... Бөгөн иһә күңелемдәге ҡурҡыу Аллаһы Тәғәләнән генә. Ғүмере өҙөлөүен, Уның янына юлланыуын әҙәм барыбыр ҙа хәүефләнеп көтә. Был беҙҙең булмышҡа шулай һалынғандыр.

**Рауил ағай, ошо осрашыу өсөн мин һеҙҙе ике аҙна эҙәрлекләнем. Һеҙ йә Ҡаҙанға остоғоҙ, йә Мәскәүгә сығып киттегеҙ, Өфөлә саҡта ла берҙә генә лә өйҙә ултырмайһығыҙ. Тормошоғоҙ үтә лә әүҙем, етеҙ темплы. Ҡайҙан бындай энергия?**

- Бала саҡтан шулай йәшәп, эшләп өйрәнгәнмен. Хәҙерге йәштәрҙәге апатия, стресс, меланхолия тигән төшөнсәләрҙе аңламайым да, нимә икәнлеген дә белмәйем. Бөгөн дә күберәк йәйәү йөрөргә тырышам, күнекмәләр яһайым. Хәрәкәттә - бәрәкәт, тигәндә онотмайым. Аллаға шөкөр, зиһенем асыҡ, хәтерем яҡшы әле, яҙырға, ижад итергә дәрт бар. Ҡаҙанға ижадташ дуҫтарымдың сараларында ҡатнашырға барҙым. Үҙебеҙҙә лә әле берәй ергә осрашыуға, әле әҙәби кисәгә, әле бына ошондай күрешеүгә саҡырып ҡына торалар. Яҙыусылар араһындағы хәл-вәҡиғаларҙан ситтә ҡалмайым. Ғүмерҙе уны йөрөй алғанда йәшәп үткәрергә кәрәк, ятып түгел.

**Һеҙҙе әле ейәнегеҙ алып килеп китте, шулай бит? Нисәү улар? Һеҙ ниндәй олатай?**

- Олатай ғына түгел, ҡарт олатай мин. Дүрт бүләм ҡайнашып йөрөп ҡалды өйҙә. Ике ейәнемдән ике ҡыҙ, ике малай үҫә. Улыбыҙҙы йәшләй генә фажиғәле юғалтһаҡ та, бөгөн ейәндәребеҙ, бүләләребеҙ урауында йәшәү бәхете тейә. Әле бәләкәй балаларҙың ҡыҙыҡтарын яңынан кисерәбеҙ. Иң өлкәне өҫтә уҡый, иң бәләкәсе йүргәктә генә ята. Береһе һүрәт төшөрөүгә һөйрәй, икенсеһе шахмат уйнайыҡ, ти, өсөнсөһө алдында орсоҡ кеүек өйөрөлә лә өйөрөлә. Улар араһында нисек итеп бошонаһың да, күңелһеҙ уйҙарға биреләһең инде? Ҡушылып уйнап китһәң, йәшеңде лә, донъяңды ла онотторалар. Шулай йәшәйбеҙ әле.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ысынлап та, бер ғүмер ине бындай күрешеү. Ағайыбыҙҙың ошолай беҙҙе көлдөрә-көлдөрә әңгәмә ҡороуы ла, редакция хеҙмәткәрҙәренең "Рауил Бикбаев менән фотоға төшөп ҡалайыҡ", тип йүгерешеп йөрөүе лә. Шағирҙың егеттәрсә ҡылыҡтары ла, ялҡынлы шиғырҙары ла, мәрәкәләре лә. Киләсәктә былар барыһы ла тарих булып ҡалыр. Ошо көндә, ошо мәлдәрҙе беҙ ҡат-ҡат хәтерләп һөйләрбеҙ. Ғәҙәттә, шулай була ул...**

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА**
**әңгәмә ҡорҙо.**

*✓ Йөҙәр йыл буйына атай-олатайҙарыбыҙ хыял иткән үҙаллы Башҡортостаныбыҙҙы төҙөй алдыҡ һәм уның башында һеҙҙең менән туғанлашырға йөрьәт иткән Әхмәтзәки тора.*



**Хөрмәтле уҡыусылар! Бөгөн һеҙҙең иғтибарға Ғәлим Хисамовтың "Шаҡай бураны" романынан өҙөк тәҡдим итәбеҙ. Яҙыусының әҫәрендә бынан йөҙ йыл элек булған ваҡиғалар тасуирлана. Уны баҫыуҙың маҡсаты әҫәрҙең бер өлөшө менән таныштырыу ғына түгел. Һеҙ фотола күргән йорт романда һүрәтләнгән Хажмөхәммәт хажи йорто ул. Беҙҙең бәхеткә күрә, ул әле лә Әбйәлил районының үҙәге Асҡар ауылында имен-аман ултыра. Ошо тарихи йортто нисек һаҡларға, тип мөрәжәғәт итәбеҙ уҡыусыларыбыҙға. Ул беҙҙең бөйөктәребеҙҙең эҙен, улар һулаған һауаны, күҙ нурҙары төшкән бүрәнәләрҙе һаҡлай бит. Һеҙҙән хаттар, тәҡдимдәр көтәбеҙ.**

Һөҙәк кенә тау битенә ҡарағастан һалынған өй ҡаршыһына өс һыбайлы килеп туҡтаны. Икәүһе аттан ырғып төштө лә һаман ат өҫтөндә ултырған өсөнсөһөнә өндәште.

- Килеп еттек, ағай, ошо өй ул.

- Ошо, ошо. Шул булмай, ни булһын. Мин ҡарап килдем, был тирәлә ошонан да яҡшы өй юҡ.

Өсөнсөһө аҡрынлап ҡына аттан шылып төштө һәм әлеге өйгә һынамсыл текәлде. Ал яғын ҡояш битенә ҡаратып һалынған ҙур өй ине ул. Эре бүрәнәләре гел бер иш, тәҙрәләре лә бик буйтлы, ҡала өйҙәренеке лә был хәтлек эре булмайҙыр. Өй хужаһы донъяның ҡәҙерен бик белеп йәшәй икән, тип уйланы ул. Шунан атының теҙгенен теге икәүҙең береһенә тотторҙо ла өйгә табан атланы. Бейек тупһанан менеп, киң ишекте һаҡ ҡына аса биреп өндәште.

- Хужалар өйҙәме икән?

Киң таҡталы иҙәнгә тыҡ-тыҡ баҫып, бер ҡатын сыҡты.

- Хажмөхәммәт хажиҙың өйө ошомо?

- Эйе, ошо. Уҙығыҙ, анауында ултырып торһағыҙ ҙа була. Хәҙер хужаны саҡырам.

Оҙаҡламай оҙон ғына буйлы, мыҡты кәүҙәле, түңәрәкләп һаҡал ебәргән ир ишектәрҙең береһенән сыҡты.

- Ҡунаҡ килер булһа, хужаны йоҡо баҫа тигәндәре дөрөҫ икән. Бесән эшендә арып ятып торғайным, баҫылып йоҡлап та киткәнмен. - Хужа ике ҡуллап килеп күреште. Йәнәш ултырып хуш иттеләр.

- Имен-һау килеп еттегеҙме? Юл йонсотманымы? - Хужа килеүсене күптән белгән кеүек һорашып алып китте. Ғәмәлдә, белмәй ине. Борондан килгән йола тупһаны аша атлап ингән кешенең хәл-әхүәлен белеп, ҡапылғара ғына йомошо юҡмы икәнен белергә ҡуша. Шунан һуң ғына танышыу башлана, ә төп йомош тураһында һүҙ аҙаҡҡа, тамаҡты туйҙырып, кәйефләнеп алғасҡа ҡалдырыла. Сөнки юл кешеһе асығып, һыуһап килеүсән. Шул хәлдә үтәмәйенсә, кешенең мейеһе тулы ҡеүәтенә эшләй алмай һәм төп мәсьәлә тураһында йүнле һөйләшеү килеп сыҡмай.

- Хәҙер ҡул сайҡатып алып, сәйләрбеҙ. Үҙең генә килдеңме, әллә юлдаштарың бармы?- тип белеште Хажмөхәммәт хажи.

- Ике яугир бар. Улар урам яҡта аттар янында.

Яугир һүҙен ишеткәс, Хажмөхәммәт хажиҙың ҡолағы ҡарп итеп ҡалды. Ҡунағы ғәскәригә бәйле бит. Бик мөһим кешегә оҡшаған был. Еңел генә ҡуҙғалып, өйҙөң эске яғындағы ишекте асып өндәште:

- Егеттәрҙән кем бар бында? Барығыҙ әле урамдағы яугирҙарҙы аттары менән ҡабырға ҡапҡанан индереп, йылҡыларын һыуындырырға ҡуйығыҙ. Үҙҙәрен сәйгә саҡырығыҙ. - Шунан ҡунағы янына килеп етте.- Әйҙә, сәйләп алайыҡ.

Юл кейемдәрен сисеп, еңелсә ҡалғас, еҙ тас өҫтөндә бик тәпсирләп йыуынған ҡунағына ҡарап, ябай ғына кеше түгел был, тимәк, йомошо ла ябай түгел, тип һығымталаны хужа. Шуға ризыҡ әҙерләгән ҡатынына шыбырланы:

- Сәйҙе ҙур бүлмәгә ултырт.




Сәй әҙер булғансы, ҡунаҡты оло бүлмәгә әйҙәне һәм йомшаҡ дивандан урын тәҡдим итте.Ҡунаҡ урынлашыр алдынан ҡарашы менән диванды байҡаны, усы менән ҡара ҡыҙғылт тирене һыйпап алды, ултырҙы ла тел шартлатты:

- Бик уңайлы һәм матур урындыҡ. Беҙ бындайҙы Әхмәтзәки менән Һамар ҡалаһында минең ҡоҙа тейеш кешенең өйөндә күргәйнек. Бик ҡиммәтле нәмә, тинеләр.

Әхмәтзәки менән бергә йөрөгән кеше икән, ябай булыр булмай ҙа, тип уйланы Хажмөхәммәт хажи. Шул арала ҡунағының һүҙен дә элеп алды.

- Уларҙа ни хаҡтыр, белмәйем. Беҙ бындайҙы үҙебеҙ яһайбыҙ.

- Үҙегеҙ? - Ҡунаҡ аптыраны.

- Эйе. Йәйләүгә сыҡмағаны бирле өйҙә иркенерәк йәшәр өсөн йортто ла ҙурҙан һалабыҙ. Аллаға шөкөр, ағас янибыҙҙа ғына. Ә был урындыҡты ағастан һөлдәһен ҡатабыҙ ҙа, кейеҙ менән йомшартып, иләнгән, буялған тире менән көпләйбеҙ ҙә ҡуябыҙ. Кейеҙгә йөн, тышлыҡҡа тире лә үҙебеҙҙә бит, кемдәндер һорап, йә һатып алып йөрөйһө юҡ.

- Ә буяу ҡайҙан?

- Унышы ла үҙебеҙҙеке. Быға ҡарағай менән муйыл, әҙерәк сейә ҡабығынан яһалған буяу манылған. Ауылда оҫта егеттәр ҙә бар.

- Дөрөҫ әйтә икән Әхмәтзәки, Алла бирһә, үҙебеҙҙең егеттәрҙе төрлө оҫталыҡ һөнәрҙәренә уҡытасаҡбыҙ, тип.

- Әхмәтзәки ҙә Әхмәтзәки тиһең, теге Вәлидиҙе әйтәһеңме?

- Эйе, шул инде. Бәй, мин үҙем менән таныштырмай ҙа ултырам да баһа. Шулай булғас, кемде һөйләгәндә һин ҡайҙан белеп бөтәһең, ти. Мин Сәғит булам, тултырып әйтһәң, Сәғитйән ибн Мерәҫ.

- Ыстағәрифулла, беҙҙең мөфтөй хәҙрәттәреме?

- Эйе, мосолмандар ҡоролтайы мине мөфтөй итеп һайлап ҡуйҙы.

- Улай булғас, Әхмәтзәкиҙе беләһең инде, белмәй ни.

- Эйе, беҙ 1917 йылдың башында уҡ күрешкәйнек уның менән. Шунан бирле бер юлдан атлайбыҙ тигән һымаҡ. Ә үҙең Хажмөхәммәт хажи булаһыңмы?

- Мин дә инде, хәбәргә әүрәп, үҙемде танытмай торам. Исемем Хажмөхәммәт хажи, һин әйтмешләй, ибн Яҡшымбәт. Ҡайһы берәүҙәр, ни эшләп бер үҙеңә ике хажи исеме, тип һорай.

- Мин беләм, Хажмөхәммәт тигәнендә хажи атайыңмы, олатайыңмы хажға барғанды белдерә. Икенсе тапҡыр хажи тигәне үҙеңдең хаж сәфәрендә йөрөгәнеңде төшөндөрә.

- Рәхмәт, мөфтөй хәҙрәт, бик еңел итеп аңлаттың да ҡуйҙың.

Был кеше ҡул оҫтаһы ғына түгел, аҡыл оҫтаһы ла икән, тип һығымталаны Сәғит. Исем аңлатмаһын минең уңыш тип белдерҙе лә ҡуйҙы. Йәнәһе, мине ҙурайта, аҡыллы кеше генә үҙ баһаһын кешегә бора белә шул...

Һөйләшә-һөйләшә сәй эстеләр.

- Мин һеҙҙең яҡта булғаным юҡ ине. Үҙем ялан яҡтан булғас, урман-тауҙарҙы кисеү бик ҡыҙыҡ та, урыны менән ҡурҡыныс та булып китте. Бигерәк тә ҡатай ерендә ҡара урман күп икән.

- Һеҙ ҡайһы юлдан килдегеҙ? Нөгөш буйлапмы?

- Юҡ. Беҙ Стәрлетамаҡтан сыҡтыҡ. Шуға Еҙем буйлаһағыҙ, уңайлыраҡ булыр, тинеләр. Ярар әле яугирҙәрҙең береһе был яҡты белә икән, шуға эйәрҙек.

- Юлығыҙ бик оҙон булған икән. Ярар, сәй эсеп алырһығыҙ ҙа мунса инерһегеҙ. Шунан арыуығыҙ ҡул менән һыпырып алғандай бөтәр.

Хажмөхәммәт хажиҙың мунсаһы шәп ине. Сәғиттәр яғында ағас аҙ булғанға күрә, мунсаны яртылаш ер аҫтына, яртылаш өҫкә төҙөйҙәр. Ә быларҙыҡы тик ағастан ғына тора ине, шуға һауаһы ла саф, дым да күп түгел, миннек - ҡайындан, әйҙә, ҡайыҙла ғына үҙенде. Мунса шифаһы ысынлап та юл йонсоуын һыпырып төшөрҙө. Мунсанан һуң бишбармаҡ менән һыйланып, сәй менән баҫтырып ҡуйғансы, ҡараңғы ла төшөп өлгөрҙө. Шуға Сәғит төп йомошон әйтмәй торорға булды. Эште иртәндән башлаһаң, уңа, ти торғайны бер бабаһы, шуны уйлап, өндәшмәне. Иртән хужа ла, ҡунаҡ та ҡояш менән ҡуша торҙолар. Ауыл кешеһе бит оҙаҡ йоҡламай. Хажмөхәммәт хажиҙың сәйерерәк итеп Сәғиткә ҡарап-ҡарап ҡуйыуынан теге аңланы: хужа ҡунағының аҫыл ниәтен белдергәнде көтә. Иртәнге ризыҡҡа доға ҡылғас, ашъяулыҡты алдылар, шунан һуң Сәғит тамаҡ ҡырҙы, ултырған урынынан саҡ ҡына шылып ҡуйҙы. Аңланы быны Хажмөхәммәт хажи, хәҙер ҡунаҡ төп йомошон әйтәсәк.

- Хажмөхәммәт хажи ҡорҙаш, - тип башланы Сәғит. - Әллә нисәмә йөҙ саҡырым юл үтеп килгәс, тигенгә генә түгел икәнде тойғанһыңдыр инде. Мин һиңә илебеҙҙең иң абруйлы, ҡашҡа затлы улынан илсе булып килдем. Ул кеше мәртәбәһе ҡитғаларҙы буйлаған беҙҙең ышанысыбыҙ һәм аҡһаҡалдарға тиң аҡыл эйәһе тип танылған Әхмәтзәки Әхмәтшаһ улы Вәлиди. Уның кемлеген һөйләп, тасуирлап тороу бурысынан һин мине ҡотҡарырһың тип уйлайым. Сөнки уның кемлеген һин минән артығыраҡ булмаһа, кәм белмәйһең. Әхмәтшаһ менән дуҫтарһығыҙ, күптән аралашып йәшәйһегеҙ, бер-берегеҙҙе яҡшы беләһегеҙ. Арағыҙҙағы дуҫлыҡ туғанлыҡҡа әүерелһен өсөн Нәфисә ҡыҙыңдың ҡолағын Әхмәтзәкиҙән тешләтеп, бәлиғ булғас, уларҙы йәрәштереп тә ҡуйғанһығыҙ. Тик илдә бер-бер артлы ҡубып торған тетрәнеүҙәр йәш кешеләрҙең өйләнешеүенә ҡамасау булды. Инде беҙ иң мөһим еңеүгә өлгәштек. Йөҙәр йыл буйына атай-олатайҙарыбыҙ хыял иткән үҙаллы Башҡортостаныбыҙҙы төҙөй алдыҡ һәм уның башында һеҙҙең менән туғанлашырға йөрьәт иткән Әхмәтзәки тора. Бына һеҙ ҙә, Әхмәтшаһ та ынтылған көн килде, Аллаһ бирһә. Мин Әхмәтзәки исеменән һеҙгә яусы булып, Нәфисә ҡыҙыңды уға кәләшлеккә һорарға килдем.

Баянан бирле Сәғитте тыңлап, аҙаҡҡы һүҙен әйткәндә ҡымшанмай ҙа көткән Хажмөхәммәт хажи еңел һуланы. Сәғиттең бында килеү маҡсатын да, әлеге һүҙҙе әйтерен дә белеп тора ине инде. Әммә ҡунаҡтың ауыҙынан үҙе ишетмәй тороп, ныҡлап ышанып та бөтмәне. Шул һүҙ әйтелгәс:

- Аллабыҙҙың ҡөҙрәте киң һәм сикһеҙ. Күрәһең, ул балаларҙың яҙмышына шулай булырға тейеш тип яҙғандыр инде. Ошо көндө көтмәнек түгел, көттөк. Минән, хәләл ефетемдән бигерәк, ҡыҙым көттө. Вәғәҙәләшкән кешеһе, тәғәйенләнгән урыны булғанға күрә, уны һоратыусылар булһа ла, кемгәлер биреү уйын башыбыҙға ла индермәнек. Аллаға шөкөр, рухыбыҙ ныҡ, тәндәребеҙ һау, донъябыҙ имен саҡта, Сәғит мөфтөй, һинең ауыҙыңдан ошондай изге һүҙҙе ишетеүебеҙгә бик шатбыҙ. Һиңә ниндәй яуап булырын һин дә, мин дә беләбеҙ. Әммә йоланан оло була алмабыҙ. Шуға күрә, әлегә мин һиңә өҙөп кенә яуап бирмәй торам. Туғанырыу, ҡатындың нәҫеле бар. Шуларҙы саҡырып, кәңәш торорға тейеш мин. Уға тиклем һин өйөмдә иң ҡәҙерле ҡунағым булырһың.

- Рәхмәт, Хажмөхәммәт хажи, һүҙең раҫ. Йолаларыбыҙҙы беҙ ҙә үтәмәһәк, улар кемгә хәжәт? Тик минең, минән бигерәк мине бында илсе итеп ебәргән кешемдең бер үтенесе бар. Үҙегеҙ беләһегеҙ, илдә һаман тыныслыҡ юҡ. Бындай заманда оҙаҡлап, йолаларҙың һәр бөгөлөн теүәл итеп, бәлки, үтәп тә булмаҫ. Туған-тыумаса, дуҫ-иш, моғайын, беҙҙе аңлар һәм ғәфү итер, мөмкин ҡәҙәр ваҡытты ҡыҫҡартһаҡ ине.

- Аңланым, һин һорағанса эшләргә тырышырбыҙ.

Тағы ла бер көндән Сәғит яусы эшен башҡарып кире ҡайтып китте. Буласаҡ кейәү менән осраша алманылар, ул Бәләбәй яғында яңы ғәскәр ойоштороу менән мәшғүл ине. Күҙәнгә инеп, Сәғит үҙенең сәфәр һөҙөмтәләре менән Зәкиҙең атаһын һәм әсәһен таныштырҙы. Әхмәтшаһ илсегә рәхмәт йөҙөнән уның яурынына йәшелдән зиннәтле елән япты. Кейемдең матурлығына һоҡланып, Сәғит, быныһына тиклем Зәки әйткән икән, юҡһа, минең нимә ятҡанды бүтән кем белһен, тип уйланы.

**(Дауамы бар).**

✓ Бына бит телдең көсө, ҡөҙрәте ҡайһылай: кешегә ҡағылмайынса ла арауыҡ аша яман һүҙ, әшәке әр менән түбәнһетеп, кәмһетеп, уны йә өнһөҙ балыҡҡа әүерелдереп була... йә аңра һарыҡҡа!



ҠЫҪҠА ӘҢГӘМӘ



# БЕҘҘӘ ЛӘ...

## һәр театрҙағы кеүек

**Ижадсы өсөн уның баш ҡаламы, әллә унан ситтәме йәшәүе мөһим түгел. Быны беҙ республикабыҙ ҡалаларында урынлашҡан башҡорт театрҙарына ҡарап ҡына ла әйтә алабыҙ. Киреһенсә, уларҙа береһенән-береһе ҡыҙыҡлы премьералар сығып тора, уларҙың спектаклдәре Рәсәй буйынса иң яҡшылар исемлегенә инә. Актер Рафаэль ҒӘЙНУЛЛИН менән бөгөн Салауат дәүләт башҡорт театры тураһында әңгәмәләшәбеҙ.**

**"Алтын битлек" Милли театр премияһы сайтында баҫылған 2017-2018 ижад миҙгелендәге иң яҡшы спектаклдәр исемлегендә Салауат театрының ижад емеше лә бар. Быны театрҙың ҙур уңышы тип ҡабул итергә булалыр, моғайын?**

- Бер ижади миҙгелдә Рәсәйҙә ҡуйылған 100 иң яҡшы спектакль исемлегенә инеү бик һәйбәт күренеш. Быға тиклем дә театрҙың был премияның лонг-листына "Ерҙәштәр" спектакле менән эләккәне бар ине. Был юлы быңдай иғтибар "Глумов" спектакленә күрһәтелде. "Алтын битлек" эксперттары уны килеп ҡараны. Ҡағиҙәгә ярашлы, улар спектаклдәр тураһындағы фекерҙәре менән уртаҡлашмай. Һуңғы арала Башҡортостан театрҙары һәйбәт спектаклдәре менән ҡыуандыра, тигәнерәк дөйөм һүҙҙәр генә әйтелде.

**"Глумов" спектакле Островский пьесаһының заманса вариацияһымы? Һуңғы мәлдә классиканы заманлаштырыу модаға әүерелә, быны беҙ төрлө фестивалдәрҙә лә күрәбеҙ...**

- Салауат театры сәхнәһендә Островскийҙың пьесаһы ҡуйылғаны бар ине. 2007 йылда Рәсәйҙең атҡаҙанған, Башҡортостандың халыҡ артисы Олег Ханов уның "Һуңлап килгән мөхәббәт"ен ҡуйҙы. Унда мин Дормедонтты уйнайым. Ул - классика. Ә "Глумов" клоунадаға тартым. Островскийҙың был әҫәре төрлө театрҙарҙа күп тапҡырҙар ҡуйылған. Режиссер Антон Федоров та уны бик үҙенсәлекле итеп ҡуйҙы. Мин төп герой - Глумовты уйнайым. Ул юғары ҡатлам йәмғиәтенә эләгергә теләй, әммә улар уны ҡабул итмәй. Мин үҙемдең геройымдың ҡылыҡтарын күрәш тип атайым, сөнки йәмғиәткә үҙеңде күрһәтергә тырышыу ҙа барыбер көрәш бит. Көндәлек яҙа башлағас, спектаклдең башында уҡ, берәй ҡасан күрәге тейер, тип әйтә. Йәғни, алдағы көндәрҙә уны нисектер, кемгәлер ҡаршы ҡулланырға уйлай. Тимәк, ул алдан уҡ көрәшкә әҙерләнә.

**Билдәле актер, режиссер Әхтәм Әхәт улы Абушахманов Островскийҙың пьесаларының сәхнәләргә кире әйләнеп ҡайтыуын бөгөнгө кешенең аҡса уйлап ҡына йәшәүе менән бәйләгәйне. Һеҙ бының менән килешәһегеҙме?**

- Бөгөн генә түгел, гел шулай булған. Советтар ваҡытында ла, әлеге мәлдә лә бюрократия, ришүәтселек актуаль. Островский пьеса яҙған йылдарҙа ла актуаль булғандыр, сөнки уның әҫәрҙәре бик танылыу яулай. Тап шул аҡса, алдау, исемде, йәмғиәттәге урынды һ.б. "һатып" алыу менән бәйле булғаны өсөн. Кешеләрҙең бер-береһе менән аҡса мөнәсәбәттәре бер ҡасан да үҙгәрмәгән. Бушҡа әйтмәйҙәр бит, баҙарҙа ике алйот - береһе һата, икенсеһе һатып ала. Кем кемде ота? Һәр быуын Островскийҙы яҡшы аңлай, бигерәк тә Рәсәйҙә.

**Һеҙҙең тормош иптәшегеҙ Рәмзиә Мәксүтова ла танылған актриса, Өфө тамашасыһы уны бик ярата һәм көтөп ала.**

- Беҙ ғаиләбеҙ менән актерҙар, тип әйтһәм дә яңылышмаҫмын. Тимерхан улыбыҙ менән Хәҙисә ҡыҙыбыҙ әлеге мәлдә театрҙа 5 спектаклдә уйнай. Берәй спектаклгә бала роле кәрәк булһа, режиссерҙар ҙа актер балаларын алырға тырыша. Башҡортса матур һөйләшәләр, сәхнә артында үҫкәнлектән, актерҙың кем булыуын да, сәхнәнең нимә икәнлеген, унда үҙеңде нисек тоторға икәнен дә яҡшы самалайҙар. Быйыл йәй өсөһө лә әсәләре менән бергә "Беренсе республика" фильмында төшөләр. Бәләкәй ҡыҙыбыҙ Хазинаға әле октябрҙә 2 йәш тулды. Көнө буйы арып-талып, кино төшөргән майҙанда ашап, шунда уҡ йоҡлап йөрөгән ҡыҙыбыҙ киноға төшәм, тип уйламағандыр ҙа инде. Хәҙер фильмдың экрандарға сығыуын көтәбеҙ.

**Салауат театры бөгөн ниндәй хәстәрҙәр менән йәшәй?**

- Һәр театрға хас булған тормош менән йәшәйбеҙ. Был миҙгелдә театр 85 йыллыҡ юбилейын билдәләй. Ноябрь айында коллектив Татарстан Республикаһына, Туймазы ҡалаһына гастролдәргә барып ҡайтты. Яңы миҙгелдә Э. Йәнһүҙиндың "Көтмәгәндә булған хәл" спектакле премьераһы менән асҡайныҡ. Шунан тағы ла яңы эшкә тотондоҡ. Режиссер Илсур Ҡаҙаҡбаев Гөлсирә Ғиззәтуллина повесы буйынса "Йәннәт һулышы" исемле спектакль ҡуйҙы. Бар көс шуға һалынды быға тиклем. Премьераһы ноябрҙең аҙағында ғына булды. Унан һуң Яңы йыл тамашаһына әҙерләнә башлаясаҡбыҙ.

Ләйсән НАФИҠОВА
әңгәмәләште.

ТОРМОШ КҮРЕНЕШТӘРЕ

*Хәйҙәр ТАПАҠОВ*

### Ғатаулла ҡоҙоғо

Беҙҙең ауылдан ике-өс саҡрым ситкә, урман төпкөлөнә ҡарай китһәң һуҡмаҡ ҡырында ҡоҙоҡ бар. Таш аҫтынан һарҡып сыҡҡан инеш юлына тутыҡмай торған торба һалынғанға һыу улаҡтан йүгергәндәй ҡулай аға. Уның ағышына ауырлыҡһыҙ силәгеңде ҡуйырға, бер нимәһеҙ килһәң ҡуш усыңды тоторға мөмкин. Һалҡынлығы менән ҡулдарыңды өткән һыуҙы уртлаһаң тештәр ҡамашып китә, йәнеңә аңлата алмаҫлыҡ сафлыҡ бөркөлә. Ҡоҙоҡтоң тирә-яғы, эргәләге бәләкәй аҡлан матур итеп таҙартылған. Бер һүҙ менән әйткәндә, был ер ожмах төйөгә, бөхтәлек сығанағы. Беҙ бала саҡта уҡ уны кеше араһында күҙгә-башҡа салынып бармаған Ғатаулла исемле ағай эшләп ҡуйғайны. Эшләп ҡуйҙы ла үҙе баҡыйлыҡҡа күскәнсе шул тирәне тәртиптә, таҙалыҡта тотто. Хәҙер ул ҡоҙоҡто барыһы ла Ғатаулла ҡоҙоғо тип йөрөтә. Ауылыбыҙҙан билдәле кешеләр күп сыҡты, мәгәр уларҙың исемдәре ваҡыт үтеү менән онотолоп бара, ә бына япябай ауыл кешеһе Ғатаулланың исеме ҡолаҡта. Сөнки ул үҙенән һуң саф һыулы ҡоҙоҡ ҡалдырҙы.

### Йүнәлеш

Ул егет менән педагогия институтына бер осорҙа уҡырға инергә имтихан тоттоҡ. Бер бүлмәлә яттыҡ. Ул нишләптер беренсе имтихандарҙы ауыр тапшырҙы, иң мөһименән, тел фәненән иншаны икегә яҙҙы, әҙәбиәт фәненән бөтөнләй ҡыуылып уҡ сыҡты. Бик көйәләнеп, ҡара көйөп ҡайтып инде, минең һүҙ башлауымды ла көтмәй яндырайланып ҡул һелтәне: "Булманы. Хоҙай Тәғәлә миңә ярҙамын күрһәтмәне!"

Ваҡыт үтеү менән күрәм, теге егет бер ниндәй ауырлыҡһыҙ сәнғәт институтының актерҙар бүлегенә уҡырға инде, шунан икенсе курста уҡ уны спектаклдәргә йәлеп итә башланылар. Уҡыуын тамамлағас, төп театрҙарҙың береһенә эшкә саҡырҙылар. Хәҙер уның исеме театр һөйөүселәргә яҡшы таныш, атҡаҙанған исемдәре лә, төрлө конкурстарҙа алған премиялары ла бар.

Шаулап үткән, ҙур уңыш ҡаҙанған спектаклдең премьераһынан һуң шул танышым килеп мине ҡосаҡлап алды.

- Ҡотлайым, тамашаның уңышы һинең уйнауыңа бәйле. Йә, нисек йәшәп ятаһың әле?

- Рәхмәт. Шәп бит, әй, - тирә-яғына ҡоласын йәйҙе -, ошо инде минең икенсе йортом.

- Теге саҡ Алланың ярҙам итмәүенә һаман да үкенәһеңме?

- Юҡ, киреһенсә, ҡыуанам ғына. Алла бер ваҡытта ла әҙәм балаһын ташламай икән, ул һәр ваҡыт уның менән. Әгәр кәрәк тип тапһа, ярҙам итә, булыша, хата яҡҡа китергә йыйынһа, мәлендә үк йүнәлешен үҙгәртә. Әгәр һинең менән бергә уҡырға инһәм, минән насар, эшен белмәгән, яратмаған уҡытыусы сығыр ине. Иң дөрөҫө - йәнеңә Алла һалған һәләтте ҡулланып, уның йүнәлешенән барыу.

### Баҡа

Бала саҡта бер малайға "баҡа" ҡушаматын таҡтыҡ. Ни сәбәптән шулай атағанбыҙҙыр, Хоҙай шаһит, ҡарап тороуға шыпа ла баҡаға тартым ере юҡ ине уның. Күҙҙәгә лә һин дә мин, һөйләшеүе лә ҡәҙимгесә. Шул шыҡһыҙ атама уға ыҫҡынмаҫ өсөн йәбеште лә ҡуйҙы, бөтәһе лә уны шулайтып ирештереп йөрөтә башланы. Башта ул булмышына тағылған ҡолаҡҡа ятышһыҙ һүҙ менән шыпа ла ғына ризалашманы, үсекләй башлаһалар ягаға килеп йәбеште, талашты, ҡанға туҙғансы һуғышты. Шулайтып ғәҙелһеҙлеккә ҡаршы үҙенсә баш күтәреүе ине уның. Ни тиклем генә сәбәләнһә лә, һылашҡан ҡушаматынан айырыла, ҡотола алманы. Һуңынан, теләһәгеҙ нисек ҡыланығыҙ, тигәндәй, баш баҫып өндәшмәҫ булды. Мәктәпте тамамлағансы ул шул исем аҫтында йөрөнө, шунан яҡындағы ҡалаға барып, техникумға уҡырға инде. Унда тегене нисек атағандарҙыр, белмәйем.

Яңыраҡ уны осраҡлы рәүештә урамда тап иттем: ситтән ҡарап, шуға иғтибар иттем, ул ысынлап та баҡаға оҡшап ҡалған: дәү ҡорһаҡ, ҡамытыраҡ аяҡтар, аушанлап биреп атлап китеше лә килбәтһеҙ. Һиҫкәнеп киттем, уны бит ошо кимәлгә кҮмәкләшеп беҙ төшөрҙөк, өҙләкһеҙ үсекләп, күрмәлекле кәүҙәнән йәмһеҙ һын әүәләнек, баҡа фиғелен көсләп тиерлек аңына, йәненә һеңдерҙек. Бына хилаф эштең һөҙөмтәһе! Кешене өҙләкһеҙ алйот тип атап алйотҡа, ишәк, тип үсекләп ишәккә әүерелдереп була икән дә баһа. Бына бит телдең көсө, ҡөҙрәте ҡайһылай: кешегә ҡағылмайынса ла арауыҡ аша яман һүҙ, әшәке әр менән түбәнһетеп, кәмһетеп, уны йә өнһөҙ балыҡҡа әүерелдереп була... йә аңра һарыҡҡа!

✓ "һуғым-нуғым" тип һөйләһәк тә, ул һуғымдың нисек һуйылғанын һәм эшкәртелгәнен беләбеҙме беҙ? Ошо темаға тотонғас, таныштарымдың күбеһенән һораштым - береһе лә аныҡ ҡына яуап бирә алмай.



ИНТЕРНЕТТАН



# ГАЗЛЫ ҺЫУ...

## һимертә балаларҙы

■ Һыуҙы күп эсергә кәрәк тиҙәр, әммә табиптар быны сәләмәтлек өсөн хәүефле булыуын белдерә. Һыуҙы күп эскәндән һуң мейе эшмәкәрлеге боҙолоуы ихтимал. Бөйөрҙәр сәғәтенә 800-1000 мл һыу эшкәртә ала. Ошо күләм артып китһә, кеше организмында натрий балансы боҙола. Кемдең бөйөрө сирле, улар өсөн һыуҙы саҡ ҡына артыҡ эсеү ҙә хәүефле. Эксперттар билдәләүенсә, һыуҙы күп эсеү бөтөнләй һыу эсмәү кеүек үк берҙәй насар. Уртаса күрһәткестәр буйынса, кеше тәүлегенә 3-4 литр шыйыҡлыҡ эсергә тейеш. Әгәр ҙә әсе климатта йәшәйһегеҙ икән, был күләм тағы ла арта.

■ Баланың имеҙлеген башта үҙенең ауыҙына алып, шунан балаға биргән кешеләрҙе күргәндә һеҙҙә ниндәй тойғолар уяна? Шик юҡ, күптәр, былай эшләргә ярамай, тип яуаплаясаҡ. Ә бына Америка иммунологтары тап шулай эшләргә кәңәш итә. Сабый баланың организмы нығынһын өсөн кәрәк икән был. Табиптар фекеренсә, ололарҙың төкөрөгө менән файҙалы бактериялар ҙа күсә, улар иһә кескәй кешенең иммун системаһын булдырасаҡ.

Һынауҙар түбәндәгесә үткән. Унда ҡатнашыусы 128 әсәнең 30-ы - имеҙлекте ҡайнар һыуҙа бешекләгән, 53-ө һабынлап йыуған, 9-ы үҙе имеп таҙартҡан икәнлеге асыҡланған. Эксперттар балала аллергия һәм астма хәүефе менән бәйле антиесемдәр барлығын тикшергән. Әсәләре имеҙлекте имеп биргән балаларҙа астма һәм аллергия менән ауырыу ҡурҡынысы күпкә түбән булған. 10 айға еткәндә инде был балалар ҡәтғи санитар талаптар ҡуйылған мөхиттә үҫкән тиҫтерҙәренә ҡарағанда ныҡыраҡ булған.

■ Насар ғәҙәттәр менән көрәшергә кәрәк, тип яҙа "Российская газета". Әйтәйек, ошондай әүҙем көрәш һөҙөмтәһендә Рәсәйҙә 2009-2017 йылдарҙа алкоголь эсеү 4,5 литрға (кеше башына йылына 18 литрҙан 13,5 литрға тиклем) кәмегән. Хәҙер белгестәр рәсәйҙәрҙең тукланыуына ныҡлап тотонмаҡсы. Рәсәй Һаулыҡ һаҡлау министрлығының Үҙәк фәнни-тикшеренеү институты белгестәре татлы газлы эсемлектәргә акциз индерергә тәҡдим итә. Уның күләме газлы эсемлектең берәмләп һатыуҙағы хаҡының 20 процентынан кәм булмаҫҡа тейеш, ти улар. Татлы газлы эсемлек тыйыу талап иткән продукттарҙың береһе. Шәкәрҙән тыш, унда фосфор кислотаһы һәм тағы ла әллә күпме өйрәнелмәгән матдәләр ҡушыла. Улар кеше организмында тупланып, зыян килтереүе ихтимал. Һуңғы осорҙа балалар араһында күбәйгән һимеҙлек тә газлы эсемлектәр менән бәйле. Шәкәр ҡан баҫымын күтәрә, был инсультҡа килтерә. Рәсәйҙең Иҡтисад үҫеше министрлығы был тәкдимде хупламай. Был сара шәхси ойошмаларҙың үҫешен туҡтатасаҡ, заводтар ябыласаҡ, контрафакт тараласаҡ. Акциз индергәндән һуң кеше газлы эсемлек эсеүҙән туктаясаҡмы - быныһы ла билдәһеҙ. Кеше теге йәки был ризыҡҡа бала саҡтан күнегә. Бөгөн балалар аҙ хәрәкәтләнә, шул уҡ ваҡытта кәнфит-шоколадты ла, газлы эсемлектәрҙе лә күп эсә. Шуға ла балағыҙҙы былай насар ғәҙәткә өйрәтмәгеҙ, тип кәңәш итә табиптар. Әйткәндәй, Американың ҡайһы бер штаттарында һәм Мексикала акциз индереү тәжрибәһе бар. Тәмәке ҡиммәтләнеүе һөҙөмтәһендә Рәсәйҙә сигарет һатыу 2,5 тапҡырға кәмегән.

ҺАЙ, БАШҠОРТ АШТАРЫ!

# ОҘОН-ОҘОН АҒАЙҘАР КИЛЕР,

## һуғымың ҡайҙа, тиер...



**Йәнә ҡыш ҡыш килеп етте һәм ауылдарҙа һуғым һуйыуҙар башланды. Был халыҡтың туҡ, мул табынлы, көр кәйефле осоро. Нимә генә тигәндә лә, башҡорттоң тамағы ит менән туя бит инде. Был ҡанға һеңгән ғәҙәтте бер нисек тә онотоп булмай. Ит ашауҙың ниндәй генә зыянын уйлап табып яҙһалар ҙа, боҫорап бешкән ит еҫенән ауыҙ һыуы ҡойолоп китә шул.**

**Ҡалала йәшәүселәр ҙә "һуғымға" тигән һылтау менән ауыл яғына шыла ошо мәлдәрҙә. Һуғымда ҡатнашып йөрөмәгән хәлдә лә, ауыл табындарында бер ултырып һыйланыу үҙе бер ғүмер була. Ҡарынҡарталы, эсәк-ҡарынлы, ҡаҙы-тултырмалы, өлөш-өлөш итле һәм тоҙлоҡло һурпалы һуғым аштарына саҡырышыуҙар, ҡыҫтап-ҡыҫтап һыйлауҙар, һоғондорошоуҙар, уйын-көлкөлә, йыр-бейеүле мәжлестәр башланды.**

Һуғымдың бер нисә төрө була. Ул ҡорбан итенән (малынан) бер ни тиклем айырыла. Башҡорт халҡында һуғым өсөн йылҡы, һыйыр малы ҡулай иҫәпләнә. Шулай уҡ һарыҡ, кәзә лә һуғымлыҡ мал тип ҡарала. Бер йәшлек тана-торпо миҡдарын 4-5 һарыҡ-кәзә, 40 ҡаҙ, 60 өйрәк алмаштыра ала тип һаналған. Әммә ауылдарҙа әре мал салыуҙы ғәҙәткә индергәндәр инде. Беҙҙә ваҡ мал да, ҡош-ҡорт та һуғымға һаналмай, ҡаҙ-өйрәктәр айырым өмә булып, айырым бер мәжлес булып ҡабул ителгән.

"Һуғым-һуғым" тип һөйләһәк тә, ул һуғымдың нисек һуйылғанын һәм эшкәртелгәнен беләбеҙме беҙ? Ошо темаға тотонғас, таныштарымдың күбеһенән һораштым - береһе лә аныҡ ҡына яуап бирә алмай. Кемдәрҙер "карап торғаным булманы", "ҡатнашҡаным булманы", икенселәр "мин ярҙам итеп кенә йөрөйөм ул", өсөнсөләр "беҙ ашарға ғына ҡайтабыҙ" тип яуапланы. Ысынында, мин үҙем дә күп тапҡырҙар ҡарап та торҙом, ҡатнаштым да, әммә үҙ аллы тотонорлоҡ белем юҡ. Ваҡытында былдай эш менән булышҡанда ла, һуғым малының эсе ярылыуға, ҡыҙ-килендәр, ҡаушап, ҡәйнәнең күрһәтмәләрен көтә лә тора инек. Һәм күптәр ҙә шулай, күрәһең. Белгән ололарҙың ҡулы аҫтында ғына ҡыбырлайһың инде.

Һуғым темаһы буйынса белемселәрҙе эҙләп, гәзитебеҙҙең әүҙем авторҙарына мөрәжәғәт иттем, ауыл апайҙарына интернет аша яҙҙым, шылтыратып та ҡыҙыҡһындым. Ҡырмыҫҡалы районы Иҫке Бәпес ауылынан Фирүзә Абдуллина, Баймаҡ районы Таулыҡай ауылынан Зәһирә Оморҙаҡова, Байымдан Таңһылыу Вәлеева апайҙар менән бәйләнешкә инеп, уларҙағы һуғым тәртиптәре тураһында һөйләшеп алдыҡ. Таңһылыу апай был теманы мәғәнәле генә мәҡәл-әйтемдәр менән башланы әле:

- Һуғымың булмаһа, ҡыш та оҙая. Һуғымлығың - туймылығың (Беҙҙең һөйләш буйынса: һуғымдығың - туйымдығың). Оҙон-оҙон ағайҙар килер, һуғымың ҡайҙа, тиер (Оҙон ағайҙар тигәне - ҡыш айҙары). Һуғымың булмаһа, билбау аҫтың буш булыр - үәт!

- Матур бер мәл инде ошо һуғым, ҡаҙ өмәһе үткәргән ваҡыттар. Үҙебеҙ хәҙер әре мал тотмаһаҡ та, ғүмер буйы һуғымын да һуйҙыҡ, ҡош-ҡортон әле лә аҫырайбыҙ. Тәртиптәрен дә беләбеҙ, онотмайбыҙ, - тип һөйләй Зәһирә Оморҙаҡ ҡыҙы. - Ауыл халҡы мал көтөргә йыбанмай, ҡарап торһаң, өй һайын һуялар, йәштәр егерле - маҡтарға ғына ҡала. Эсәк-ҡарынын да, баш-тояғын да әрәм итмәйенсә, эшкәртеп, урын-еренә еткереп аш итеп ашайҙар. Шулай булырға тейеш, тәләфләнмәһен ул ер ҡото - мал ризығы.

Зәһирә апайҙың да, Фирүзә Абдуллинаның да ғаиләһендә малды үҙҙәренең ирҙәре салған. Уларҙы салыуға әле лә алып йөрөйҙәр икән. Ысынлап та, ауылда шулай "ҡулы йомшаҡ", "ҡулы килешле", "ҡулы тәмле" тигән кешеләр була шул. Ҡәйнәм күрешеһендәге ағайҙы "Рәфҡәт ҡоҙанан салдырайыҡ, ул салған ит татлы була", тип саҡырта торғайны. Иттең тәм-татында салыусының йөгөнтөһө бармылыр-юҡмылыр, һәр хәлдә, халыҡта ошондай инаныу йәшәй һәм уны бер ниндәй фәнни аңлатма менән дә еңеп булмай инде. Ҡыш буйы ашай торған ризығын нишләп ул теләһә кемдән салдырып торһон? Әлбиттә, "ҡулы тәмле"гә өндәшә. Таңһылыу апай ҙа шуны йөпләне: "Һуғым һуйыу өсөн йыл һайын төрлө кеше йәлеп ителәмәй, эш рәте белгән, өйрәнгән кешеләр менән һуялар - күршеләр, туғандар. Малды ла кем етте, шунан салдырмайҙар, сөнки берәүҙәрҙең салыуы ҡаты, тиҙәр һәм ите татһыҙ була. Беҙ бер йылы бер кейәүебеҙҙән салдырғайныҡ, ҡәйнәм ҡыш буйы һуҡранып сыҡты - ите татһыҙ, һерәү булды, тип..."

Малдың йәш ярым йә ике йәшлеген иң ҡулайлыһы, тип таба апайҙар. Йәшерәк булғанда ите бушаҡ, бәрәкәтһеҙ, өс, өстән үткән саҡта инде ите һиҙелерлек ҡатып өлгөргән була, тиҙәр. Көтөү туҡтау менән һуғымға тигән мал инселәнә. Кәртәгә инеүгә ул малды айырым ашатып һимертә башлайҙар. Мал аҙығын бешереп, бүрттереп ашаталар икән күп осраҡта. Ай ярым-ике ай тигәндә малдың ит араһына май йүгерә, һутлана. Таңһылыу апайҙың кәңәшен һүҙмәһүҙ килтерәйем әле: "Ашатыу - ваҡ картуфты бешереп, ярмаға ҡушып ашаталар. Ярманы ҡоролай ашатһаң, ҡыртыш майы ҡалын була, бешереп ашатһаң, эс майы күп була, шуға сиратлап ашаталар. Тоҙ ҡушып ашатһаң, ит татлы була. Тик һуйыуға 10 - 15 көн ҡалғас, тоҙҙо ялатмайҙар ҙа, ашатмайҙар ҙа, сөнки эсәк тишелеүсән, йыртылыусан була..."

Малды, ғәҙәттә, ҡар өҫтөнә нимәләр түшәп йәки йылға ярына алып барып боҙҙа һуялар. Йығып салыуҙы тик ир-егеттәр генә башҡара. "Бисмиллаһ, доғаһын уҡып сала, йәлап ҡаны ағыҙыла. Башын, тояҡтарын ҡырҡып алалар. Шунан күмәкләп 3-4 ир-егет малды аяҡтарынан тарттыралар, тиреһен һыҙыралар. Тирене ҡар өҫтөнә йәйеп

һалып, һыҙалар. Шунан матур итеп төрөп алалар. Эсәктәрен ҙур һауытҡа төшөрәләр, үт ҡыуығын алып ташлайҙар", - тип яҙа был турала Фирүҙә Абдуллина. Ауырлы, түлле ҡатындарҙың мал салғанды ҡарауын тыялар. Салынған малдың ҡаны һауытҡа ағыҙыла. Унан тояҡтар ҡырҡып алына һәм бөгәрҙәргә тишектәр яһалып, уларҙан тотоуға ҡулайлаштырып ептәр бәйләнә. Тиреһен һыҙырыуҙы ла ирҙәр башҡара. Был эш тамамланғас, ҡатын-ҡыҙҙар эсәк-ҡарын йыуыуға килә. Эс ярылғас, бауырға йәбешеп торған үт ҡыуығын алып ташлайҙар. Йылҡы малында үт булмай, ә ҡаҙҙарҙа була һәм унда ла шундуҡ иплəп кенә ысҡындырып алына. Үт һытылып киткәндә уның әсе тәме иткә һеңеп өлгөрә. Шунлыҡтан, был өлкәгә белмәйенсә тығылыу ярамай. Бер һаҡһыҙ хәрәкәт тә һуғым тәмен боҙорға мөмкин.

Ғөмүмән, һыйыр малы эсендә - ҡарындағы эшкәртелә торған ағзалар ошолар: ҡарын, ҡатлансыҡ (китап), тултырма эсәге, туҡ эсәктәр, ас эсәктәр, йоморо эсәк, бөйән (ҡутән эсәге, тышҡа сығып бөткән ере).

Ҡорһаҡты ярғас, ирҙәр бауыр-йөрәкте, үпкәне айырып алалар ҙа, ҡоторғайҙы буйлай телеп, элеп торалар. Бөйөрҙәр ҙә алына.

Берәү эсәктәрҙе тартып сығарып, улар араһындағы майҙы аралай. Ас эсәк, туҡ эсәк, тултырма эсәктәре айырып йыуыла. Эсәктәрҙе урта һәм һуҡ бармаҡты тығып-этеп әйләндереп сығыраһың. Шуға улар оҙон итмәй генә ҡырҡып бирелә. Әйләнгән эсәк киҫеген ағым һыуҙа сайҡатаһың. Тултырма эсәктәрен, йомороно айырып алаһың, улар бешекләнә торған эсәктәр менән ҡушылып китмәһен.

Эсәктәрҙең рәтен дә белеү зарур. Был мәғлүмәтте ла Танһылыу апай бирҙе: "Ас эсәк йоморо эсәктән башлана. Ҡырҡып алалар ҙа, йоморо яғын бәйләп һалып торалар. Ас эсәк тултырма эсәгенә килеп еткәс, бөтә. Тултырма эсәгенең икенсе осонан туҡ эсәк башлана. Тултырма эсәген айырым алып, әйләндереп, таҙа һыуға йыуып, айырым һауытҡа һалырға кәрәк. Сөнки уны, башҡа әйләндерелгән эсәктәр менән ҡарға һалып тапап ҡуйыуҙары, йыртыуҙары ихтимал. Туҡ эсәк баяғы йыуан эсәк менән бөтә.

Оло ҡарындан айырып ҡырҡып алғас, ҡатлансыҡты ҡап урталай яралар, һәр яртыһын тағы урталай ҡырҡаһың, сөнки таҙалауы ауыр була. Һәр ҡатын асып, араһын таҙалайһың, ҡағып, һелкеп төшөрәһең. Һәр өлөшөн йыуғанда ла китап биттәрен асҡан кеүек, асып йыуаһың. Ҡатлансыҡҡа һыу күп кәрәк. Оло ҡарын менән шул арала ике-өс ҡатын булыша. Ҡарындың тышҡы майҙарын һыҙырып алалар. Өҫтә ятҡан өлөшөн түнәрәтеп ҡырҡып алалар, аҫҡы өлөшөн ике ҡатын бер осонан ҡалҡытып күтәреп, ергә түңкәрә. Ҡарынды ла дүрт өлөшкә бүлеп йыуалар..."

Ҡарын, ҡатлансыҡ ярылып, киҫәктәргә бүлгеләнеп, ҡарҙа тапала һәм һалҡын һыуҙа сайыла (Ҡатлансыҡты күптәр "китап" тип кенә белә. Мин дә китап тип өйрәнгәс, ысын атамаһын әлеге апайҙарҙан һорап белдем әле). Эс майы ла айырым таҙа һауытҡа алына.

Эсенән бушатылған һуғымлыҡ бото ботса, ҡулы ҡулса итеп бүленеп, келәткә индереп аҫып ҡуйыла. Иттең таҙа булыуы, ҡанға, эсәк бысрағына буялмауы һуйыусыларҙың иплелегенән, бөхтәлегенән тора. Бында ла алабарман, арам кешеләрҙе ҡушмаҫҡа тырышалар.

Һуғым һуйып ятҡанды күргән, үткән-һүткән ауылдаштар ҙа өндәшмәй үтмәй был саҡта. Һәр кем теләген әйтеп китә:

- Һуғым һимеҙ булһын!
- Ите татлы булһын!
- Иҫән-һау ризыҡҡа яҙһын!

Йылғала, мәкелә сайылған эсәк-ҡарын эскә индерелеп бешекләргә төшөрөлә. Был эш оло ҡаҙанда башҡарыла, ғәҙәттә. Һыуына тоҙ, бер аҙ аш һеркәһе һалалар. Һыуы ҡайнап сығыуға ғына эсәк-ҡарын ҡабаттан алынып, ҡырып йыуыла, унан тағы йылғаға алып барып сайҡатыла. Хәҙерге ваҡытта бешекләнгән эсәктәрҙе эзбизгә һалып алыусылар ҙа бар. Был осраҡта уның һарылығы һыпырылып ҡына төшә. Ап-аҡ ҡына булып таҙара. Әммә мин һөйләшкән апайҙар был ысулды хупламай. Эсәк-ҡарындың тәме китә, тиҙәр.

Тултырма эсәктәре бешекләнмәй тип әйттек. Улар таҙа итеп йыуылып алына. Оло малдан ҙурҙан өс, йомороһо менән бергә дүрт тултырма сыға. Тултырманы төрлө урындарҙа төрлөсәрәк тығалар икән. Баймаҡтар унда бауыр, аҙыраҡ йөрәк һәм күплəп эс майын һала. Бөрйәндәр йөрәкте тулыһынса ҡуша. Берәүҙәр бында дөгө лә өҫтәй. Һәр кем үҙе белгәнсә яһап ала, тимәк.

Тултырмалар иттән айырым һауытта бешерелә, ҡайнап сығыуға әнә менән тишелә. Тишелмәгән осраҡта улар ярылырға мөмкин. Эсәк-ҡарын да иткә ҡушып һалынмай. Эсәктең барыбер ҙә үҙенсәлекле еҫ-тәме ҡала һәм был тәм һурпаны боҙа.

Айырым бешерелһәләр ҙә, тултырма ла, эсәк-ҡарын да табынға ит менән бергә бирелә. Ашҡа, ғәҙәттә, һуйыуҙа ҡатнашҡандарҙы, уларҙың ғаиләләрен, туған-тыумасаны алалар. Һәр кемдең алдына өлөш һалына. Элегерәк был өлөшләү дәрәжәгә, ололата статусҡа ҡарап бүленгән. Хәҙер ҙә шул самараҡ бүленә, әммә улай уҡ айырымлауҙар юҡ. Ашҡа тиклем һәр кем иттән, туҡ эсәктән, ҡарындан, ҡатлансыҡтан ауыҙ итә. Бәләкәс балаларға тиклем туҡ эсәкте һурырға бирәләр, эсәк араһы майлаһын, тиҙәр.

Һурпаны ла төрлө ерҙә төрлөсә итеп ҡуялар табынға. Бер ерҙә ул киң итеп ҡырҡып, тоҙлоҡта һапырып алынған ҡул һалмаһы аҙағынан һемерелә торған итеп ҡоротлап ултыртыла. Икенсе урындарҙа ваҡ бишбармаҡ, йәғни аш формаһында бирелә. Ҡайныр районында һурпалы бишбармаҡҡа ваҡлап ите лә турап һалына һ.б. Һәр хәлдә, һуғым һурпаһыҙ булмай.

Ашағандан һуң олораҡтар:

- Малдарығыҙ күп булһын,
Малдарығыҙ ныҡ уңһын!
Беҙ ашаған ерҙәргә,
Беҙҙең эскән ерҙәргә -
Хоҙай Тәғәлә ишетһен,
Малығыҙҙы ишәйтһен!
Хәләл ризыҡтар бирһен,
Хәләл мал-тыуар бирһен!
Рәхмәт һыйығыҙға! - тип һамаҡлап та ебәрә.

Аш алдынан өлөштәр бик мул итеп һалынғанлыҡтан, уны берәү ҙә бер ултырғанда ғына ашап бөтөрә алмай һәм ҡунаҡтар өлөштәрен үҙҙәре менән алып ҡайта. Малды салыусыны ла маҡтарға, теләктәр әйтергә онотмайҙар. Уны түргә ултыртып һыйлап, салыуын тотторол ҡайтаралар. Бына шундай булды бөгөнгө заман мал һуйыу йолаһы.

**Миләүшә СӘЙҒӘФӘРОВА**
**яҙып алды.**

*МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ*

# НАСАР ҒӘҘӘТТӘН...

## Аллаһ ҡотҡарыр

**Исламда сәләмәт рух һәм сәләмәт тән менән бәйле идея бик юғары. Ислам дине тәмәке тартыу кеүек йәмғиәтебеҙҙә ғәйәт ныҡ таралған насар ғәҙәткә кире ҡарай. Бөгөнгө көндә тәмәке тартыуҙың кеше һаулығына насар тәьҫир итеүен дәлилләгән кире ҡаҡҡыһыҙ фәнни фактар бар һәм улар бер үк нәмә тураһында һөйләй: тәмәке тартыу хәрәм эш. Сүрәләрҙә әйтелгән: "Үлтермәгеҙ һәм үҙегеҙҙе үлемгә этәрмәгеҙ! Аллаһ ысын мәғәнәһендә һеҙгә мәрхәмәтле!" "Һаулығыңды буштан-бушҡа исраф итмә. Исрафлыҡ - Иблестең туғандары, ә Иблес Аллаһҡа тоғро түгел".**

Тәмәке тартыусылар йыш ҡына: "Миндә һеҙҙең ни эшегеҙ бар?"- тип һорауҫан. Был бөтөнләй дөрөҫ түгел. Бигерәк тә махсус рәүештә билдәләнгән урында ғына түгел, һәр ҡайҙа - урамда ла, подъезда ла тәмәке тартҡан кешеләр үҙҙәренең дә һаулығын бөтөрә, башҡаларҙы ла аямай. Тартмаған кешенең өйөндә тәмәке көйрәтеү - иң ҙур әҙәпһеҙлек, сөнки бүлмәләрҙәге еҫ һеҙ сығып киткәндән һуң да оҙаҡ ҡына һаҡланып ҡаласаҡ.

Тәмәке тартҡан ҡатын-ҡыҙҙарға килгәндә инде, насар ғәҙәткә бәйле сирҙәр үпкә яман шеше, йөрәк өйәнәктәре, һ.б. менән генә сикләнеп ҡалмай әле. Әгәр ҙә буласаҡ әсә тәмәке тарта икән, балаһын да тәҙәлмәслек сирҙәргә дусар итеүе бик ихтимал. Ауырлы саҡта тәмәке тартыу ин тәүҙә ҡарындағы балаға кислород етмәүенә килтерә. Тәмәке тартыусы ҡатын-ҡыҙҙарҙың балалары ваҡытынан алда, йә ауырлыгы етмәй, йә ғәрип булып тыуа. Шулай уҡ бындай балалар төрлө инфекцияларға һәм астма ауырыуына бирешеүсән була, тип иҫәпләй табиптар. Әлбиттә, кешенең тәмәке тартырға йәки тартмаҫҡа хоҡуғы бар, әммә ләкин ҡатын-ҡыҙ йөклө сағында, йәки балалары алдында тәмәке тарта икән, ул балаларына бер ниндәй ҙә һайлау ҡалдырмай.

Иң ҡулайы - тәмәке бөтөнләй тартмау. Ҡатын-ҡыҙға тәмәке тартыу бер ҙә матурлыҡ та, сәләмәтлек тә өҫтәмәй. Бәғзе берәүҙәр тәмәкене тынысланыу, үҙен ышаныслы итеп тойоу өсөн тарта. Ундай осраҡтарҙа кешегә бары тик бер юл ҡала - Аллаһҡа ялбарыу. Ул ғына һеҙҙең күңелегеҙгә тынысланыу һәм ярлыҡау, ышаныс килтерер.

Әгәр ҙә кеше тарта икән, ул һис кисекмәҫтән был насар ғәҙәтте ташларға тейеш. Кеше үҙе генә ташлай алмай икән, быныӊ өсөн махсус дауаханалар, ысулдар бар. Рухи яҡтан ныҡ тороу өсөн доғалар уҡыу, зекер әйтеү зарур.

*СӘЛӘМӘТ БУЛ!*



# ИЛЛЕ ЙӘШТӘН ҺУҢ...

Ғөмүмән, беҙ кейгән кейем торошобоҙға туранан-тура йоғонто яһай. Меридиандарыбыҙ аша үткән нескә сигналдарҙы яһылыштырмаҫ өсөн синтетика кейем кейергә ярамай. Улар тәндә юғары статик көүәт барлыҡҡа килтерә, сәләмәт булып тыуған кешенең йәйға һалынған меридиандар әүҙемлеген боҙа. Шуға күрә, исмаһам, тәнгә тейеп торған кейемдәрҙе етендән һәм кизе-мамыҡтан булғанын кейергә тырышығыҙ. Улар статик электрҙы тупламай. Көн һайын эске кейемде алмаштырыу - эстетик көйһөҙлөк түгел, ә сәләмәт тормош рәүеше талабы, сөнки туҡымаға электр алмашыуын тотҡарлаусы киҫәксәләр ултыра. Етендән һәм кизе-мамыҡ туҡыманан булған таҙа кейем меридиандарҙың нормаль үткәреүсәнлеген гарантиялай һәм сәләмәтлеккә йоғонто яһай.

### Норбековтан тынысландырыусы васыят

Мирзакәрим Норбеков оҙаҡ йылдар боронғо философтарҙан өйрәнгән кешенең тәбиғәтте аңлауы һәм организмдың мөмкинлектәре тураһында заманса күҙаллауҙарҙы берләштергән үҙенсәлекле методика - организмдың үҙенән-үҙе тергеҙелеүенең туктауныҙ камиллаша барған системаһы буйынса эшләй. Кешегә ситтән бер ниндәй ҙә йоғонто яһалмай. Бары тик уның рухи торошлолоғон һәм тән сәләмәтлеген нормала тотоу, был донъялағы урынын аңлауҙа ярҙам күрһәтелә. Ошоларға өлгәшкәс, күп ауырыуҙар үҙенән-үҙе юҡҡа сыға.

Системаны ҡулланыуҙың яҡшы һөҙөмтәләргә килтереүен клиник тикшеренеүҙәр ҙә раҫлай. Мәҫәлән, сей яра, ашҡаҙан-эсәк тракты сирҙәре, дисбактериоз, ҡурылдай астмаһы, шәкәр сире, ҡалҡан биҙе һ.б. ауырыуҙар юҡҡа сыға.

- Сирҙән ҡотолоу өсөн һеҙ үткәндәрҙәге ауыр хәтирәләрҙән, хаталарҙан, үпкәләрҙән, ауыртыныуҙарҙан азат булырға тейешһегеҙ, - ти Мирзакәрим Норбеков. - Ошо юлда һеҙ сирегеҙ тураһындағы элекке белемгә тап килмәгән мәғлүмәт менән осрашасаҡһығыҙ.

Тап шул саҡта: ә сирегеҙҙең дауалап булмай йәки ауыр икәнен ҡайҙан беләһегеҙ икәнлеген уйлағыҙ. Бәлки, улар һеҙҙең ысынбарлыҡҡа тап килмәгән элекке белемегеҙҙәр? Ышанығыҙ, һеҙгә тиклем был юлдан меңдәрсә кеше үтте һәм үҙҙәренә йәшлек, сәләмәтлек ҡайтарып алды.

### Алты васыят

Хәҙер кире хис-тойғолар менән тиҙ үлем араһындағы туранан-тура бәйләнеш фән тарафынан раҫланған.

Организмда был ваҡытта имен булмаған биохимик һәм биоэнергетик үҙгәрештәр бара һәм ошо фонда ауырыуҙар барлыҡҡа килә. Шулай уҡ һыңғай хис-тойғоларҙың йәшлеккә һәм ғүмер оҙайлығына йоғонто яһауы билдәле. Шуға күрә Норбеков үҙенең васыяттарын үтәргә тәҡдим итә.

1. Һәр көндө тормошҡа ҡыуаныуҙан, бәхеттән, рухи осоштан башлағыҙ һәм ошо торошто көн дауамында һаҡлағыҙ, уны башҡаларға ла таратығыҙ. Әгәр был торош үҙенән үҙе килмәһә, уны яһалма булдырығыҙ һәм һаҡлағыҙ.

**С.КУЗИНА.**
**(Дауамы бар).**



## 10 ДЕКАБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.15 "Сегодня 10 декабря. День начинается". [6+]
9.55 "Модный приговор". [6+]
10.55 "Жить здорово!" [16+]
12.00 Новости.
12.15 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
17.00 "Время покажет". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.25 "Время покажет". [16+]
18.50 "На самом деле". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Чужая кровь". [16+]
22.30 Премьера. "Большая игра". [12+]
23.30 "Вечерний Ургант". [16+]
0.05 "Познер". [16+]
1.05 "На самом деле". [16+]
2.05 "Мужское / Женское". [16+]
3.00 Новости.
3.05 "Модный приговор". [6+]
4.05 Контрольная закупка. [6+]

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00 Вести.
11.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.40 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50 "60 минут". [12+]
14.00 Вести.
14.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.40 Т/с "Тайны госпожи Кирсановой". [12+]
17.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
18.50 "60 минут". [12+]
20.00 Вести.
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Т/с "Тайны следствия". [12+]
1.30 Т/с "Отец Матвей". [12+]

### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**9.00 Сәләм.**
**10.00 Т/с "Дом престарелых". [12+]**
**11.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**11.45 Специальный репортаж. [12+]**
**15.00 "Алтын". [12+]**
**15.30 "Книга сказок". [0+]**
**15.45 "Борсаҡ". [0+]**
**16.00 Гора новостей.**
**16.15 "Перекличка". [6+]**
**16.30 Новости (на рус. яз.).**
**16.45 "Красная кнопка". [16+]**
**17.30 Новости (на рус. яз.).**
**17.45 Интервью. [12+]**
**18.00 "100 имен Башкортостана". [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**19.00 "Тайм-аут".**
**20.00 Наука 102. [12+]**
**20.30 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.45 Бизнес-проба. [12+]**
**21.00 "100 имен Башкортостана". [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Күстәнәс. [12+]**
**22.30 Новости (на баш. яз.).**
**23.00 "Теге өсәү!" [12+]**
**23.45 "Весело живем". [12+]**
**0.00 Т/с "Дом на Озерной". [16+]**
**2.30 Бәхетнамә. [12+]**
**3.30 Спектакль "Моя семья". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.).**

## 11 ДЕКАБРЯ ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.15 "Сегодня 11 декабря. День начинается". [6+]
9.55 "Модный приговор". [6+]
10.55 "Жить здорово!" [16+]
12.00 Новости.
12.15 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
17.00 "Время покажет". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.25 "Время покажет". [16+]
18.50 "На самом деле". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Чужая кровь". [16+]
22.30 Премьера. "Большая игра". [12+]
23.30 Д/ф "Молния бьет по высокому дереву". К 100-летию Александра Исаевича Солженицына. [16+]
0.35 "На самом деле". [16+]
1.35 "Мужское / Женское". [16+]
2.35 "Модный приговор". [6+]
3.00 Новости.
3.05 "Модный приговор". [6+]
3.35 "Давай поженимся!" [16+]
4.25 Контрольная закупка. [6+]

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00 Вести.
11.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.40 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50 "60 минут". [12+]
14.00 Вести.
14.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.40 Т/с "Тайны госпожи Кирсановой". [12+]
17.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
18.50 "60 минут". [12+]
20.00 Вести.
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Т/с "Тайны следствия". [12+]
23.15 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
0.30 Д/ф "Александр Солженицын. Раскаяние". Фильм Сергея Мирошниченко. К 100-летию со дня рождения". [12+]
1.35 Т/с "Отец Матвей". [12+]

### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**9.00 Сәләм. [12+]**
**10.00 Т/с "Дом престарелых". [12+]**
**11.00 Наука 102. [12+]**
**11.30 Новости (на рус. яз.).**
**11.45 Бизнес-проба. [12+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00 Күңелем моңдары. [12+]**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 Новости (на баш. яз.).**
**14.45 "Весело живем". [12+]**
**15.00 "Алтын". [12+]**
**15.30 Йырлы кәрәҙ. [6+]**
**15.45 Бауырһаҡ. [0+]**
**16.00 Гора новостей.**
**16.15 "Семәр". [0+]**
**16.30 Новости (на рус. яз.).**
**16.45 "Городище - Уфа II: пленительный город загадок". [12+]**
**17.30 Новости (на рус. яз.).**
**17.45 Интервью. [12+]**
**18.00 Автограф. [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Деловой Башкортостан. [12+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**20.30 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.45 Новости (на рус. яз.).**
**21.20 Хоккей. КХЛ. "Йокерит" (Хельсинки) - "Салават Юлаев" (Уфа).**
**0.00 Новости (на баш. яз.).**
**0.30 Т/с "Дом на Озерной". [16+]**
**3.00 Спектакль "Осень". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.).**

## 12 ДЕКАБРЯ СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.15 "Сегодня 12 декабря. День начинается". [6+]
9.55 "Модный приговор". [6+]
10.55 "Жить здорово!" [16+]
12.00 Новости.
12.15 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
17.00 "Время покажет". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.25 "Время покажет". [16+]
18.50 "На самом деле". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Чужая кровь". [16+]
22.30 Премьера. "Большая игра". [12+]
23.30 "Вечерний Ургант". [16+]
0.05 Д/ф "Александр Коновалов. Человек, который спасает". [12+]
1.10 "На самом деле". [16+]
2.00 "Мужское / Женское". [16+]
2.50 "Модный приговор". [6+]
3.00 Новости.
3.05 "Модный приговор". [6+]
3.55 "Давай поженимся!" [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00 Вести.
11.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.40 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50 "60 минут". [12+]
14.00 Вести.
14.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.40 Т/с "Тайны госпожи Кирсановой". [12+]
17.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
18.50 "60 минут". [12+]
20.00 Вести.
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Т/с "Тайны следствия". [12+]
23.15 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.00 Т/с "Отец Матвей". [12+]

### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**9.00 Сәләм. [12+]**
**10.00 Т/с "Дом престарелых". [12+]**
**11.00 "Аль-Фатиха". [12+]**
**11.30 Новости (на рус. яз.).**
**11.45 Криминальный спектр. [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00 Күңелем моңдары. [12+]**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 Новости (на баш. яз.).**
**14.45 "Весело живем". [12+]**
**15.00 "Алтын". [12+]**
**15.30 "Городок АЮЯ". [0+]**
**15.45 "Ал да гөл. [6+]**
**16.00 Гора новостей.**
**16.15 "Физра". [6+]**
**16.30 Новости (на рус. яз.).**
**16.45 Имею право. [12+]**
**17.00 Дорога к храму. [0+]**
**17.30 Новости (на рус. яз.).**
**17.45 Интервью. [12+]**
**18.00 Хазина о Хазине. [0+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 "100 дней до совершенства". [12+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**20.30 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.45 Деловой Башкортостан. [12+]**
**21.00 Историческая среда. [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 "Песня года". Хит-парад. [12+]**
**22.30 Новости (на баш. яз.).**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Т/с "Дом на Озерной". [16+]**
**3.00 Бәхетнамә. [12+]**
**3.45 Спектакль "Любишь - не любишь?" [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.).**

## 13 ДЕКАБРЯ ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.15 "Сегодня 13 декабря. День начинается". [6+]
9.55 "Модный приговор". [6+]
10.55 "Жить здорово!" [16+]
12.00 Новости.
12.15 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
17.00 "Время покажет". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.25 "Время покажет". [16+]
18.50 "На самом деле". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Чужая кровь". [16+]
22.30 Премьера. "Большая игра". [12+]
23.30 "Вечерний Ургант". [16+]
0.05 "На самом деле". [16+]
1.05 "Время покажет". [16+]
1.55 "Мужское / Женское". [16+]
2.50 "Модный приговор". [6+]
3.00 Новости.
3.05 "Модный приговор". [6+]
3.55 "Давай поженимся!" [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00 Вести.
11.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.40 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50 "60 минут". [12+]
14.00 Вести.
14.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.40 Т/с "Тайны госпожи Кирсановой". [12+]
17.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
18.50 "60 минут". [12+]
20.00 Вести.
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Т/с "Тайны следствия". [12+]
23.15 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.00 Т/с "Отец Матвей". [12+]

### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**9.00 Сәләм. [12+]**
**10.00 Т/с "Дом престарелых". [12+]**
**11.00 Д/ф "Моя планета - Башкортостан". [12+]**
**11.30 Новости (на рус. яз.).**
**11.45 Позывной "Барс". [12+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00 Күңелем моңдары. [12+]**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 Новости (на баш. яз.).**
**14.45 "Весело живем". [12+]**
**15.00 "Алтын". [12+]**
**15.30 Байтус. [6+]**
**15.45 "Ҡош юлы. Балалар". [6+]**
**16.00 Гора новостей.**
**16.15 Сыйырсыҡ. [0+]**
**16.30 Новости (на рус. яз.).**
**16.45 "Аль-Фатиха". [12+]**
**17.15 Современник. [12+]**
**17.30 Новости (на рус. яз.).**
**17.45 Интервью. [12+]**
**18.00 Башҡорттар. [6+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 "100 дней до совершенства". [12+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**20.30 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.45 Криминальный спектр. [16+]**
**21.00 Уфимское "Времечко".**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Республика Live. [12+]**
**22.30 Новости (на баш. яз.).**
**23.00 Алтын тирмә. [6+]**
**23.45 "Весело живем". [12+]**
**0.00 Т/с "Жизнь и приключения Мишки Япончика". [16+]**
**2.45 Бәхетнамә. [12+]**
**3.30 Спектакль "Одолжи мне жеребца". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.).**

## 14 ДЕКАБРЯ ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.15 "Сегодня 14 декабря. День начинается". [6+]
9.55 "Модный приговор". [6+]
10.55 "Жить здорово!" [16+]
12.00 Новости.
12.15 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
17.00 "Время покажет". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.25 "Время покажет". [16+]
18.50 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.55 "Поле чудес". [16+]
21.00 Время.
21.30 Премьера. "Голос. Перезагрузка". [16+]
23.30 "Вечерний Ургант". [16+]
0.25 Д/ф Премьера. "Def Leppard": История группы". [16+]
1.20 Х/ф "Синий бархат". [18+]
3.40 "Модный приговор". [6+]
4.35 Контрольная закупка. [6+]

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00 Вести.
11.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.40 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50 "60 минут". [12+]
14.00 Вести.
14.25 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.40 Т/с "Тайны госпожи Кирсановой". [12+]
17.00 Местное время. Вести-Приволжского федерального округа.
17.25 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
18.50 "60 минут". [12+]
20.00 Вести.
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Т/с "Тайны следствия". [12+]
23.30 "Мастер смеха". Финал. [16+]
1.35 Х/ф "Всё вернется". [12+]

### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**9.00 Сәләм. [12+]**
**10.00 Т/с "Дом престарелых". [12+]**
**11.30 Новости (на рус. яз.).**
**11.45 Криминальный спектр. [16+]**
**12.00 "Йома". [0+]**
**12.30 Спектакль "Белые ночи Акмуллы". [12+]**
**14.15 Күңелем моңдары. [12+]**
**14.30 Новости (на баш. яз.).**
**14.45 "Весело живем". [12+]**
**15.00 "Алтын". [12+]**
**15.30 "Сулпылар". [0+]**
**16.00 "Гора новостей. [6+]**
**16.15 "Преград.net". [6+]**
**16.30 Новости (на рус. яз.).**
**16.45 Победить себя… [6+]**
**17.00 Д/ф "Моя планета - Башкортостан". [12+]**
**17.30 Новости (на рус. яз.).**
**17.45 Специальный репортаж. [12+]**
**18.00 "Йома". [0+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**19.00 Бирешмә. Профи. [6+]**
**19.45 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]**
**20.30 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.45 Позывной "Барс". [12+]**
**21.00 "100 имен Башкортостана". [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 "Моя семья". [6+]**
**22.30 Новости (на баш. яз.).**
**23.00 "Байыҡ-2018". [12+]**
**0.00 Т/с "Жизнь и приключения Мишки Япончика". [16+]**
**2.45 Спектакль "Дальше - тишина…" [12+]**
**5.30 Д/ф Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.).**

## 15 ДЕКАБРЯ СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.05 Х/ф "Ошибка резидента". [12+]
6.00 Новости.
6.10 Х/ф "Ошибка резидента". [12+]
7.55 "Играй, гармонь любимая!" [12+]
8.45 М/с "Смешарики. Новые приключения". [0+]
9.00 Умницы и умники. [12+]
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00 Новости.
10.10 Д/ф Премьера. "Арфы нет - возьмите бубен!" К юбилею Леонида Быкова. [16+]
11.10 Д/ф "Теория заговора". [16+]
12.00 Новости с субтитрами.
12.25 "На 10 лет моложе". [16+]
13.15 Х/ф "Небесный тихоход". [0+]
15.10 Д/ф Премьера. "Повелитель "Красной машины". К 100-летию легендарного тренера Анатолия Тарасова. [16+]
16.05 Премьера сезона. "Эксклюзив" с Дмитрием Борисовым. [16+]
17.40 Кубок Первого канала по хоккею-2018. Сборная России - сборная Чехии. Прямой эфир.
20.00 "Сегодня вечером". [16+]
21.00 Время.
21.20 "Сегодня вечером". [16+]
23.25 Х/ф "Асса". [12+]
2.15 Виктор Цой и группа "Кино". Концерт в "Олимпийском". [12+]
3.35 "Мужское / Женское". [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России. Суббота.
8.40 Местное время. Суббота. [12+]
9.20 Сто к одному.
10.10 "Пятеро на одного".
11.00 Вести.
11.20 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.40 Смеяться разрешается.
12.50 Х/ф "Личные счеты". [12+]
15.00 "Выход в люди". [12+]
16.15 Субботний вечер с Николаем Басковым.
17.50 "Привет, Андрей!" [12+]
20.00 Вести в субботу.
21.00 Х/ф "На обрыве". [12+]
1.00 Х/ф "Судьба Марии". [12+]
3.10 "Выход в люди". [12+]

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**7.45 Новости (на баш. яз.).**
**8.00 М/ф "Солан и Людвиг: Сырная гонка". [0+]**
**9.30 "100 дней до совершенства". [12+]**
**10.00 Следопыт. [12+]**
**10.15 Күстәнәс. [12+]**
**10.45 Т/с "Дом престарелых". [12+]**
**12.15 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**12.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.00 Тәмле. [12+]**
**13.30 "100 имен Башкортостана". [12+]**
**14.00 "Дарю песню. [12+]**
**16.00 "Байыҡ-2018". [12+]**
**17.00 Колесо времени. [12+]**
**18.00 Народный учитель РБ. [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**19.00 Республика Live. [12+]**
**19.30 Күңелем моңдары. [12+]**
**20.30 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.45 "100 имен Башкортостана". [12+]**
**21.15 Победить себя… [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Моя вершина. [12+]**
**22.15 Следопыт. [12+]**
**22.30 Итоги недели (на баш. яз.).**
**23.15 "Башҡорт йыры-2018". [12+]**
**0.00 Т/с "Жизнь и приключения Мишки Япончика". [16+]**
**2.45 Итоги недели (на баш. яз.).**
**3.30 Спектакль "Салават". [12+]**
**5.45 Д/ф Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.).**

## 16 ДЕКАБРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

4.20 Х/ф "Судьба резидента". [12+]
6.00 Новости.
6.10 Х/ф "Судьба резидента". [12+]
7.30 М/с "Смешарики. Пин-код". [0+]
7.45 "Часовой". [12+]
8.15 "Здоровье". [16+]
9.20 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.00 Новости.
10.10 Д/ф Премьера. "Наслаждаясь жизнью". К юбилею Юрия Николаева. [12+]
11.10 Д/ф "Теория заговора". [16+]
12.00 Новости с субтитрами.
12.25 Д/ф "Валерий Ободзинский. "Вот и свела судьба..." [12+]
13.20 "Наедине со всеми". [16+]
15.15 "Три аккорда". [16+]
17.10 "Лучше всех!" [0+]
18.55 Кубок Первого канала по хоккею-2018. Сборная России - сборная Финляндии. Прямой эфир.
21.15 "Толстой. Воскресенье".
22.45 "Что? Где? Когда?" Зимняя серия игр. [16+]
23.55 Х/ф Премьера. "Девушка без комплексов". [18+]
2.15 "Мужское / Женское". [16+]
3.10 "Модный приговор". [6+]
4.05 "Давай поженимся!" [16+]

### РОССИЯ 1

4.30 Х/ф "Личные счеты". [12+]
6.40 "Сам себе режиссёр".
7.30 "Смехопанорама" Евгения Петросяна.
8.00 Утренняя почта.
8.40 Местное время. Воскресенье.
9.20 Сто к одному.
10.10 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
11.00 Вести.
11.20 Аншлаг и Компания. [16+]
13.40 "Далёкие близкие" с Борисом Корчевниковым. [12+]
14.55 Х/ф "Мне с вами по пути". [12+]
18.50 "Всероссийский открытый телевизионный конкурс юных талантов "Синяя Птица".
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
23.00 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
0.30 Д/ф "Фронтовой дневник Александра Солженицына". Фильм Алексея Денисова. К 100-летию со дня рождения. [12+]
1.25 Т/с "Пыльная работа". [16+]
3.20 "Далёкие близкие" с Борисом Корчевниковым. [12+]

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**7.45 Новости (на баш. яз.).**
**8.00 М/ф "Фиксики". [0+]**
**8.30 "Йома". [0+]**
**9.00 "Бай". [12+]**
**9.30 "100 дней до совершенства". [12+]**
**10.00 "Перекличка". [6+]**
**10.15 "Выше всех!" [6+]**
**10.30 "Книга сказок". [0+]**
**10.45 Байтус. [6+]**
**11.00 "Сулпылар". [0+]**
**11.30 "Гора новостей. [6+]**
**11.45 Замандаш. [6+]**
**12.00 Моя семья. [6+]**
**12.30 Новости недели (на баш. яз.).**
**13.15 Алтын тирмә. [6+]**
**14.00 "Дарю песню. [12+]**
**15.45 Дорога к храму. [0+]**
**16.15 Историческая среда. [12+]**
**16.55 Баскетбол. Чемпионат России. Суперлига-2. "Уфимец" - "Динамо-МГТУ" (Майкоп).**
**19.00 Полезные новости. [12+]**
**19.15 Имею право. [12+]**
**19.30 Лидеры региона. [12+]**
**20.00 Әлләсе… [12+]**
**20.45 "Теге өсәү!" [12+]**
**21.30 Итоги недели (на рус. яз.).**
**22.15 Специальный репортаж. [12+]**
**22.30 "Красная кнопка". [16+]**
**23.15 Свидание с джазом. [12+]**
**0.00 Т/с "Жизнь и приключения Мишки Япончика". [16+]**
**2.45 Спектакль "Касатка". [12+]**
**4.45 Д/ф Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**5.30 Историческая среда. [12+]**
**6.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**6.45 Специальный репортаж. [12+]**

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# БЫЛ НИНДӘЙ ЫРЫУ ВӘКИЛДӘРЕ?




Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.

**47-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Косинус. Әрәмә. Келәм. Хажи. Ерәнсә. Арамһа. Алов. Таш. Әкиәт. Мусин. Аҡһым. Фәүзиә. Тәрбиәсе. Миндеғол. Ритм. Метр. Ужым. Ежов. Ниәт. Рота.

**Вертикаль буйынса:** Ишембай. Ангстрем. Нут. Килмәк. Диуана. Акр. Стәрлетамаҡ. Омметр. Мәсет. Әйле. Стәрлебаш. Федоровка. Кәүсәр. Навои. Әрмет. Әҙәм.

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1440 һижри йыл.*

| Декабрь (Рабигел ахыр) | Иртән-ге на-маҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 10 (3) дүшәмбе | 8:00 | 9:30 | 13:30 | 15:17 | 16:47 | 18:17 |
| 11 (4) шишәмбе | 8:01 | 9:31 | 13:30 | 15:16 | 16:46 | 18:16 |
| 12 (5) шаршамбы | 8:02 | 9:32 | 13:30 | 15:16 | 16:46 | 18:16 |
| 13 (6) кесе йома | 8:03 | 9:33 | 13:30 | 15:16 | 16:46 | 18:16 |
| 14 (7) йома | 8:04 | 9:34 | 13:30 | 15:16 | 16:46 | 18:16 |
| 15 (8) шәмбе | 8:05 | 9:35 | 13:30 | 15:16 | 16:46 | 18:16 |
| 16 (9) йәкшәмбе | 8:06 | 9:36 | 13:30 | 15:16 | 16:46 | 18:16 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**13, 14 декабрь "Урал батыр".** Үлемһеҙлек тураһында ҡобайыр. Башҡорт халыҡ эпосы буйынса 12+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**14, 15 декабрь "Мөхәббәт һәм нәфрәт"** (З. Биишева әҫәре буйынса), музыкаль риүәйәт 12+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**8, 9 декабрь "Что такое Новый год?"** (В. Щербакова), Яңы йыл тамашаһы. Башлана 16.00 0+

**8 декабрь "Лесная ярмарка"** (А. Рахманкулова) 0+

**9 декабрь "Большой секрет"** (А. Рахманкулова) 0+

Спектаклдәр башлана 12.00, 14.00

ТАМАШАЛАР

## ЙӘШТӘРСӘ...




**8 декабрҙә Өфөлә "Йәшлек-шоу - 2018" республика йәштәр фестиваленең гала-концерты уҙа. Сирек быуаттан ашыу йәштәр араһында популяр булған Башҡортостандың иң уңышлы музыкаль проекттарының береһе яңы тауыштар аса.**

Башҡортостандың Мәҙәниәт министрлыгы һәм Республика халыҡ ижады үҙәге ойошторған сара республиканың күп милләтле йәштәрен рухи-әхлаҡи һәм илһөйәрлек рухында тәрбиәләү, йәштәрҙең ижади кимәлен арттырыу маҡсатында уҙғарыла. "Йәшлек-шоу - 2018" гала-концерты "Башҡортостан" дәүләт концерт залында була. Быйылғы финалсылар башҡорт эстрадаһының популяр артистары менән бер сәхнәлә сығыш яһай. Мәскәүҙән махсус ҡунаҡтар - "Заман" төркөмө килә. Киске сәғәт 7-лә башлана.

## ЙӨРӘК ҺҮҘЕҢ




**Өфөлә йәнә "Йөрәк һүҙе" шиғри бәйгеһе ойоштороla. Шарт буйынса унда башҡорт телендә шиғыр һөйләүселәр дуэты ҡатнаша. Финал Башҡорт опера һәм балет театрында 17 декабргә билдәләнгән.**

Енеүсе дуэт, 2017 йылдағы кеүек үк, автомобиль менән бүләкләнә, тип хәбәр итте проект етәксеһе һәм сценарий авторы Наилә Сәфәрғолова. "Ошо проект минең өсөн ысын мәғәнәһендә йөрәктән сыҡҡан һүҙ булды. Был әлеге көндә республикабыҙҙағы һәм күп милләтле Рәсәйҙең башҡа төбәктәрендәге иң киҫкен проблемаға - туған телдәрҙе өйрәнеү, һаҡлау һәм үҫтереү мәсьәләһенә яуабым ул, - ти Наилә Сәфәрғолова. - Беҙҙең проект - йәмғиәтте борсоған проблемалар яңғыраған, йөрәк менән йөрәк һөйләшкән халыҡ трибунаһы тип тә әйтергә мөмкин".

Сәхнәлә танылған шағирҙар һәм актерҙар, музыканттар һәм журналистар, шиғриәт һөйөүселәр күс һынаша. Ойоштороусылар һүҙҙәренсә, шиғри бәйгә элекке форматта уҙа, ләкин сәхнә биҙәлеше һәм сценарий - яңы. Проекттың ижади төркөмө - рәссам Альберт Нестеров, режиссер Сулпан Асҡарова, композитор Илшат Яхин, видеобиҙәлеш рәссамы Фәрхәд Ихсанов, видеомонтаж инженеры Әлфиә Арыҫланова. Рәсәйҙең башҡа төбәктәренән һәм сит илдәрҙән ҡунаҡтарҙың килеүе көтөлә.

## ҠЫЛ ҠУМЫҘ ҺӘМ...




**17 һәм 18 декабрҙә Өфөлә III "Аманат" башҡорт халыҡ музыка ҡоралдарында уйнаусыларҙың республика конкурсы ойоштороla. Бәйге ҡыллы номинациялар - думбыра һәм ҡыл-ҡумыҙ өсөн генә уҙғарыла.**

"Был көнгәҙәк - тап ошо ҡоралдарҙа башҡарыуҙы үҫтереү кимәлен асыҡларға, шулай уҡ уларҙы танылыу яулаған ҡурай һәм ҡумыҙ менән бер рәттән үҫтерергә кәрәк. Бала тыуа икән, ул үҫергә тейеш, ти башҡорттар. Бында ла шулай - думбыраны һәм ҡыл-ҡумыҙҙы сәнғәт училищеһында һәм институтында 90-сы йылдарҙан башлап өйрәнәләр, Милли халыҡ уйын ҡоралдары оркестры, оҫта инструменталистар, тәжрибәле уҡытыусылар бар. Конкурс уҙғарырға ла ваҡыт етте", - тип үҙенең фекерҙәре менән бүлешә З.Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт институтының башҡорт музыкаһы факультеты деканы Азат Айытҡолов.Конкурста балалар музыка мәктәптәре, балалар сәнғәт мәктәптәре уҡыусылары, балалар ижад йорттары һәм урта дөйөм белем биреү мәктәптәре тәрбиәләнеүселәре, музыка колледжы, Өфө дәүләт сәнғәт институты студенттары һәм профессиональ башҡарыусылар ҡатнаша.

*АФАРИН!*

# РОМАНДЫҢ СӘХНӘ ЯҘМЫШЫ

**Республиканың 100 йыллыҡ юбилейына әҙерлек сиктәрендә башҡорт театрҙары репертуары яңы әҫәрҙәр менән тулылана. М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театрында Зәйнәб Биишеваның "Кәмһетелгәндәр" романы буйынса ҡуйылған спектакль премьераһы ла шундайҙар рәтенән. Был романдың сәхнә тормошо менән "йәшәй" башлауына режиссер Мәсәлим Күлбаев, инсценировка авторы Владимир Жеребцов, рәссам Юлиә Ғиләжева, хореограф Рәмизә Мөхәмәтшина, композитор Ришат Сәғитов сәбәпсе булды.**



Әҙибәнең төп әҫәрен сәхнәләштереүгә тотоноу - ул ҙур ҡыйыулыҡ. Әлбиттә, 2 сәғәтлек сәхнә вариантына тотош романды һыйҙырыу мөмкин булмаған хәл. Әммә тамашасы бер быуаттан ашыу элек Оло Эйек буйында барған тарихи ваҡиғаларҙың ипкенен яҡшы тоя алды. Ҡағиҙә булараҡ, бөгөн сәхнә киңлеген көнкүреш әйберҙәре менән тултырып биҙәүҙән баш тартыла. Бында ла ул ябай - сәхнә уртаһына ҡоролған урындыҡта бара бар ваҡиғалар: тотош ил кимәлендәге һынылышлылары ла, һәр геройҙың үҙенең эске кисерештәре лә. Романдағы ваҡиғалар ҙа шулай уҡ ябай һәм ҡоро итеп һөйләнелә. Спектакль рус телендә барһа ла, башҡорт һүҙҙәрен ҡулланыу диалогтарға үҙенсәлек өҫтәй.

Зәйнәб Абдулла ҡыҙының "Кәмһетелгәндәр"е һәр беребеҙгә ныҡ ҡәҙерле. Үҫмер саҡта уны ҡат-ҡат уҡығанбыҙ, образдарҙы, ваҡиғаларҙы күңелебеҙҙә үҙебеҙсә һүрәтләп, биҙәп бөткәнбеҙ. Улай ғына ла түгел, мәктәптә белем алған тарих китаптары аша түгел, тап ошо роман аша халҡыбыҙҙың үткәнен белгәнбеҙ. Башҡорттоң көнкүреше, кәсептәре башлыса уның аша таныш барыбыҙға ла. Уның аша беҙҙең йөрәктәрҙә халыҡ фольклорына һөйөү уянған, йырҙар, бәйеттәр, хатта йондоҙҙар ғилеме, уларға бәйле легендалар ҙа беҙгә ошо әҫәр аша килгән. Уның аша беҙ халҡыбыҙҙың менталитетын тойомлағанбыҙ, яуызлыҡ булмаһа, изгелектең баһаһы булмаҫын аңлағанбыҙ. Ҡайһы саҡта мөхәббәттең йәмғиәттең яҙылмаған ҡанундарынан өҫтөн була алыуын аныҡ миҫалда күргәнбеҙ.

Был исемлекте оҙаҡ дауам итеп булыр ине. Ошо тойғоларҙы ҡабаттан яңыртырға теләү өмөтө менән был спектаклде ҡарарға ярамай. Зәйнәб Биишеваның геройҙары, тәү сиратта, үҙҙәре йәшәгән заманда булған мөһим тарихи ваҡиғаларҙа ҡатнашыусылар. Уларҙың һәр береһенең алдында ошо көрәштә үҙенең урынын табыу бурысы тора, кем - кемгә дошман, кем дуҫ? Ошо туғандар, ауылдаштар миҫалында беҙ граждандар һуғышының бар трагедияһын күрәбеҙ. "Граждандар революцияһында еңеүселәр булмай, граждандар һуғышында ҡорбандар ғына була", - режиссер Мәсәлим Күлбаев спектаклдең төп йүнәлешен шулай билдәләгәйне. Һәр һуғыш, бигерәк тә бер ил эсендә барған граждандар һуғышы, ул бөйөк ҡаһарманлыҡ түгел, ә халыҡ өсөн бөйөк трагедия. Спектаклде ижад итеүселәр тап ошо хәҡиҡәткә баҫым яһай. Һәм был трагедия ҡайҙалыр түгел, Оло Эйек буйында ғына бара, тап шунда ҡорбандарҙың ҡаны түгелә.

Әммә әҫәрҙе белеү һеҙҙең файҙаға ғына. Мәҫәлән, дин һәм йолаларҙы еңгән һөйөүҙе күтәрә алмауҙан һәләк булған Сәлимәнең ҡылығын нисек аңлар инегеҙ? Шулай ҙа ҡайһы бер нәмәләргә, әйтәйек, Сәрбиямалды иҫ киткес сибәр актриса Карина Йәрмиеваның уйнауына аң аҙаҡҡаса ҡаршылашып маташа. Яуыз Сәрбиямалдың шундай һылыу булыуы мөмкин түгел һымаҡ. Ғөмүмән, спектакль актерҙарҙың һәйбәт эштәре менән дә иҫтә ҡала. Элина Гусева тәбиғәте менән үҙе лә бик ихлас, эскерһеҙ, алсаҡтыр, моғайын, уның Йәнеше лә шундай килеп сыҡҡан. Вадим Ҡылысовтың баһадир, көрәшсе Хамматты тышҡы ҡиәфәтенән бигерәк, эске тулылығы менән уйнауы тамашасыны ышандырҙы. Хәйер, мең тапҡыр ишеткәнсе, бер тапҡыр барып күрегеҙ. Рус труппаһы ҡуя тимәгеҙ, был спектакль башҡорт тамашасыһы иғтибарына ла лайыҡ. Әлегә был әҫәрҙең сәхнә яҙмышына оҙон ғүмер теләйек.

**Ләйсән ДАЯНОВА.**

*ТЕЛЕБЕҘ ЫНЙЫЛАРЫ*

**Халҡыбыҙҙа шундай һутлы һәм тере ҡуҙҙай баҙрап тороусы, ынйы кеүек аҫыл һүҙҙәр күп. Улар төрлө һүҙлектәргә инеп, халҡыбыҙҙың алтын фондын тәшкил итә. Үкенескә күрә, һуңғы быуын яҙыусыларының әҫәрҙәренә лә ул һүҙҙәр һирәк инә, улар, асылда, төпкөл ауылдарыбыҙҙа йәшәүсе инәйҙәребеҙҙең, олатайҙарыбыҙҙың тел осонда тере көйө йәшәй. Ул ынйыларҙы беҙ гәзитебеҙҙә "Әсәйем лөғәте" рубрикаһында бирә барабыҙ, әлбиттә. Хәтергә төшөрөүҙе дауам итәйек.**

## АТА-БАБАҢ ҠАЛДЫРҒАН ҺҮҘ

**Баштаҡ, баш-баштаҡ** - шаян; алда йөрөүсе.
**Баштире** - бөтә яҡлап.
**Башырыу** - ошаҡлау.
**Безгәләк** - тик тормаҫ.
**Бейаға** - ҡайнаға.
**Бейбаштаҡ** - баш-баштаҡ.
**Бейем** - ҡәйнә.
**Бейә ҡонан (ҡонажын)** - ике йәштән өс йәшкә тиклемге бейә.
**Бейәнеү** - инаныу.
**Белек** - баһа, бәҫ.
**Белемсе** - бағымсы; күрәҙәсе; уҡымышлы, белгес.
**Белеш** - башҡорттоң урыҫ дуҫы.
**Беләү, беләү таш** - бысаҡ үткерләй торған таш.
**Берауым** - бер аҙ.
**Бер көйлө, бер ҡыйлы** - аҡылға еңел.
**Бергүтәрәм** - ауыр.
**Берләс** - яңғыҙ.
**Берләтә** - берҙән-бер, бер тапҡыр.
**Бер остоҡ** - саҡ ҡына.
**Беррәт** - бер саҡ.

**(Дауамы. Башы 43-47-се һандарҙа).**

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

## КӨСЛӨК БАРҘА ҮСЛЕК БАР

Дошман менән дуҫ булһаң, билеңдә балтаң булһын.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Кеше ярһыуы көрәшкә егелмәгән байлыҡ юҡ, кешенең күҙ йәштәренә мансылмаған ҡыуаҡлыҡ юҡ, кеше ҡаны түгелмәгән бер киҫәк кенә лә ер юҡ.

**(А. Грюн).**

Ҡартлыҡтың аҙығы - аҡыл, шуның өсөн йәшлегеңдә ҡартлыҡта аҙыҡһыҙ ҡалмаҫыңды хәстәрлә.

**(Леонардо да Винчи).**

...Иң аҡыллыһы ошондай ауыл хужалығы алымы булыр: яҡшы климат булдырығыҙ, тейешле ашлама менән тәьмин итегеҙ һәм кешеләргә үҙҙәренсә үҫтерергә мөмкинлек бирегеҙ. Бына шул саҡта улар һеҙҙе аптыратасаҡ.

**(Макгрегор).**

Кеше фәрештә лә, хайуан да түгел, һәм уның бәхетһеҙлеге шунда: ул ни тиклем фәрештә булырға ынтыла, шул тиклем хайуанға әйләнә бара.

**(Б. Паскаль).**

Өс кешене бергә йыйығыҙ һәм улар араһында һеҙ бер тиранды, уның бер фекерҙәшен һәм... бер ҡорбанды күрерһегеҙ.

**(П. Буаст).**

Тәбиғәт бер ваҡытта ла хаталанмай: әгәр ҙә ул был донъяға алйотто тыуҙырған икән, тимәк, шулай кәрәк булған.

**(Г. Шоу).**

Кеше яңғыҙы ғына яңылышмай. Яңылышып, ул үҙ хатаһын тирә-яҡтағыларға тарата.

**(Сенека).**

Беҙҙең тормошобоҙҙағы күңелһеҙлектәрҙең яртыһы "Юҡ" тигән һүҙҙе тиҙ генә әйтмәй, "Эйе" тигәнен тиҙ генә әйтеү менән бәйле.

**(Бернард Шоу).**

Сынйырҙарын ысҡындырыу өсөн кешегә бар мөмкинлектәр һәм саралар бирелгән.

**(Оноре Мирабо).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер аҡыл эйәһе урам буйлап йүгергән кешене туҡтата ла:**
**- Ҡайҙа ашығаһың? - тип һорай.**
**- Үҙемә һәм ғаиләмә туҡланыр ризыҡ эҙләйем,- тип яуаплай тегеһе.**
**- Ә ул ризыҡ һинән алда йүгерә һәм уны ҡыуа төшөргә кәрәк икәнен ҡайҙан беләһең? - ти аҡыл эйәһе. - Бәлки ул, киреһенсә, һинең арттан киләлер һәм һиңә туҡтап, уны көтөп торорға кәрәктер?..**
**Ҡайһы саҡта беҙ үҙебеҙҙең иң мөһим юлыбыҙҙы йүгереп үткәнебеҙҙе һәм уның артта ҡалғанын аңламайбыҙ шул..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**

«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 7 декабрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4077
Заказ - 2252/12